ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16-22 июль (майай) 2016

№29 (707)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 1 июлдән 30 августҡа тиклем 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда яҙылыу иғлан ителде. Хаҡтар 2016 йылдың икенсе яртыһындағыса, йәғни 50665 индекслы гәзитебеҙгә 574 һум 32 тингә яҙыла алаһығыҙ. Ошо арауыҡта "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән 20 кеше 2017 йылға "Башҡортса дини календарь", өс кеше Флүр Ғәлимовтың "Аҙғын тәүбәһе", шулай уҡ башҡа китаптарға лайыҡ буласаҡ. Быйылғы икенсе ярты йыллыҡ өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгәндәр 15 августҡа тиклем яҙылып, гәзитте сентябрҙән алдыра ала. 4 айға яҙылыу хаҡы - 382 һум 88 тин.**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Аҡыллы ғына булһаң да...** муттар тоҙағына эләгеп ҡуяһың 3



**Аҙашып китһәң дә...** күңел күтәренкелеген һаҡла! 6



**Ауыл хужалығы иҫәбен алыу...** ауылды һаҡлап ҡалыуға бер аҙым ул 8-9



**Һөйөүҙе яҙыу ғына аҙ,** уны кисереп йәшәргә кәрәк 10



**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙ атайығыҙҙан ниндәй сифаттар үҙләштерҙегеҙ, үҙегеҙ уландарығыҙға ниндәй ир-егет тәрбиәһе бирәһегеҙ?

*Хөрмәтулла ҮТӘШЕВ, Рәсәй һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, өс бала атаһы:* Бөгөн йәштәр араһында халҡыбыҙ тарихы менән ҡыҙыҡһыныу арта бара. Ул шулай булырға тейеш тә. Тамырҙарыбыҙға, ырыуыбыҙға булған былдай ҡыҙыҡһыныуҙы беҙҙә бала саҡтан атайым тәрбиәләне. Көрәшсе Ғаззали батырҙы республикабыҙҙа белмәгән кеше һирәктер. 1909 йылда Хәйбулла районының Кәрим ауылында донъяға килеп, 9 йәштә генә етем ҡалған атайым тормош һынауҙарына бирешмәгән. Ысын көрәшселәргә генә хас ҡыйыулыҡ, сәм, көс, таһыллыҡ уға теләһә ниндәй ҡаршылыҡтарҙы ла еңеп сығырға ярҙам иткәндер, тиеж. Тап ана шул сифаттары уға Бөйөк Ватан һуғышынан да түше тулы орден-миҙалдар менән еңеүсе булып ҡайтырға булышлыҡ иткән. Һуғыш башланған көндән алынып, 1946 йылда ғына ҡайтып төшә ул ауылына. Ҡайта ла, ең һыҙғанып колхоз хужалығын, ярым емерек ауылын аяҡҡа баҫтырыуға тотона; әсәйемә өйләнеп, һигеҙ бала тәрбиәләп үҫтерәләр. Атайым оҙаҡ йылдар бригадир булып эшләне, аҙаҡ мал көттө. Бына шул йылдарҙа ул беҙҙе, балаларын, йыш ҡына үҙе менән ҡырға алып сығыр булды. Боронғоно һөйләр, ер-һыу атамаларының тарихын ентекләп тасуирлар ине. Әле лә иҫемдә: "Бына ошонда ике батыр көрәшкән" йәки "Зым-зыя ғәйеп булған аҫау айғыр бына ошо үҙәктә табылып, кешнәп ебәргән, шуға ул Айғырүҙәк тип атала" һәм башҡа шундай бихисап тарихтары һеңеп ҡалған күңелемә. Шулай бергәләшеп, үҙ көсөбөҙ менән йорт һалдыҡ, кәртә-ҡура ҡаралтыларын төҙөнөк. Ағас артынан урманға барабыҙмы, бесән эшләйбеҙме, көтөү көтәбеҙме - атай эргәһендә була инек. Ул беҙгә өгөт-нәсихәт уҡып торманы, хәҙер аңлауымса, үҙ өлгөһөндә, үҙ ғәмәлдәре һәм сифаттары аша эшкә, сыҙамлыҡҡа һәм ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырға өйрәткән улдарын. Үҙе кеүек, тормошта көрәшсе һәм еңеүсе булырға өйрәткән. Үҙем дә улдарымда тап ана шул сифаттарҙы күрергә тырышам. Йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәйҙәр былай. Айтуған менән Азамат икеһе лә юғары белемле юристар, эштәрендә һынатмайҙар, тап ҡартаталары өйрәткәнсә, һәр эшкә саялыҡ менән тотоналар. Кесе улыбыҙ әлегә мәктәптә уҡый, ул да ағаларына оҡшар, тип ышанам. Бәләкәй саҡтарынан ауылда йыш булып, тыуған телдә һөйләшеп, шәжәрәбеҙҙе өйрәнеп, нәҫел-тамырҙарына ҡыҙыҡһыныу менән үҫтеләр. Ҡартаталары - Ғаззали батыр призына үткәрелгән көрәшселәр ярыштарын барып ҡарап ҡайтыу ҙа үҙе бер оло тәрбиә мәктәбе улдарым өсөн, тип уйлайым.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ЯҠШЫ ХӘБӘР!

## АРЫҪЛАНДАР ТОРҒАН ЕР...

**"Башҡортостан" милли паркында Рәсәй ғалимдары донъялағы берҙән-бер мәмерйә арыҫландары "зыяратын"да ҡаҙыныу эштәрен дауам итә.**



Был урын былтыр Иманай мәмерйәһендә табыла. Донъяла быға са мәмерйә арыҫландарының ҡалдыҡтары күпләп һаҡланған урынды бер тапҡыр ҙа тапмағандар. Табыштың яҡынса йәше 35 меңдән 200 мең йылға тиклем тип күҙаллана. Ғилми экспедиция 11 июлгә билдәләнгән. Былтыр ғалимдар ҡалдыҡтарҙың яртыһын ғына: 10 оло арыҫлан (9 ата һәм бер инә) ҡалдығын ҡаҙып ала. Әлегә бер арыҫландың ғына баш һөйәге тергеҙелгән. Археологтар йәмғеһе 500 ҡалдыҡ таба. Бынан тыш, мустьер эпохаһы кешеһенең таш ҡоралына ла юлығалар.

АФАРИН!

## МИЛЛИ БЕЙЕҮ СӘНҒӘТЕНӘ...

### балаларҙы ла ылыҡтыра "Байыҡ!"

**Башҡорт бейеү сәнғәтен үҫтереүгә ғәйәт ҙур өлөш индереүсе "Байыҡ" балалар телевизион бәйгеһе йыл һуҙымында алып барылған сәмле ярышҡа йомғаҡ яһаны. Үткән шәмбелә Күгәрсен районының "Мораҙым тарлауығы" тәбиғи паркы, һәр йылдағыса, аллы-гөллө милли кейемдәге балаларҙың шау-гөрө менән тулды. Байрамды Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Ирек Мөхәмәтдинов, мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев һәм БР Дәүләт Йыйылышы -Ҡоролтай депутаттары Хәләф Ишморатов менән Ринат Нагаев тәбрикләне.**

**(Дауамы 11-се биттә).**



Кинйә Ҡотлоғолов фотоһы.

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АУЫЛДАРҒА...
## ярҙам итәйек

***Байгилде МОТАЛЛАП, яҙыусы:*** Башҡорт халҡының бишеге - ауыл. Ҡалаға күсеп киткән йәштәр, нисек кенә итһәк тә, башҡа мөхиткә эләгә, күп осраҡта телде лә һаҡлай алмай, милли мәҙәниәткә лә битарафлыҡ күрһәтә. Ә ауылда бөтәһе лә мотлаҡ әсә телендә һөйләшә, үҙ йолаларыбыҙҙы тотоп йәшәй. Шуға, иң тәүҙә ауылды һаҡлап ҡалыу мәсьәләһе һәр кимәлдә күтәрелергә тейеш. Хәҙер бик күп ауылдарҙа мәктәптәр, мәҙәниәт һәм медицина учреждениелары ябылыуы, хужалыҡтарҙың тарҡалып бөтөүе хафаланырға, кисекмәҫтән тейешле саралар күрергә сәбәп. Шуға күрә, милләтебеҙҙең зыялы кешеләре һуңғы йылдарҙа яйлап ҡына үҙ йүнен үҙе күрә башлап, малын ишәйтеп, шәхси эшен асып, ер эшкәртә башлаған ауыл халҡына иғтибарын йүнәлтһен ине. Кемдеңдер финанс йәһәтенән ярҙам итергә мөмкинлеге барҙыр, кемдеңдер аҡыллы кәңәше лә файҙа килтерергә мөмкин. Берәүһе ауыл ерендә бәләкәй генә булһа ла хужалыҡ булдырып, ауыл кешеһенә эш бирә, икенсеһе төрлө сетерекле мәсьәләләрҙе хәл итергә ярҙамлаша ала. Был зыялыларҙың заман талаптарына яуап биргән иң ҙур ярҙамы булыр ине. Мәҫәлән, үҙ эшен асыр өсөн ауыл кешеһе ниндәй документтар йыйырға, ҡайҙа барырға, нимә эшләргә тейеш булыуын аңлатып, нисектер ярҙам итеү ысулын тапһаң, бик яҡшы ярҙам буласаҡ.

Үҙем ауылда тормош көткән милләттәштәргә бер нисә кеше менән берләшеп эшләргә кәңәш итәм. Ҡулланыусылар кооперацияһы ойоштороп, һәр кем бер эште башҡарып, дөйөм мәнфәғәт өсөн тырышыу отошло килеп сығасаҡ. Әлбиттә, яңғыҙы ғына эш ойошторорға, бөтә килемде үҙенә генә алырға теләүселәр күп. Ләкин күмәкләгән - яу ҡайтарған: эшең дә еңелләшә, килем дә тиҙерәк арта, ҡайһы бер мәсьәләләрҙе күмәкләп хәл итеүе лә ҡыйынлыҡтарҙы тиҙерәк үтергә булышлыҡ итә. Бындай ойошмаларҙы тотош район кимәлендә эшләрлек итеп асырға була. Мәҫәлән, ауыл халҡынан эре мал һатып алыу пункты төҙөү ҙә яҡшы идея. Юҡһа, халыҡ малын ситтән килгән һатып алыусыларға осһоҙ ғына хаҡҡа биреп, сығымдарын тейешле кимәлдә ҡаплай ҙа алмай ҡала. Ә районда һатып алыу пункты ойоштороп, һатыусылар менән алдан уҡ килешеү төҙөп, тейешле хаҡын әйтеп, һөйләшеп ҡуйыу ике яҡ өсөн дә отошло ғына буласаҡ. Был ауыл халҡының тормошон күпкә еңеләйтер, аҡсалата ярҙамы ла шаҡтай яҡшы булыр, йәшәү кимәлен күтәрер ине.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һеҙ атайығыҙҙан ниндәй сифаттар үҙләштерҙегеҙ, үҙегеҙ уландарығыҙҙа ниндәй ир-егет тәрбиәһе бирәһегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Зариф УШАНОВ, Баймаҡ районы Халыҡты социаль яҡлау үҙәгенең бүлек начальнигы:*** Атай! Ниндәй күп ҡырлы, тәрән мәғәнәгә эйә был һүҙ. Донъяны таный, күрә-төшөнә башлағандан алып уға атай күҙҙәре менән ҡарайһың, атай һүҙе, атай тәрбиәһе һине оло тормошҡа алып сыға һәм ошо оло юлда аҙашып-баҙап ҡалмаҫҡа, үҙ һуҡмағыңды һалып, унан ышаныслы атларға, артабан инде уландарыңды ла уның миҫалында ысын ир-егет итеп тәрбиәләү бурысын иңгә йөкмәүҙе аңлата, быуындар күсәгилешлеген кәүҙәләндерә ул атай төшөнсәһе. Ата-әсәне һайламайҙар, тигән әйтем йәшәй, ләкин, әгәр уларҙы ысынлап та һайлап алыу мөмкин булһа, мин барыбер үҙ ғәзиздәремде һайлар инем. Атайымдың тап Тәфтизан Сабирйән улы булыуынан мин бик уңдым тормошомда. Уның бай тормош тәжрибәһе, киң аралашыу даирәһе беҙгә, уның балаларына, бөгөн беҙ эйә булған сифаттарҙы бирҙе. Атайым заманында данлыҡлы Темәс педучилищеһын тамамлаған һәм уҡытыусы булырға хыялланған, ләкин яҙмыш ихтыяры унан быныамын тигән журналист яһаған. Хәйер, нимәгә тотонһа ла, уның булдыра алыуын раҫлаусы бер яҙмыш һынауы булғандыр был, бәлки. Уның ҡарауы, атайым хыялын уның ҡыҙҙары - һеңлеләрем Гөлнара менән Гөлнәзирә тормошҡа ашырҙы: улар икеһе лә уҡытыусы.

Минең яҙмышыма ла атайымдың йоғонтоһо көслө булды. Урал урман-техник институтын тамамлағас, атай кәңәше буйынса Темәс леспромхозында иҫ киткес кешелекле сифаттары менән билдәле булған шәп етәксе Абдулхаҡ Кантюков ҡулы аҫтында эшләү бәхете тейҙе. Һәм, ғөмүмән, атайым беҙҙе нимәгә генә өйрәтмәһен, иң тәүҙә намыҫ, үҙ-үҙеңә тоғролоҡ, өлкәндәргә кеселекле-лек кеүек сифаттарҙы алға ҡуйҙы. Кем дә кем атаһы менән ҡырҙа ҡыуыш ҡороп, ҡуна ятып бесән сапҡан, усаҡ яҡҡан, балыҡ ҡармаҡлаған, өй һалған - ул минең күңелемдәген аңлайҙыр, моғайын. Ағайым, үҙем һәм ике һеңлекәшем өсөн атайыбыҙ бер ҡасан да ваҡытын йәлләмәне, эштән буш һәр минутын беҙҙең менән үткәрер булды. Беҙгә атай ғына түгел, ышаныслы иптәш тә ине ул. Шулай бер саҡ бөтәбеҙ бергә йыйылғанда, кемдер атайыма төртөп күрһәтеп, минең улым - әле сабый ғына баланан шаяртып ҡына: "Был кем?" - тип һорағас, сабый уйлап та тормай:"Ул минең дуҫ", - тип әйтте икән, шунан да ҙур баһаны мин белмәйем... Улдарым Раил менән Радмир, ысынлап та, картаталары ҡурсыуында, уның йоғонтоһонда ысын егет ҡорона инделәр. Өлкәненә армияға бармау мөмкинлеге килеп тыуғанда ла ул үҙ һүҙен һүҙ итеп, ҡырталашып хеҙмәт итергә китте, сөнки ҡартатайының: "Ысын егет кенә һалдат була!"- тигәнен ныҡ һеңдергәйне ул күңеленә. Мин үҙем улдарымда белемгә ынтылыш тәрбиәләргә тырыштым, һәм улар был өлкәлә лә һынатманы: икеһе лә юғары белем алдылар, уны артабан да камиллаштырыу юлындалар. Атайым менән һалған йорт янына ике улым менән ике шыршы ултыртҡайныҡ. Хәҙер был ағастар өйҙән дә бейек булып, улдарым менән ярышып үҫеп еттеләр. Ике ҡанатым - улдарым хәҙер миңә терәк тә, иң беренсе ярҙамсыларым да. Улар инде минән дә бер башҡа юғарыраҡ: буйға ғына түгел, белемдәре, заманса фекерләү ҡеүәһе менән. Туҡта, атайым да минең хаҡта ҡасандыр шулай тигәйне түгелме? Йәшәү мәғәнәһе хәҙер үҙемә лә асыҡ төҫмөрләнгәндәй: һәр атай үҙенән һуң донъяға үҙенән дә аҡыллыраҡ, белемлерәк, яҡшыраҡ, матурыраҡ уландар һәм ҡыҙҙар ҡалдырырға тейештер ул...

***Наил ҒӘЙЕТБАЙ, яҙыусы, драматург:*** Атайым, ябай ғына бер ауыл кешеһе, миңә оло донъяға сығырға булышлыҡ итте - әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләй алды. Республикабыҙҙа сыҡҡан барлыҡ гәзит-журналдарҙы алдыра ине ул өйгә. Ана шуларҙан башланды миндә уҡыуға, үҙем яҙып ҡарауға теләк. "Башҡортостан пионеры" гәзитендә берәй темаға мәҡәлә, бәләкәй генә хикәйә һәм шиғырҙарға иғлан ителгән конкурстарҙы күреп ҡала ла, атайым миңә шунда ҡатнашырға ҡуша ине. Китапҡа һөйөүҙе иһә ул шулай тәрбиәләне: ауыл китапхаһы бай була торғайны беҙ бәләкәй саҡта, шунан алып ҡайтҡан берәй әҫәрҙең иң ҡыҙыҡлы урынынан тотоп уҡый башлай ҙа, шып туҡтай. Унан һуң, әлбиттә, был китапты башынан аҙағына тиклем үҙаллы уҡып сығаһың.

Шул уҡ ваҡытта атайым, тәбиғи, ир-егет һабаҡтары ла бирҙе. Сөй, ҡаҙаҡ ҡағыуҙан алып, утын ярыу, бесән эшләү һәм башҡа шундай донъяуи ғәмәлдәр серенә төшөндөрә барҙы. 10 йәшемдә апаруҡ килештереп бесән саба инем, атайым минең өсөн махсус барып, "етеле" салғы алып ҡайтып, һаплап бирҙе. Ул эштә саҡта 12 йәшемдә уның ауыр "Иж" матайына ултырып, бесәнгә, йомошюлға елдерә инем. Атайымдың тағы бер онотолмаҫ һабағы: кешеләргә кеселекле, матур мөнәсәбәттә булыуҙы талап итте. Өлкәндәргә ихтирам һәм һәр саҡ һаулыҡ һорашыу ғәҙәте ауыл ерендә былай ҙа борондан килгән матур йола, ана шул яҙылмаған законды боҙмаҫҡа ҡушып, беҙҙең ҡанға һеңдергән ине атай.

Мин дә хәҙер үҙемдең дүрт улымды ла ҡартатайҙарының ябай тормош әлифбаһына өйрәтергә тырышам. Дөрөҫ, ҡала шарттарында хеҙмәт тәрбиәһе төрҙәре ныҡ сикләнгән, шулай ҙа, армияла кәрәгер, тип әсәләре менән беҙ уларҙы картуф әрсергә лә, иҙән йыуырға ла, табаҡ-һауыт йыуырға ла, бүлмәләрен тәртиптә тоторға ла өйрәтә килдек. Сөнки тышҡы тәртип - ул кеше аңында, уйҙарында, ҡылыҡтарында ла мотлаҡ бер эске тәртипкә әүерелә. Балалар үҫә төшкәс, беҙ улар аңына, иң мөһиме - ғаилә ҡиммәттәре, тигән тәрбиә ҡанунын алға ҡуйҙыҡ. Исем, дан, аҡса - былар береһе лә татыу, матур ғаилә ҡиммәте менән ярыша алмай икәнде аңлатырға тырышам улдарым-ҡыҙҙарыма. Әлбиттә, тырыш, белемле, талантлы балалар, һүҙ ҙә юҡ, музыкаға ла, башҡа өлкәләрҙә лә һәләтлеләр, ләкин, ҡайҙалыр буй етмәҫлек бейеккә ымһынып, һауанан түгел, ерҙән атлап йөрөгөҙ, тип өйрәтәм уларҙы. Ышаныслы, ябай һөнәргә эйә булығыҙ, ғаиләгеҙҙе яҡлаусы ла , һаҡлаусы ла, туйындырыусы ла - һеҙ үҙегеҙ, тип ҡабатлайым гел уландарыма. Ҡыҙҙарым иҡтисадсы һөнәренә уҡыһалар, улдарым - инженерҙар, төпсөгөбөҙ Айморат быйыл саҡ мәктәп тамамланы. Хәҙер уларға һөнәрҙәре буйынса эшләгәндә кәрәк буласаҡ яуаплылыҡ, маҡсатҡа ынтылышлыҡ, ныҡышмаллыҡ кеүек сифаттарҙы ла аңдарына һеңдереп, нығыта барыуҙы бурысыбыҙ, тип иҫәпләйбеҙ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

АТАЙЫМ...

# ТОҠОМОМ СЫЛБЫРЫ

***Илгизәр БУРАҠАЕВ:*** Милләтенең тоғро улы, геолог-ғалим - атайым Диҡҡәт Насретдин улы Бураҡаев вафат булғанда, миңә ни бары 14 йәш ине. Шуға ла уның миңә бирергә теләгән тәрбиә ҡанундарының күбеһе онотолған, ә ҡайһы бер һүҙҙәренең асылын йылдар үткәс кенә аңланым. "Милләт - ул сылбыр. Ата-бабаларың ошо сылбырҙы һиңә тиклем һуҙып килтергән, һин дә үҙеңдең ҡулсаңды нығытып, үҙеңдән һуң килгән быуындарға артабан һуҙырға тейешһең. Сылбыр - ул рух, тел һәм ҡан таҙалығы". Ошо һүҙҙәр хәтеремдә уйылып ҡалған, үҙемдең тоҡомома сылбыр менән берлектә ошо фекерҙе лә еткерергә тырышам.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ БР Мәҙәниәт министрлығы мәҙәниәт һәм сәнғәт әһелдәренән Башҡортостан Республикаһы Башлығы грантына ғаризалар ҡабул итеү тураһында белдерә. Айырым кешеләргә һәр береһе 90 мең һум булған - 25, ижади коллективтарға 270-әр мең һум булған 5 грант бүленәсәк. Конкурс материалдары 1 августан 1 октябргә тиклем Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 18-се йорт адресы буйынса15-се бүлмәлә ҡабул ителә. Телефон: (347) 280-87-66.

✔ Башҡортостан депутаттары балиғ булмаған балаларҙы алкоголизмдан мәжбүри дауаларға тәҡдим итә. Уларҙың ошондай законлар сығарыу инициативаһы теркәү үтте һәм РФ Дәүләт Думаһы Рәйесе Сергей Нарышкинға ебәрелде. Депутаттар Граждандарҙың һаулығын һаҡлау нигеҙҙәре тураһындағы Федераль законға ошо туралағы төҙәтеү индерелергә тейеш, тип иҫәпләй.

✔ 21-23 июлдә Стәрлетамаҡ районында "Баҫыу көнө -2016" аграр форумы үтәсәк. Унда республика игенселәре һәм малсылары үҙ ҡаҙаныштары тураһында һөйләйәсәк, күргәҙмәләр ҡуясаҡ. Күргәҙмәләрҙә яңы техника, яңы технологиялар тураһындағы мәғлүмәттәр ҙә урын аласаҡ.

✔ 19-22 июлдә Башҡортостанда "Салют, Еңеү!" автоуҙышы үтә. Тәүге йүнәлештәге автоколонна Өфөнән Салауат ҡалаһына тиклем, икенсе йүнәлештәгеһе - Өфө һәм Стәрлебаш ауылы, өсөнсөһө - Ишембай һәм Благовещен ҡалалары буйлап үтә. Акцияла ҡатнашыусылар төрлө тораҡ пункттарында туҡталып, Бөйөк Ватан һуғышы һәм тыл ветерандары менән осрашасаҡ.

✔ Республиканың ҡайһы бер райондарында - Көйөргәҙе, Мәләүез, Өфө, Миәкә, Әлшәй, Кушнаренко, Стәрлебаш, Яңауыл райондарында урып йыйыу эштәре башланды. Был райондарҙың ҡайһы бер майҙандарында ужым арышы өлгөргән. Уның уңдырышлығы гектарынан 9,6 центнер тәшкил итә.

✔ РФ Мәғариф һәм фән министрлығында Дөйөм Рәсәй ата-әсәләр йыйылышына әҙерләнәләр. Уны август аҙағында министр Дмитрий Ливанов үткәрәсәк. Ҡатнашыусылар Белем көнө алдынан министр менән мәғариф системаһындағы мөһим мәсьәләләр тураһында фекер алышасаҡ. Министрлыҡтың сайтына әле үк тәҡдимдәр, һорауҙар, фекерҙәр яҙып һалырға була.

АЛДАЙҘАР!

**Гәзит уҡыусыларыбыҙ редакцияға төрлө йомош-юл менән килеп инә. Ҡайһы берәүҙәр ниҙер юллай, икенселәр теге йәки был хәл-ваҡиғаға асыҡлыҡ индереүҙе һорай, өсөнсө төркөмгә, гәҙиттә, мәсьәләләрен үҙаллы хәл итергә тырышҡан һәм әүҙемлек сифаттарына эйә булып та ҡайһы саҡ уңышһыҙлыҡҡа осрап ҡуйған кешеләр башҡаларға һабаҡ, ғибрәт йөҙөнән үҙ тәжрибәләре менән уртаҡлашыр өсөн дә килә йә шылтырата.**



# АҠЫЛЛЫ ҒЫНА БУЛҺАҢ ДА...

## муттар тоҙағына эләгеп ҡуяһың

Яңыраҡ беҙгә килеп ингән 45 йәштәрҙәге ҡатын үҙе менән булған һәм күңелһеҙ бөтә яҙған бер хәл тураһында бәйән итеп китте. Хәҙер тормошобоҙҙоң бөтөн өлкәләрендә лә ҡырҡ тапҡыр уйлап эш итергә, һәр төрлө тоҙаҡ-хәйләләрҙән һаҡ булырға тура килә. Был хаҡта күпме генә яҙылмаһын, телевидениенан күрһәтелмәһен, яуыз уйлы алдаҡсыларҙан төп башына ултырыусылар һаман да осрай әле. Филолог һөнәренә эйә әлеге Хәлиҙә ныҡлыу (исеме үҙгәртелде), ҡыҫҡартыуға эләгеп, эш эҙләй торғас, интернеттағы иғлан буйынса копирайтор (иғлан йә реклама текстары яҙыусы) вазифаһына мәғлүмәттәрен ебәрә һәм тиҙ үк әңгәмәгә саҡырыу ҙа ала. Күрһәтелгән адрес буйынса Черниковка биҫтәһендәге иҫке генә бер торлаҡ йорттоң подвалына барып эләгә. Ҡараңғы, һаҫыҡ бинала ике өҫтәл менән дүрт ултырғыстан башҡа бер ни ҙә булмауын шәйләп, шикләнә төшә. Ниҙер яҙып ултырған мөләйем ҡыҙ анкета тултыртып ала һәм Хәлиҙәнең бер айлыҡ әҙерлек курсына алыныуын әйтә. "Аптырамағыҙ, беҙ был бинала ваҡытлыса ғына, үҙебеҙҙең офиста ремонт эштәре бара", тип аңлата ул һәм өс көндән тиҙләтелгән курс, уҡыу әсбаптары, дәреслектәр өсөн 450 һум аҡса алып килергә ҡуша. Өйгә ҡайтҡас, тиҙҙән эшләй башлаясағы тураһында вузда уҡып йөрөгән улына әйтә. Көнө-төнө интернетта ултырған егет әсәһенең ҡайҙа барып ҡабыуын бик тиҙ аңлап ала, бәхеткә күрә. Шулай итеп, бында бер ниндәй ҙә курс та, офис та юҡ, ә алдаҡсыларҙың "сәхнәләштерелгән" тоҙағы булыуы асыҡлана. Бер нисә көндән улы менән юрый ғына килеп ҡараһалар, подвал ишегендә тутығып бөткән йоҙаҡ эленеп тора. Күрһәтелгән адрес буйынса барып, алдаҡсыларҙың "ремонтланып ятҡан офисын" да таба алмай улар.

Был хәл яңы "һөнәр эйәләренең" йөҙәрләгән схемаларының береһе генә, әлбиттә. Алдауҙың башҡа төр күп һанлы варианттары хаҡында ишетеп тә, уҡып та беләләр гәзит уҡыусыларыбыҙ. Шул уҡ аҙнала үҙәк телевидениеның яңылыҡтар тапшырыуында тап ана шундай "эш биреүсе" муттар төркөмө фашланыуы тураһында репортаж күрһәтелгәйне. Яҡынса шундай уҡ схема, тик улар "эшкә алыныусы"ға бер юлы махсус эш кейеме лә һатып ултыра. Алдау ышаныслыраҡ килеп сыҡһын өсөн хатта ниндәйҙер квитанцияны, чек ҡағыҙымы ла уйлап сығарғандар. Алданған ир-егеттәр байтаҡ булып сыға. Бәхеткә, алдаҡсылар уйламағанда ғәҙеллек юллаусы берәү тарафынан фашланып ҡуя: нитиһәң дә, Мәскәүҙә полиция шәберәк эшләй икән шул. Ә бына алдаҡсыларҙы яуапҡа тарттырыу мөмкин түгел, тинеләр. Ни өсөн тигәндә, енәйәт эше асыу өсөн иҫбатлау дәлилдәре етмәй. Тауар һатылған, чек бирелгән, ҡултамғалар ҡуйылған: бөтәһе лә шыма уйланған, бөйләнерлек түгел. Бына шулай ҙа килеп сыға, үкенескә.

Ялған хеҙмәт баҙарынан тыш, кеше алдауҙың байтаҡ төрҙәре беҙгә ошоға тиклем дә күптән таныш ине инде. Тик был фантазия тигән нәмәнең осоҡһыҙыйыйы юҡ икән шул: алдауҙың яңынан-яңы төрҙәре килеп сығып ҡына тора. Айырыуса интернетта алдашыуҙар көсәйеп китте, сөнки меңкен пенсионерҙарҙы туктауһыҙ төп башына ултырта торғас, уларҙа хәҙер бер аҙ иммунитет булдырҙылар шикелле, уның ҡарауы, интернет донъяһында гиҙеүселәргә тотондолар. Улары, нигеҙҙә, йәштәр. Бер яҡтан, бындай аудитория һиҙгер булырға тейеш, тип уйлаһаҡ та, улар араһында ла бер ҡатлылар бөтмәй.

Бер таныштың ҡыҙы өйөндәге мебелдә яңыртырға булып китә. Ата-әсәһе берәмтекләп йыйған йорт йыһаздары әле өр-яңы ла бит, тик ҡыҙыҡай бындай "отстой"ҙан килгән иптәштәре алдында ояла икән. Бына һиңә - мә! "Үҙең эшләй башлағас, теләгәнеңде алып ултыртырһың", тип кенә ҡуяһы булған да бит... Әсәһе ҡаршылашып тормайынса ғына ҡыҙына эш хаҡы тыплана барған картаһын тоттороп ҡуя, етмәһә. Көндән тышланған ҡупшы ғына диван менән ике кресло Avito иғландар сайтына "эленеп" тә ҡуя. Сәскәгә килеп ҡунған бөжәк кеүек, бик тиҙ күреп тә алалар быны. Һатып алыусы икенсе ҡалала йәшәүенә һәм ваҡыты булмауға һылтанып, хатта тауарҙы килеп тә күрмәйенсә, фотоһүрәтен ҡарап алырға ла риза була һәм йомош менән Өфөгә барған йөк машинаһына мебелде тейәп алып ҡайтырға ике әрҙамсыһын ебәрәсәген хәбәр итә. Хаҡына ла тормайынса, хәҙер үк түләргә ризалығын белдерә, тик уға аҡса күсереү өсөн һатыусының иҫәп-хисапты СМС аша раҫлауы кәрәк икән. Ҡыҙыҡай шул саҡта ғына билдәһеҙ "һатып алыусы" тарафынан үҙенә ниндәй ау ҡоролғанын аңлап ала, ләкин һуң була. Шулай ҙа юғалып ҡалмай, телефондан тиҙ генә әсәһенең картаһын яптырта һала. Шулай итеп, карталағы 50 меңгә яҡын аҡсанан саҡ ҡолаҡ ҡаҡмай ҡала үҙһүҙле бала. Теге кешегә бер ниндәй ҙә мебель кәрәкмәгән, ул бары берәй асыҡ ауыҙҙың тейешле кнопкаға баҫыуын ғына көткән, әлбиттә. Бында балаһына картаһын биреп, паролен хәтлем әйтеп ҡуйған әсәнең тәртибе лә һоҡландырмай. Баланан аҡсаһын йәлләмәй, имеш, берәү, ә бит бында эш бер ҙә йомартлыҡта түгел, ә хәүефһеҙлек саралары күреүҙә икәнен икеһе лә аңлап етмәгәндәр, күрәһең...

Бына ошондайыраҡ трагикомедиялар яуыз алдаҡсылар ҡорбаны була яҙған осраҡтарҙың бер нисәһе генә. Бынан тыш, кеше фатирына Горгаз, ЖКХ эшселәре, медик, социаль хеҙмәткәр һәм башҡа шундай "битлектә" килеүселәр, телефон, СМС аша алдаусылар бик күп. Алдаҡсыларҙың фантазияһына ҡуҙ әйәрмәй. Шуға күрә, **теләһә кемгә ишек асмаҫҡа, телефон аша хәбәрҙә шундуҡ тикшерергә, көтөлмәгән "ҡунаҡтар"ҙы ла тейешле урынға шылтыратып белешергә, полицияға хәбәр итергә һәм сәйер тойолған төрлө осраҡтарға ышанып бармаҫҡа кәңәш ителәэ.** Кеше алдап көсәп итеүсе яңы "һөнәр" эйәләре барлығын иҫтә тотоп, "Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар" тигән алтын аҡыллы онотоп ебәрмәһәгеҙ, алданмаҫһығыҙ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# КЕШЕ ӘҘҘӘРЕНӘН...

## сүплек ҡала



**Бөтөн өлкән кешеләр кеүек үк, мин дә йыш ҡына йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланам. Шулай бер төндө улай-былай борғоланғандан һуң, телевизор тоҡандырҙым. БСТ каналында күрше Татарстандан килгән бер төркөм ҡырағай туристарҙың квадрациклдарҙа Ирәмәл тауына менеүе тураһында һөйләйҙәр. Ә бит Ирәмәл - башҡорт өсөн борон замандарҙан изге урын иҫәпләнә, ул бөгөнгө көндә лә дәүләт тарафынан һаҡлана.**

Бер көндән һуң ошо уҡ сюжетты НТВ каналының "Обзор. Чрезвычайное проишествие" тапшырыуында тулыраҡ итеп күрһәттеләр. Баяғы туристар үҙ юлында осраған ағастарҙы ҡырҡып, үҫемлектәрҙе иҙеп тапап үтеп, үтә ныҡ ҡырағайлыҡ ҡылған, имеш. Быларҙы ишеткәндән һуң бөтөнләй йоҡо ҡасты. Был вәхшилеккә барған кешеләр үҙҙәрен нисек тоя икән, тип уйлайым хәҙер. Бөйөк рус яҙыусыһы Максим Горькийҙың "Кеше әҙҙәренән сүплек ҡала" тигән һүҙҙәре бөгөнгө көндә асыҡ сағылдыра түгелме һуң? Хәйер, беҙ ҡасан тәбиғәткә һаҡсыл ҡараштa булдыҡ һуң? Мин ваҡытында Арктикала хеҙмәт иттем. Бөтөн ергә үтеп инә ала торған техникаларҙың тундраның аҫтын-өҫкө килтереүен күреп, шул тиклем тетрәнә торғайным...

Ишембай районында тыуып-үҫтем. Рус теле уҡытыусыһы Зәки Зөлҡәрнәевты һаман да хәтерләйем. Ул хаҡлы ялға сығыу менән районды Ветерандар советын етәкләне. "Кем дә кем тәбиғәткә һаҡсыл ҡараштa түгел, тимәк, улар Ватанын да яратмай, быны иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ, балалар", - тип әйтә торғайны ул беҙгә. Телевизорҙан был мәхшәрҙе ҡарап ултырғанда уҡытыусымдың ошо һүҙҙәре иҫемә төштө. Иң үкенеслеһе, был турист йәрәттары үҙҙәренең ғәйебен танырға ла теләмәй бит әле! Их, йәшерәк булғанда, таныштыр инем кемдең кемлеген, тип кенә уйлап ҡуйған булдым...

Ошо хәл Америка Ҡушма Штаттарында йәки Көнбайыш Европала булһа, мотлаҡ яҙаһын алырҙар ине бындай әҙәмдәр. Ә беҙҙә, нишләп улайттың, тип бармаҡ янаған булалар ҙа, онօталар. Ә ул кеше артабан үҙен нисек тотасаҡ, бер кемдең дә эше юҡ. Бөтөн донъяла Рәсәй иң күп закондар ҡабул ителгән ил булараҡ билдәле. Ошонда бер һорау биргем килә: уларҙың ҡайһыһы эшләй һуң? Оят та инде! Һөйләүҙәре буйынса, беҙҙә барыһы ла яҡшы, ә ысынында иһә закондарҙы үҙ файҙаһына бороп ултырыусылар бихисап, тик халыҡ мәнфәғәттәре генә ҡуҙәтелмәй...

Гуманизм тураһында ла күп һөйләйбеҙ, йәмәғәт. Ә һеҙөмтә юҡ. Рәсәйҙә йәшәйбеҙ ҙә инде, тип ҡул һелтәргә генә ҡала был юлы ла. Күрәләтә тәбиғәтебеҙ, изге Ирәмәлебеҙ юҡҡа сыға, ә яуап биреүселәр юҡ. Сөнки "өҫтән" кемдер эште туктатыуҙы һорап, шылтыратып та өлгөргән, тинеләр. Ана шул "өҫтән шылтыратыуҙар" арҡаһында алға бара алмайбыҙ шул инде. Илебеҙ өсөн күңел һыҙлай...

**Исмәғил МӘХМҮТОВ.**

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✔Ошо көндәрҙә Ҡытайҙың Цицикар ҡалаһы мэры Ли Юйган етәкселегендәге делегация Өфөгә килде. Осрашыу ваҡытында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ике ҡала араһында дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек бәйләнештәре булдырылыуын билдәләне. Ли Юйган үҙ сиратында Өфөнөң матур һәм йәшел ҡала булыуы, делегация ағзаларының барыһына ла оҡшауы тураһында әйтте. Ике яҡлы хеҙмәттәшлек сиктәрендә ҡытайҙарҙы тәү сиратта спорт бәйләнештәре ҡыҙыҡһындырыуы һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Ошо көндәрҙә "Салауат Юлаев" хоккей клубы ағзалары Цицикар хоккей командаһын ярыштарға әҙерләү өсөн Ҡытайға китәсәк.

✔Нуриман районы биләмәһендә "Урал мирасы" тип аталған йәштәр форумы булып үтте. Өс көнгә һуҙылған сарала Башҡортостандан тыш, Силәбе, Мәскәү, Санкт-Петербург, Татарстан, Ырымбур өлкәһе йәштәре лә ҡатнашты. Башҡа мәҙәни сараларҙан айырмалы, икенсе тапҡыр үткәрелгән был форумда нигеҙҙә белем биреү программаһы тормошҡа ашырыла. Был юлы ла төрлө темаға түңәрәк ҡорҙар, оҫталыҡ дәрестәре, абруйлы шәхестәрҙең лекциялары ойошторолдо.

✔Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы осорҙа республикала тоҙға һәм тауыҡ йомортҡаһына хаҡтар артҡан. Бынан тыш, бойҙай онона, тауыҡ итенә, шәкәргә, туңдырылған балыҡҡа һәм вермишелгә, һыйыр итенә һәм майға ла хаҡтар бер аҙ күтәрелгән. Картуф, һуған, кишергә, шулай уҡ ит, һөт, алмаға, ҡарабойҙай, дөгө ярмаларына хаҡтар арзаная төшкән. Республикала инфляция кимәле июндә - 0,8, йыл башынан 3,4 процент тәшкил иткән.

✔Был көндәрҙә генә лә Өфө пляжында 40 меңләп кеше ял иткән. Элеккесә, "Солнечный" пляжы иң популяр булып ҡала, бында июнь айында ғына 13 мең кеше булған. "Гольфстрим", "Ҡашҡаҙан" пляждарында ла халыҡ һәр саҡ күп була. Ғөмүмән, Өфөлә барлығы ун пляж иҫәпләнә, уларҙың барыһын да ҡотҡарыусылар хеҙмәтләндерә. Әлеге һыу инеү миҙгелендә генә Өфөлә 41 батыусы кеше ҡотҡарылған, шуларҙың 9-ы - балалар.

✔Өфөнөң үҙәк урамында мотоцикл хәрәкәте тыйылды. Пушкин урамынан Революцион урамына тиклем Ленин урамы буйлап мотоциклда киске сәғәт 8-ҙән һуң йөрөргә ярамай. Был участкала тыйыу тураһында таҡта эленгән.

**"Башинформ"дан.**

✓ *2019 йылда Йәйге уйындарҙы уҙғарыу хоҡуғын алып, Өфө Уйындарҙың ярты быуатлыҡ тарихында Ҡышҡы уйындарҙы ла, Йәйге уйындарҙы ла ҡабул иткән донъялағы берҙән-бер ҡала буласаҡ.*



УР-РА!



# БАЛАЛАР УЙЫНДАРЫ...

## Өфөлә үтәсәк

**Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Искәндәр Сираев етәкселегендәге делегация Нью-Тайбэй (Тайвань) ҡалаһында 50-се Йәйге халыҡ-ара балалар уйындарында (МДИ) ҡатнаша. Баш ҡаланын 14-15 йәшлек 23 спортсыһы - Олимпия резервындағы спорт мәктәптәре тәрбиәләнеүселәре программала ҡаралған өс төр (волейбол, гандбол, тхэквондо) буйынса сығыш яһай. Быйыл МДИ программаһына спорттың 9 төрө индерелгән: еңел атлетика, йөҙөү, гандбол, ҙур һәм өҫтәл теннисы, баскетбол, футбол һәм волейбол.**

11 июлдә уҙған МДИ Комитеты ағзалары ултырышында 2019 йылда 53-сө уйындарҙы үткәреүгә кандидат булараҡ, Өфө презентацияланды. Унын барышында Комитет ағзаларына Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов мөрәжәғәт итеп: "Башҡортостан - Рәсәйҙең алдынғы иҡтисади, фәнни һәм мәҙәни үҙәктәренең береһе - дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек өсөн һәр саҡ асыҡ. Беҙҙең бизнес һәм сауҙа буйынса партнерҙарыбыҙ һаны йөҙҙән артты. Балалар һәм йәштәр һаны буйынса төбәгебеҙ илдә иң "йәше". Беҙ - спортсы республика, бик йыш ҙур халыҡ-ара ярыштар үткәрәбеҙ. Спортты, шул иҫәптән балалар һәм үҫмерҙәр спортын үҫтереү өсөн уңайлы шарттар булдырылған, - тине. -2019 йылда Йәйге халыҡ-ара балалар уйындары сағыу спорт байрамына әүерелһен өсөн барыһын да эшләйәсәкбеҙ. Өфөнөң, унын ҡунаҡсыл халҡының мотлаҡ һеҙгә оҡшарына инанам. Һәм һеҙ беҙҙең ыҡсым, матур ҡаланы, заманса спорт ҡоролмаларындағы уңышлы старттарҙы, изге уйлы Өфө көйәрмәндәрен йылылыҡ менән иҫкә аласаҡһығыҙ".

Ултырышта МДИ Комитеты ағзалары сараларҙа ҡатнашыусылар өсөн виза тәьминәте, спортсыларҙы урынлаштырыу, транспорт логистикаһы мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһынды. Компетентлы яуаптар алғас, улар ябыҡ ишектәр артында кәңәш ҡороп, 53-сө Уйындарҙы Өфөлә уҙғарыу тураһында коллегиаль ҡарар ҡабул ителеүен белдерҙе.

2013 йылда баш ҡала VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындарын ҡабул иткәйне инде. 2019 йылда Йәйге уйындарҙы уҙғарыу хоҡуғын алып, Өфө Уйындарҙың ярты быуатлыҡ тарихында Ҡышҡы уйындарҙы ла, Йәйге уйындарҙы ла ҡабул иткән донъялағы берҙән-бер ҡала буласаҡ.

ҠАЛА ЙӨҘӨ

# ТУҒАН ТЕЛДЕҢ...

## батшаһы ла, ҡоло ла - беҙ!

**Өфө ҡала округы хакимиәтендә "Грамоталы ҡала" конкурсына йомғаҡ яһалды. Унда Башҡортостандың халыҡ шағиры, филология фәндәре докторы, профессор Рауил Бикбаевтың да ҡатнашыуы сараға оло бер мәртәбә өҫтәне.**




Рауил Төхвәт улы үҙенең сығышында республикала дәүләт телдәренең таҙалығын һаҡлау буйынса ҙур эш алып барылыуын билдәләп: "Өфө административ баш ҡала ғына түгел, ул - әҙәбиәтебеҙ, сәнғәтебеҙҙең баш ҡалаһы ла. Бында күпселек яҙыусыларыбыҙ йәшәй, театрҙарыбыҙ, ижади берләшмәләребеҙ, вуздарыбыҙ эшләй, гәзит-журналдарыбыҙ, китаптарыбыҙ нәшер ителә. Ул - беҙҙең уртаҡ яҙмышыбыҙ, уртаҡ хәстәребеҙ, - тине. - Алтаҡталарҙа, атамаларҙа, башҡа урындарҙа хаталар күрһәк - һәр кемебеҙгә ҡыйын. Әммә яҙыусыға бигерәк тә ауыр. Сөнки бөтөн ғүмеребеҙҙе һүҙ ғәли йәнәптәренә арнаныҡ, унын батшаһы ла, ҡоло ла беҙ. Донъяла ете мөғжизә бар, тиҙәр. Уларҙы билдәләү өсөн был бик аҙ һан. Улар бик күп, бәлки, ете, бәлки, етмеш меңдер. Әммә мин иң мөһим, иң беренсе мөғжизә тип туған телде һанайым. Ул - донъяның беренсе мөғжизәһе. Туған тел булмаһа, ҡалған мөғжизәләр тоноҡлана, юҡҡа сыға..."

Ә был сара, ғәмәлдә, үҙе үк мөғжизәләрҙең береһе тиергә мөмкин, сөнки ул административ кимәлдә дәүләт телдәрен яҡлауға, һаҡлауға, үҫтереүгә күҙ буяу өсөн генә түгел, ә ысын мәғәнәһендә ярҙам итә. Юҡҡа ғына унын төп маҡсаттары булып "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыу, йәғни ҡалалағы яҙыуҙарҙы грамоталы һәм эстетик башҡарыу, телдәрҙең терминологияһына бәйле предприятиеларға, ойошмаларға, учреждениеларға методик һәм ғәмәли ярҙам итеү, телдәр сәйәсәтен тормошҡа ашырыу һәм туған телдәрҙе үҫтереү эшмәкәрлеген әүҙемләштереү тормай. Ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов билдәләп китеүенсә, быйыл конкурс 9 йүнәлеш буйынса алып барыла һәм уны абруйлы телселәр, белгестәр баһалай. Унын беренсе этабы район кимәлендә уҙғарыла. Икенсе - ҡала этабына иһә ошо көндәрҙә йомғаҡ яһалды.

Ҡала хужалығының төрлө өлкәләрендә дәүләт тел сәйәсәтен тормошҡа ашырыуҙы комплекслы һәм һәр яҡлап тикшергәндән һуң, Ленин, Дим, Совет, Орджоникидзе райондары конкурс дипломдары менән бүләкләнһә, өсөнсө дәрәжә дипломға һәм аҡсалата 20 мең һум премияға Киров районы лайыҡ булды. Икенсе дәрәжә диплом һәм 30 мең һум - Октябрь районына, Калинин районына беренсе дәрәжә диплом һәм 50 мең һум премия тапшырылды.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

***Зөлфиә ХАННАНОВА, Өфө ҡала округы хакимиәте Мәғариф идаралығының телдәр сәйәсәте буйынса бүлек мөдире:*** Калинин, Октябрь, Орджоникидзе райондарындағы комиссияларҙың хаталы яҙыуҙарға йәмәғәтселек иғтибарын йәлеп итеү маҡсатында төрлө акциялар уҙғарыуын ыңғай күренеш тип баһалар инем. Шулай уҡ Дим районында быйылға район халҡы менән акция һәм өлкән синыф уҡыусылары араһында диктант яҙыу планлаштырылған. Киров районы М. Аҡмулла исемендәге БДПУ студенттары ҡатнашлығында акция ойоштороуҙы күҙаллай. Барлыҡ район хакимиәттәрендә дәүләт телдәрендәге республика һәм ҡала баҫмаларына яҙылыу ойошторолған. Хакимиәттәр ике дәүләт телен дә белгән кадрҙар менән комплектланған. Был өлкәлә Киров һәм Дим райондары өлгө булып тора.

Һуңғы йылдарҙа Өфө ҡала хакимиәте сайтында яңылыҡтарҙы ике дәүләт телендә ҡуйыу күҙәтелә. Был йәһәттән Орджоникидзе, Октябрь, Совет, Калинин райондары әүҙемлек күрһәтә. Орджоникидзе районы хакимиәтенең "Бәйләнештә" селтәрендә ике телдә алып барылған үҙ сәхифәһе лә бар. Калинин районы хакимиәте лә был йәһәттән яҡшы эшләй, әммә уларҙың сайтында башҡортса яңылыҡтар бары тик туған телдәр буйынса методистар урынлаштырған хәбәрҙәрҙән ғибәрәт, ә башҡа өлкәләге мәғлүмәттәрҙе яҙырға мәғлүмәт-аналитика бүлегендә башҡорт телен белгән белгес юҡ. Ә Ленин районында мәғлүмәт-аналитика бүлеге бөтөнләй күрһәтелмәй, унда башҡорт телендә иң һуңғы яңылыҡ былтыр 10 декабрҙә ҡуйылған.

"Грамоталы ҡала" конкурсы быйыл дүртенсе тапҡыр ойоштороло һәм уға ниндәйҙер яңылыҡ индерергә лә кәрәктер, тип уйлайым. Шуға күрә сараны камиллаштырыу өсөн граждандарҙан, белгестәрҙән ҡыҙыҡлы тәҡдимдәр көтәбеҙ.

***Миңлехана БАҺАУЕТДИНОВА, сауҙа, хеҙмәт күрһәтеү, мәғлүмәт һәм реклама өлкәһен баһалау буйынса жюри рәйесе:*** Элекке тикшереүҙәр менән сағыштырғанда башҡорт атамалы предприятиелар һиҙелерлек артҡан. Бер Калинин районында ғына шундай 20 магазин бар: "Байрам", "Йомарт", "Дуҫлык", "Йондоҙ", "Алһыу", "Рәхимә", "Балыҡ", "Зифа", "Ҡарлуғас" "Көйөргәҙе", "Нәркәс", "Гүзәл", "Батыр", "Юрматы", "Табын", "Рәфис" һ.б. Барлыҡ ойошма-предприятиелар башҡортса шрифтҡа эйә, методик әҙәбиәт менән тәьмин ителгән, республика халыҡтары телдәрендә нәшер ителгән баҫмалар алдыра. Төрлө мәҙәни-спорт саралары дәүләт телдәрендә уҙғарыла. Эре сауҙа предприятиеларында иғландар башҡорт һәм рус телендә яңғырай. Райондарҙың башҡорт теле уҡытыусылары предприятиеларға башҡорт теленә тәржемә итеү буйынса ярҙам күрһәтә, әммә ойошмаларҙа һәм учреждениеларҙа башҡортса белгән белгестәр аҙ. Был бигерәк тә реклама агентлыҡтарына ҡағыла, сөнки тап улар алтаҡталар, юл күрһәткестәре, стендтар, бланкылар, мисәттәр, штамптар һ.б. мәғлүмәт продукцияһы әҙерләй. Беҙҙенсә, агентлыҡтарҙа мотлаҡ башҡорт телен белгән белгестәр эшләргә, ә заказсы башҡарылған эштәрҙе алғанда, унын дөрөҫлөгөн етди тикшерергә тейеш. Дөйөм алғанда, урамдарыбыҙ сит телдә яҙылған алтаҡталар менән күҙҙе сыбарлағанда, ике дәүләт телендә яҙылған алтаҡталарҙы күреү үҙе бер кинәнес. Ә илһөйәрлек тап ошо бәләкәй генә булып күренгән ҙур эштән башлана ла инде.

***Лилиә БАЛАПАНОВА, төҙөлөш, архитектура, ҡала төҙөлөшө, транспорт һәм элемтә өлкәһе буйынса жюри рәйесе:*** Конкурс барышында 16 элемтә бүлексәһе, 11 транспорт предприятиеһы, 14 төҙөлөш учреждениеһы тикшерел-

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Был шәмбелә Шишмә районы биләмәһендәге "Аҡзыярат" зыяраты янында республика мосолмандары йыйыны була. 1985 йылда Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт фәнни-тикшеренеү институты ғалимдары тикшеренеү эштәре үткәреү өсөн кәшәнәнән Хөсәйен-бәк имамдың һөлдәһен ҡаҙып алған була. 30 йылдан һуң дин әһелдәре әүлиәнең һөлдәһен яңынан кәшәнәгә күмеп ҡуясаҡ. Сарала Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты етәксеһе Тәлғәт Таджетдин ҡатнаша.

✓Ейәнсура районында халыҡ йырсылары Сөләймән Абдуллин, Мәғфирә Ғәлиева, ҡурайсы Нәжметдин Хәсәновтар исемендәге призларға үткәрелгән конкурстар тамамланды. Быйыл бәйгегә 100-ҙән ашыу һәләтле бала йыйылды. Конкурс 16 йәшкә тиклемге һәм 17 йәштән олораҡтарға бүленгән ике категорияла үтте. Вокал буйынса Гран-призы Баймаҡтан Илдар Абдуллин яуланы. Беренсе дәрәжә лауреаттар исеменә Роберт Исламов, Иҙел Исҡужин, Рәфил Әйүпов, Динар Халиков һәм Хәйбулла районының "Үҫәргән" ҡурайсылар ансамбле лайыҡ булды.

✓Яҡын арала республикала "Башавтотранс" автобустарында банк картаһы менән иҫәпләшергә мөмкин буласаҡ. Предприятие 15,75 миллион һумға 750 мобиль терминал һатып алырға ниәтләй. Тиҙҙән республика халҡы исемле карталар ҙа һатып ала аласаҡ. Ошо карталар буйынса "Башавтотранс" предприятиеһының рәсми сайтында үҙенә кәрәкле автобустар маршрутын күҙәтеп барырға мөмкин.

✓Башҡортостанда өс кинотеатр федераль ярҙам аласаҡ. Илебеҙ кинематографияһына социаль һәм иҡтисади ярҙам фонды Рәсәйҙең 100 мең кешенән кәм булған тораҡ пункттарындағы кинотеатрҙарға ярҙам күрһәтеү буйынса конкурс йомғаҡтарын баҫтырып сығарҙы. Конкурс йомғаҡтары буйынса 1 471,7 миллион һумға 273 тораҡ пунктта 298 зал яңыртыла. Программа сиктәрендә кинозалдарҙа 45 меңдән ашыу яңы урын булдырыу ҡарала.

✓Хоҡуҡ һаҡлау органдары Өфөлә һәм Волга буйы төбәгендә пенсия йәшендәге 32 кешене үлтереүҙә ғәйепләнеүсе енәйәтсене эҙләүҙә ярҙам һорап, граждандарға мөрәжәғәт итә. Был енәйәтсе, ғәҙәттә, үҙен торлаҡ-коммуналь хужалыҡ йә социаль хеҙмәт өлкәһе хеҙмәткәре итеп таныта. Яуыз енәйәтсене табыуҙа ярҙам итеүсе 1 млн һум аҡса аласаҡ. Өфөләге Тикшереү комитетына түбәндәге телефон: (347) 251-75-07 (дежур хеҙмәт) йә 02 буйынса шылтыратырға.

де. Почта бүлексәләрендә тышҡы алтаҡталар һәм эш ваҡыты ике дәүләт телендә яҙылһа, рәсми бланкылар, мисэттәр, штапмтар, мәғлүмәт стендтары һәм ишектәге мәғлүмәт бары тик рус телендә генә башҡарылған. Транспорт өлкәһендә дәүләт телдәре сәйәсәтен тормошҡа ашырыу планлы алып барыла, "Башавтотранс" предприятиеларында, ҡала электр транспортында был йәһәттән ҙур эш башҡарылған, дәүләт телдәрен белгән белгестәр бар. Шуға ҡарамаҫтан, хаталар осраштырғылай. Уларҙы эшләтерҙән алда терминология комиссияһында тикшертеү талап ителә.

***Тәнзилә ИШКИНА, мәҙәниәт, сәнғәт, ЗАГС бүлектәре өлкәһе буйынса жюри рәйесе:*** Былтырғы тикшереү ваҡытында барлыҡ мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениелары ла тиерлек башҡорт телен белгән белгестәр менән комплектланған булһа, быйыл уларҙың һаны ҡырҡа кәмегән. Был, нигеҙҙә, эш хаҡының түбән булыуына бәйле. Законды тормошҡа ашырыу буйынса бигерәк тә Ленин районының 7-се балалар музыка мәктәбен, Орджоникидзе районының Өфө балалар сәнғәт мәктәбен билдәләп үтке килә. Төп эшмәкәрлектәренән тыш, был учреждениеларҙа балаларҙа патриотизм тәрбиәләү, милли мәҙәниәтте үҫтереү, тыуған республикаңа, тыуған крайыңа һөйөү тәрбиәләү буйынса әүҙем эш алып барыла. Эске биҙәлеш һәм залдарҙың эстетикаһы туллыһынса талаптарға яуап бирә. Әммә был укыу йорттары ҡалаға тапшырылғанлыктан, алтаҡталарҙы алыштырыу зарурлығы бар. Орджоникидзе районының 10-сы балалар музыка мәктәбендә закон талаптары тулыһынса инҡар ителә: алтаҡта хаталы, башҡорт телендә мәғлүмәт, башҡорт дәүләт телен белгән белгес юҡ, һөҙөмтәлә күмәк, мәҙәни саралар бөтөнләй башҡорт телендә алып барылмай.

ЗАГС бүлексәләрендә мәғлүмәт табличкалары закон талаптарына тап килмәй. Интерьерҙы берҙәм ҡалыпҡа килтереп, бүлмәләрҙә ике телдә күрһәтеү, мәғлүмәтте башҡортсаға тәржемә итеү кәрәк.

***Илдус ҠАҺАРМАНОВ, һаулыҡ һаҡлау өлкәһе буйынса жюри рәйесе:*** Бында Калинин, Орджоникидзе, Дим районының һаулыҡ һаҡлау учреждениеларын ыңғай яҡтан билдәләп китергә мөмкин. Һаулыҡ һаҡлау учреждениеларында эш ҡағыҙҙарын башҡорт телендә алып бара алған белгестәр дөйөм хеҙмәткәрҙәр һанынан 6-8 процентты ғына алып тора. Һөҙөмтәлә уларҙа башҡорт баҫмаларына яҙылыу ҙа аҡһай. Дөйөм алғанда, баш ҡаланың һаулыҡ һаҡлау учреждениелары БР Һаулыҡ һаҡлау ҡарамағына ҡуҫкәнлектән, алтаҡталарҙы, бланктарҙы, мисәттәрҙе, штампатарҙы берҙәм алыштырыу һәм уларҙың дөрөҫлөгөн тикшереү ҙағышына ҡуйылған. Райондарҙа яҙма мәғлүмәт бары тик рус телендә генә башҡарылған. Барлыҡ учреждениелар ҙа ике телдәге методик һәм укытыу-мәғариф әҙәбиәт менән тәьмин ителмәгән. Шунлыҡтан, уларға "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыуҙы әүҙемләштерергә тәҡдим ителде.

***Фирүзә ИСҠУЖИНА, мәғариф учреждениелары буйынса жюри рәйесе:*** Конкурс сиктәрендә 14 мәктәп, 11 балалар баҡсаһы, 10 өҫтәмә белем биреү учреждениеһы тикшерелде.Туған телдәрҙе өйрәнеү Калинин, Ленин, Октябрь, Совет райондары мәктәптәрендә яҡшы ойошторолған. Дәүләт теле булараҡ, башҡорт телен өйрәнеү барлыҡ мәктәптәрҙә лә алып барыла. Уҡыу планы буйынса Дим районы мәктәптәренә иҫкәрмәләр бар: 103-сө мәктәптә башҡорт теленең бер сәғәте сит телдәрҙе өйрәнеүгә, 113-сө мәктәптә информатикаға бирелгән. Башланғыс синыфтарҙа башҡорт телен дәүләт теле булараҡ аҙнаға бер сәғәт күләмендә өйрәнгәндә 103-сө, 113-сө мәктәптәрҙә төркөмдәргә бүлеү тормошҡа ашырылмағанлыктан, предмет буйынса белем сифаты аҡһай. 103-сө, 41-се, 153-сө, 10-сы, 6-сы, 44-се мәктәптәрҙә милли-төбәк компоненты сәғәттәре бары тик туған рус телен өйрәнеүгә бирелгән. Башҡорт телен өйрәнеүҙә күсәгилешлекте тәьмин итеү, күберәк балаларҙы предметты өйрәнеүгә йәлеп итеү маҡсатында 1 сәғәтте башҡорт дәүләт теле дәресе, 1 сәғәтте туған тел дәресе өсөн биреү маҡсатҡа ярашлы булыр ине.

Күпселек мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында туған телде өйрәнеү ойошторолмаған. Барлыҡ белем биреү ойошмалары ла квалификациялы кадрҙар менән тәьмин ителгән. Әммә бары тик бер - 44-се мәктәптә генә туған телдәр буйынса директор урынбаҫары штаты һаҡланған. Башҡа белем усаҡтарында был эште укытыусыларҙың берәйһе алып бара һәм өҫтәмә түләү ала. 103-сө мәктәптә туған телдәр укытыусыларына предмет өсөн 15 процент өҫтәмә түләнмәй һәм был финанс хоҡуҡ боҙоуы булып тора.

***Эльвира РӘХИМОВА, йәштәр сәйәсәте һәм спорт өлкәһе буйынса жюри рәйесе:*** Эшсе төркөм тарафынан һәр районда өсәр үҫмерҙәр клубы һәм икешәр спорт учреждениеһы тикшерелгәндән һуң, шундай һығымта яһарға мөмкин: закон тормошҡа ашырыла, учреждениеларҙың барыһында ла дәүләт символдары, дәүләт телдәрендәге баҫмалар бар, саралар ике телдә уҙғарыла. Әммә алтаҡталар, бланкылар һәм мисәттәр күптән эшләнгәнлектән, улар яңыртыу талап итә. Учреждениелар етәкселәре был иҫкәртеүҙе ҡыҫҡа ваҡытта бөтөрөргә һүҙ бирҙе. Шуны ла билдәләп китеү зарур: йылдан-йыл норматив документтарҙа хаталар кәмей. Ҡайһы бер клубтар аҡса юҡлыҡҡа ҡарамаҫтан, алтаҡталарҙы үҙ аллы ламинатлаған. Ләкин башҡортса текстарҙа һаман да хәреф хаталары китә.

***Зиннур СИРАЖЕТДИНОВ, торлаҡ-коммуналь хужалыҡтар эшмәкәрлеген баһалау буйынса жюри рәйесе:*** ЖЭУ-лар араһында Совет районының 51-се ЖЭУ-ы иң яҡшыһы булып тора. Унда бөтөн нәмә хатаһыҙ эшләнгән, ике дәүләт телен дә яҡшы белгән белгес бар, дәүләт телдәрендәге матбуғат баҫмалары алдыралар, бынан тыш, Мәғлүмәт стендында башҡорт телендә мәғлүмәт бирелә. Ленин районы ЖЭУ-һы етәкселәре законды үтәүгә бармаҡ аша ҡарай. 14-се ЖЭУ-ла бынан 4 йыл элек асыҡланған хаталарҙы һаман да төҙәтергә уйламайҙар. 11-се ЖЭУ-ла башҡорт телендә табличкалар бөтөнләй юҡ. Октябрь районындағы "Аҡтау" ҡунаҡханаһында тел тураһында закон тулыһынса үтәлә, хатта комиссия ағзаларын кафелағы ике телдә яҙылған меню, төрлө табличкаларҙың башҡортса яҙылыуы аптыратты. Уның ҡарауы, "Ағиҙел" ҡунаҡханаһында (Киров районы) беренсе һәм икенсе ҡаттарҙа башҡорт һәм рус телендәге яҙыуҙарҙың бөтөнләй булмауы шаҡ ҡатырҙы. Күрәһең, "Ағиҙел" ҡунаҡханаһы етәксеһен "Аҡтау" ҡунаҡханаһына тәжрибә уртаҡлашырға ебәреп алырға кәрәктер.

Һуңғы йылдарҙа йорттарҙың аншлагтарын үҙәкләштереп эшләү хәл-торошто яҡшы яҡҡа үҙгәртте. Әммә Дим һәм Ленин райондарының шәхси секторы ғына эште бер аҙ боҙа. Шулай уҡ тукталыштарҙағы алтаҡталар менән дә проблемалар бар. Уларҙа, нигеҙҙә, саф башҡорт хәрефтәре хаталы яҙыла. Ҡайһы бер тукталыштарҙа алтаҡталар бөтөнләй юҡ. Был йәһәттән Орджоникидзе районы өлгө булып тора ала - улар тукталыштарҙың алтаҡталарын үҙәкләштереп эшләтә.

***Зәбәржәт ШӘЙХИСЛАМОВА, сәнәғәт һәм иҡтисад предприятиелары эшмәкәрлеген баһалау буйынса жюри рәйесе:*** Күпселек етәкселәр "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыуға аңлап ҡараһа, быға илтифат бирмәүселәр ҙә бар. Ҡайҙалыр Башҡортостан атрибутикаһы, башҡорт телен белгән белгестәр юҡ. Белгестәр киң мәғлүмәт сараларында ике дәүләт телендә лә сығыш яһай алмай. Ойошмаларҙың алтаҡталары һаман да хаталы яҙыла. Былар һаманғаса көнүҙәк проблема булып тора. Бында, беҙҙенсә, атап кителгән етешһеҙлектәр жюри, комиссия ағзаларын ғына түгел, тәү сиратта, учреждениелар етәкселәрен борсорға тейеш. Ә конкурстан-конкурсҡа бер үк хаталарҙың эйәреүе, һуҙылыуы был мөһим мәсьәләгә етәксенең мөнәсәбәтен сағылдыра ла инде.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

## ҠЫҪҠАСА

# ШИФАХАНАЛАР...

## шәхси ҡулдарға бирелмәй

✓ "Бөгөн матбуғатта республика Хөкүмәтенең шифаханаларҙы һатырға әҙерләнеүе тураһында төрлө уйҙырмалар тулып ята. Был улай түгел, - ти дәүләт Башлығы Рөстәм Хәмитов. - Һүҙ улар менән идара итеү формаһын үҙгәртеү, яңы корпустар төҙөү өсөн өҫтәмә средстволар йәлеп итеү тураһында бара. Әгәр шифаханалар үҫешһә, путевкаларҙың хаҡы ла төшәсәк. Шуға күрә әлеге ваҡытта уларҙы акционерлаштырыу мәсьәләһе ҡарала, ләкин улар барыһы ла дәүләт милке булып ҡаласаҡ. Республика шифаханаларҙы шәхси ҡулдарға биреүгә риза түгел".

✓ 30 июндә Рәсәй Президенты Владимир Путин Төркиәгә ҡарата махсус сараларҙы көйләүсе указға ҡул ҡуйҙы. Шул иҫәптән, был илгә турҙар ойоштороуға ла юл асылды, аҙыҡ-түлек эмбарғоһы ла алынды. Һөҙөмтәлә Төркиәгә чартер рейстары ай һуңына тиклем тергеҙелеүе мөмкин.

✓ Рәсәй Банкының яңы банкноталарындағы символдар өсөн тауыш биреүсе ил төбәктәре араһында Башҡортостан алтынсы урында бара. Салауат Юлаев һәйкәле беренселәрҙән булып 5000 тауыш сиген үтеп, махсус төҙөлгән Символдар картаһында урын алды. Һайлау этабы 28 июлгә тиклем дауам итәсәк. Әлеге ваҡытта картала 15 символ бар. Улар араһында - "Ватан-әсә саҡыра!" монументы (Волгоград); Алтын күпер (Владивосток); батырлыған караптарға һәйкәл (Севастополь); "Нарын-кала" ҡәлғәһе (Дербент); Салауат Юлаев һәйкәле (Өфө); Байкал күле (Иркутск); "Чечня йөрәге" мәсете (Грозный); "Восточный" космодромы (Циолковский); Ҡазан кремле (Ҡазан); "Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында совет Поляр түңәрәге арьяғын һаҡлаусыларға" мемориалы (Мурманск); Бугрин күпере (Новосибирск); Смоленск ҡәлғәһе диуары (Смоленск); Новосибирск дәүләт академия опера һәм балет театры (Новосибирск); "Самотлорҙы яулаусылар" һәйкәле (Нижневартовск) һәм Алтын ҡапҡалар (Владимир).

✓ Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан буйынса идаралығы Ҡаҙағстанға сәфәр ҡылырға планлаштырыусыларҙы был төбәктә түләмә сире (сибирская язва) осраҡтары теркәлеүе хаҡында иҫкәртә. Түләмә Ҡараганда өлкәһендә теркәлә. Сир сығанағы - һыйыр. Лаборатор тикшеренеүҙәр һигеҙ осраҡты раҫлаған, шуларҙың икеһе үлем менән тамамланған.

✓ Сәғүд Ғәрәбстаны короллегенең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы эшләгән медик-санитар ҡағиҙәләргә ярашлы, хаж ҡылыусыларҙың менингитҡа ҡаршы прививка эшләтеүе тураһында ғәмәлдәге сертификаты булырға тейеш. Шулай уҡ миҙгел киҙеүенә ҡаршы прививка эшләтеү ҙә тәҡдим ителә. Бигерәк тә был тын алыу юлдарының хроник сирҙәре, шәкәр сире, бөйәр, бауыр, йөрәк ауырыуҙары менән яфаланыусы оло йәштәгеләргә ҡағыла. Һары биҙгәк эпидемияһы таралған илдәрҙән һәм Африка илдәренән килеүселәр өсөн айырым ҡағиҙәләр эшләнгән.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Туберкулез

❖ Туберкулез аҙмаһын өсөн шундай дауа тәҡдим ителә: киптерелгән миндаль, ҡарбуз ҡабығын, имбир, корицаны кәһүә үткәргестә тартырға (тартылған көйө уларҙың күләме тигеҙ булырға тейеш), бал өҫтәргә, болғарға һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ ашарға. Хәл яҡшырғансы дауаны дауам итегеҙ.

### Юғары ҡан баҫымы

❖ Юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусылар өсөн дауа: ҡарбуздың тышын йоҡаҡ итеп ҡырҡырға, мейестә киптерергә, тартырға һәм көнөнә 3 тапҡыр яртышар балғалаҡлап һыуға ҡушып эсергә. Тиҙҙән ҡан баҫымы яйланыр. Был сара организмдан артыҡ һыуҙы сығара, һыу менән бергә калий ҙа йыуыла, шуға ла дауаланғанда күберәк күрәгә, ҡыяр ашарға тәҡдим ителә.

### Гайморит

❖ 1 балғалаҡ глицеринға 4 балғалаҡ һыу, 10 мумие таблеткаһы (0,2 грамлыҡ) ҡушып болғатырға. Танауға көнөнә 3 тапҡыр тамыҙырға. Дауаланыу курсы - 3 аҙна. 5 көн ял иткәс, курсты тағы ҡабатларға. Ғәҙәттә ошолай 3 ай дауаланғандан һуң гайморит юҡҡа сыға.

### Шәкәр диабеты

❖ Шәкәр диабеты - донъяла киң таралған сирҙәрҙең береһе. Шуға ла ҡандағы шәкәр кимәлен нормала тотоу кәрәк. Йүкә сәскәһе сәйе ҡанда шәкәрҙе түбәнәйтә. 2 ҡалаҡ сәскәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡояһың да, ҡапҡас ябып, 10 минут тирәһе йылы урында тотаһың. Көнө буйы 2-5 сәғәт интервал менән эсәһең.

❖ Тигеҙ өлөштә картуф, топинамбур, сөгөлдөр һуты ҡушып, иртәле-кисле ашарҙан 30-40 минут алда ас ҡарынға эсергә. Дауаланыу курсы - 1-5 аҙна.

❖ 1 йомортҡаны болғатып, уртаса ҙурлыҡтағы лимондың һутын һығырға. Иртән ас ҡарынға эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*ЙӨЛАЛАРЫБЫҘ*

# ЙЫЛАН АРБАУ

Яйыҡ буйы Тиләү башҡорттарында йылан арбау шулай атҡарыла. Йылан осраһа, ҡиблаға ҡарап, тәһәрәт алалар. Шунан йылан тирәләй уратып йөрөп:

- *Ҡамсы, ҡамсы,*
*Ҡамсы, ҡамсы...* - тип һамаҡлайҙар.

Шулай итһәң, йылан: "Мине ҡамсы менән һуғалар икән", - тип уйлай ҙа, йомарланып ята, ти. Шул арала кеше ҡасып өлгөрә.

*Бисмиллаһир-рәхманир-рахим,*
*Сәңке, сәңке, сәңке йылан,*
*Сәңке башлы ҡара йылан,*
*Кират-кират* кергән йылан,*
*Кинә килуан* атар йылан,*
*Ҡылдин нескә йылан,*
*Ҡылыстан етеҙ йылан,*
*Туҙ башлы, ҡара күҙле*
*Тулы йылан.*
*Аҡ башлы тимерҙе киҫкән йылан,*
*Бир рәхмәтең,*
*Йә рәхманир-рахим!*

*Сәңке-сәңке, сәңке йылан,*
*Сәңке башлы ҡара йылан,*
*Атҡан уҡтан етеҙ йылан,*
*Ағын һыуҙан рауан* йылан,*
*Аҡ мамыҡтан йомшаҡ йылан,*
*Сағыр булһаң, саҡ, йылан,*
*Саҡмаҫ булһаң, ят, йылан,*
*Нух бәйғәмбәр хөрмәтенә*
*Ятҡан ерҙә ҡат, йылан*
*Ятҡан ерҙә тибрән (ул) йылан!*

Йылан арбаусы кешене саҡҡан йыландың үҙ исемен әйтеп өшкөрмәһә, бер файҙаһы ла теймәй. Бер көндө йылан арбаусыға бер ҡатынды алып киләләр. Арбаусы үҙе белгән йылан исемдәрен әйтеп бөтә, ҡатындың хәле ауырая ғына. Бер саҡ ҡатын: "Быуылам, еҙ төймәмде ысҡындырығыҙ!" - ти. Шулай ти генә - ҡатындың эсе шиңә башлай. Арбаусы һиҙеп ҡала: был ҡатынды саҡҡан йыландың исеме Еҙтөймә икән. Шул ис емде әйтеп өшкөрә башлай - ҡатын һауыға ла ҡуя.

Йылан арбағанда:

- *Әшер-өшәр, ағыуыңды төшәр,*
*Йылан, аҡма, мине, саҡма!* - тип һамаҡлайҙар.

Йыландың теше менән йә йүкә ағасын һыҙырып алып, сағылған урынға тейҙерә-тейҙерә әйтемләйҙәр:

- *Аҡ йылан,*
*Туҙбаш йылан,*
*Баҡыр йылан,*
*Һыу кеүек ағыҙайым,*
*Күл кеүек туҙҙырайым.*

# ЙЫЛАНДАН ҺАҠЛАНЫУ

Йылан юлды ҡыйып үтһә йәки эргәнән генә үтеп китһә, әгәр уның үҙенең юлын ҡыйып үтеү мөмкинлеге булмаһа, ул киткән яҡҡа үлән йә ботаҡ өҙөп ташлайһың. Ташлағанда, укынырға кәрәк.

Йылан йылҡы малынан ҡурҡа. Уның тире йылан өсөн ҡурҡыныс. Шуның өсөн дә ҡырҙа ятырға тура килһә, үңлек түшәп ятырға. Ятҡан ерҙе түңәрәтеп, дилбегә, эйәр, йүгән, ҡамыт һалһаң да, йылан килмәй. Йыланды таяҡ менән түгел, сыбыртҡы менән үлтерәләр.

Йылан саҡҡас, йыландан алда яҡын тирәләге йылғаға йүгерергә кәрәк. Әгәр сағылған кеше, һыуға алдан йүгереп етеп, яраһын ныҡып-һығып йыуып, һыу эсһә, ул тере ҡала. Әгәр йылан алдан һыуға төшөп өлгөрһә, сағылған кеше үлә, тиҙәр.

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**

*кират - *боҙоп әйтелгән ғәрәп һүҙе булыуы ихтимал: кәррә - ҡабат, кират - ҡарат - ауырлыҡ (0195 г) йә оҙонлоҡ (0,87 см) үлсәме.*
*килуан (кинә килуан) - *аҫтыртын дошман*
*рауан - *йылғыр.*

*ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ*



**Ҡырағай тәбиғәттә иҫән-имен ҡалыу серҙәрен АҠШ-тың Дискавери каналында тиҫтә йылдан ашыу барған "Нисек тә тере ҡалырға!" ("Выжить любой ценой!") тапшырыуы аша ла өйрәнергә булалыр, тип уйлайым. Тиҫтәләгән сериянан торған был документаль фильмдың алып барыусыһы Беар Гриллс тамашасыны үҙенең аҡылы, зирәклеге һәм йылғырлығы менән әсир итә. Ул һәр тапшырыу барышында үҙен иң ауыр, иң ҡатмарлы һынауҙар алдына ҡуя, һынауҙарҙы ярҙамһыҙ, махсус ҡорамалһыҙ, страховкаһыҙ үтергә тырыша. Һәр тапшырыуға ул үҙе менән бары тик бәке, оскон сығарыу өсөн саҡма һәм бер шешә һыу ғына ала. Ҡайһы саҡта парашютын да үҙе менән алғылай. Бөгөн гәзит уҡыусылар иғтибарына Беар Гриллстың теге йәки был һынауҙы нисек үтеүе тураһында бәйән иткән тасуирламабыҙҙы тәҡдим итмәксебеҙ. Бәлки, кемгәлер кәрәге тейер.**

# АҘАШЫП КИТҺӘҢ ДӘ...

## күңел күтәренкелеген һаҡла!



Һәр фильм һайын Беар үҙен аҙашҡан турист хәленә ҡуя. Асыҡ урындан барһа (далала, сүллектә), эҙләргә сыҡҡан ҡотҡарыусылар уның ҡайһы тарафҡа юл тотоуын күрһен, тип, юл башлаған урынын таштар, ағас-фәлән менән билдәләй. Юлға сығыр алдынан ул һәр ваҡыт ҡалҡыу, бейек урынға менеп, тирә-яҡты өйрәнә. Түбәлә торған сағында ул шишмәле, йылғалы урындарҙы тоҫмаллай. Ҡуйы урманда йылғаға юлыҡһа, ул ошо йылға түбәненә ҡарай китә. Йә һал эшләй, йә яр буйлап атлай. "Кешеләр борон-борондан бары тик йылға-күл буйында ғына төйәкләнгән", - ти ул. Йылғаның өҫкө өлөшөндә берәй йәнлек үлеп ятыу ихтималлығын иҫтә тотоп, ул һәр саҡ һыуҙы таҙартып эсә. Йылға ярындағы ҡомда сүмес ҙурлыҡ соҡор ҡаҙый ҙа, шул соҡорға һарҡып сыҡҡан һыуҙы шешәһенә тултыра. Уның әйтеүе буйынса, ҡом, таш үҙе үк һыу таҙартҡыс ролен үтәй. Һаҫыҡ һаҙлыҡ һыуын да таҙарта белә Беар. Ҡурай һымаҡ көпшәле үлән эсенә ҡат-ҡат итеп үлән, күмер, ҡом һәм йәнә үлән тултыра ла, тәбиғи фильтр эшләп, һыуҙы һура. "Кеше ашамайынса өс аҙна йәшәй алһа ла, һыуһыҙ өс көндән үлә", - ти ул.

Үҙен һыу менән тәьмин иткәндән һуң Беар нисек тә булһа тамаҡ туйҙырыу сараһын эҙләй башлай. "Тапҡан аҙығың уны табыуға киткән көсөңдө артығы менән тулыландырырлыҡ булырға тейеш", - ти. Йәғни, туҡлыҡлылығы менән айырылып тормаған аҙыҡҡа ваҡыт һәм көс сарыф итмәҫкә кәңәш итә белгес. Ул үҙе серегән ағастарҙан ҡуңыҙҙар соҡоп сығарып, уларҙы сей килеш тә, бешереп тә ашай. Әйткәндәй, Беар Гриллстың сей килеш ашаған "деликатес"тарын һанай китһәң, французларҙың, ҡытайҙарҙың менюһы ары торһон! Бер мәл ул дингеҙҙә хатта һигеҙаяҡтың бер аяғын сей килеш сәйнәп йотто. "Ҡайһы саҡта ваҡыт тарлығы арҡаһында усаҡ яғып булмай, шуға ҡорбанды бешермәй ашарға тура килә", - ти Гриллс.

Гриллс айыу йөрөгән урманда үҙе тотҡан йәнлекте ҡорған ҡыуышынан ситтәрәк әҙерләп ашай. Бешкән ит еҫен айыу бик алыҫтан уҡ тоя икән. Тамаҡ туйҙырып алғандан һуң төн үткәреү өсөн икенсе урын хәстәрләй. Айыулы урманда ул йыуанраҡ ағастың тарбаҡ ботағына һәндрә яһап, шунда йоҡлауҙы хуп күрә. "Был йылан-саяндарҙан, төрлө бөжәктәрҙән ҡотҡара", - ти ул. Берәй мәмерйә эсендә төн үткәрһә, мәмерйә ауыҙына сытыр-сатыр өйә, бау һуҙып, бауға таш һалынған тимер котелогын элеп, "сигнализация" эшләй. "Хәйләкәр ысул минә йоҡлаған сағымда берәй йыртҡыс йәнлек килеүен белеп торорға ярҙам итә, тере ҡалыу өсөн кәрәкле 1-2 секундлыҡ ваҡыт бирә", - ти ул. Йәнә, үҙе йоҡлаған урын тирәләй кесе хәжәтте башҡарыу ҙа ирҙәрҙе йыртҡыстарҙан һаҡларға мөмкин икән. "Йыртҡыстар ирҙәрҙең тестестерон гормонын әллә ҡайҙан һиҙеп, ирҙең көсөн, йәшен, ҡыҙыулығын самалап белә", - тиген мәғлүмәт бирә Гриллс.

Ут табыуҙың бихисап ысулдарын өйрәтә сәйәхәтсе. Иң киң таралғаны - үҙе менән бергә йөрөткән саҡма ярҙамында ут сығарыу. Уҡ башағын өйөрөлтөү ярҙамында осҡон сығарыу ысулын да йыш күрһәтә ул. Бик тә булмаһа, һыуланып эшлектән сыҡҡан кеҫә телефонының аккумуляторын ҡутарыу ысулы менән дә ут сығарып була. Бының өсөн аккумуляторҙы бысаҡ-фәлән менән тишеп, клеммаларҙы бергә тоташтырыу һәм уның өҫтөнә сатыр-сотор һалыу ҙа етә икән. Бына һинә 600 һумлыҡ ут! Ут тоҡандырыуҙа ҡайын туҙы ла, ҡарағай, шыршы сайыры ла ныҡ ярҙам итә.

Бауҙың нимәнелер бәйләүҙән тыш, тағы бер файҙаһы тураһында иҫкәртә сәйәхәтсе: шырлыҡта бер тирәлә әйләнеп йөрөүҙе иҫкәртеү өсөн оҙон ғына бау тағып алырға, ваҡыты-ваҡыты менән артҡа әйләнеп, һинең барған юлыңды ҡабатлаған бауҙың йүнәлешен тикшерергә кәңәш итә ул. Бәхетиһә, кешенең көслөрәк аяғы һәр саҡ алғараҡ сыға икән. Уң аяғың көслөрәк булһа, һин шырлыҡта һул яҡҡа китәсәкһең, тимәк. Бер йүнәлешетә тотоу ауырға төшһә, бау ярҙамға килә лә инде.

Тере ҡалыу өсөн ҡайһы саҡта ғәҙәти булмаған ғәмәлдәр атҡарыу талап итеп итеүе бар. Мәҫәлән, бер көндө әлеге геройыбыҙ йылғала йөҙөп барып, ҡулын йәйен ауыҙына тыҡты. Ҡул суғын йотторып, йәйенде ярға һөйрәп сығарҙы. Шулай буш ҡул менән дә балыҡ тотоп була икән! Һыуға күсәк менән һуғып, ваҡ балыҡты шаңҡытып тотҡанын да күргәнем бар.

Тәбиғәттә бөтөн нәмә лә ашарға яраҡлы түгел. Ҡоро ерҙә йәшәүсе тиреһе төҫлө таптар менән ҡапланған бөжәктәрҙән, бәшмәктәрҙән һаҡланырға кәңәш ителәр. Тәү ҡарашҡа хәүефһеҙ күренгән сыбар йәнлек тә ағыулы булырға мөмкин. Ул һунарсыларҙы "Мин - ағыулы, һаҡ бул!" тип иҫкәртә, имеш. Йыртҡыс януарға тап булһаң, ҡырҡа хәрәкәттәр яһамаҫҡа, ҡапыл килеп сыҡып, уны тертләтмәҫкә өйрәтә инглиз сәйәхәтсеһе. Йыландар ҡыштырҙауҙы әллә ҡайҙан тоя икән. Шуға, берәй мәмерйәгә ингән саҡта аяҡтар менән тупылдап, тауыш сығарып, барлыҡ йыртҡыстарҙы иҫкәртеп инергә кәрәк.

Серәкәйҙәрҙән һаҡланыу өсөн Беар Гриллс ҡырмыҫҡа иләүе ситендәге ҡыҙғылт массаны бит-ҡулға, башҡа асыҡ урындарға һөртөргә кәңәш итә. Әйткәндәй, бесән ваҡытында шулай итеп, үҙемде лә, туғандарымды ла серәкәйҙән һаҡланым. Бер мәл, үрмәксенән ҡурмаҡсе, тип, хатта бер ҡырмыҫҡаны ла ашап ҡараным. Тәме оҡшаманы, әлбиттә. Шулай ҙа, юҡтың көнөнән ризыҡҡа барағыр, тип уйланыла. Еләк ҡандалаһы еҫенең тәмлерәк һәр хәлдә...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беар Гриллстың тапшырыуҙарын ҡараһаң, аҙашыу әллә ни ҡурҡыныс түгел һымаҡ. Аҙашҡандарға уның ошондай алтын кәңәштәре ярҙамға килер: "Алдымда ниндәй генә билдәһеҙлек булһа ла, мин тәү сиратта ғаиләмде уйлайым. Ул уй миңә көс-ҡеүәт, илһам бирә. Шулай уҡ тере ҡалыр өсөн кешегә күңел күтәренкелеген һаҡларға кәрәк. Шул саҡта ғына ҡый булып ятҡан бүрәнәләрҙән - һал, буш шешәләрҙән - ҡотҡарыу түңәрәге, ҡолаған ағастан - ҡыуыш эшләү идеяһы барлыҡҡа килә..."**

**Илгизәр БУЛАТОВ әҙерләне.**

***✓ 1736 йылдың 11 феврале - батша хөкүмәте башҡорттарҙың күп хоҡуҡтарын сикләүсе указ сығара. Мәсәлән, башҡорттарға теләһә ниндәй ҡалаға 60 километрҙан да яҡынырак күсеп ултырыу рөхсәт ителмәй.***



*АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ*

# НУРИӘҒЗӘМ ТАҺИРОВ



**Бынан бер нисә йыл элек ошо юлдарҙың авторына атаҡлы шағирыбыҙ Шәйехзада Бабичтың Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге архивында һаҡланған ҡулъяҙма фондын өйрәнеп, тасуирлама төҙөү бәхете тейгәйне. Ошо бер томлыҡ фонд эсенә танылған телсе-ғалим, әҙип, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Нуриәғзәм Таһировтың ҡулъяҙма дәфтәре лә беркетелгән булып сыҡты. Дәфтәр ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған 14 шиғырҙан тора. Шиғырҙар башлыса социаль һәм лирик йөкмәткеле. Улар хаҡында ниндәй ҙә булһа һүҙ әйтерҙән алда, авторҙың тормош юлын һәм эшмәкәрлеген ҡыҫҡаса хәтергә төшөрөп үтеү урынлы булыр.**

Нуриәғзәм Таһир улы Таһиров 1888 йылдың 9 ғинуарында Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙе (хәҙерге Силәбе өлкәһе Арғаяш районы) Ләүеш (Ҡужа) ауылында тыуып үҫкән. Ауылдағы урыҫ-башҡорт приход мәктәбен тамамлағандан һуң, 2 йыл самаһы күрше Мәүлит мәктәбендә һабаҡ ала, аҙаҡ Троицк ҡалаһындағы данлыҡлы "Рәсүлиә" мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Ләкин бындағы тәртип менән килешә алмайынса, уҡыуын ташлап, Себер тарафтарына сығып китә. Күпмелер ваҡыт шахтала эшләй, ҡаҙаҡ ауылдарында балалар уҡыта. 1908 йылдың көҙөндә Нуриәғзәм, Өфөгә килеп, "Ғәлиә" мәҙрәсәһенә уҡырға инә һәм, ауыр шарттарҙа йәшәүенә, һаулығының насарайыуына ҡарамаҫтан, 1911 йылда уны уңышлы тамамлап сыға. 1917 йылға тиклем ул тыуған яҡтарындағы һәм алыҫ Себерҙәге ауылдарҙа уҡытыусылыҡ менән шөғөлләнә. Революция ҡубып, батша ҡолатылғас, Н. Таһиров башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. 1917 йылда делегат булараҡ Беренсе Бөтөн Башҡорт ҡоролтайында ҡатнаша һәм Башҡорт Мәркәз Шураһына ағза итеп һайлана. Ҡоролтайҙың ҡушыуы буйынса Башҡортостандың төньяҡ райондарында һәм Пермь губернаһында башҡорт кантон идаралыҡтары ойоштороуға күп көс һала, Ырымбурҙа башҡорт йәштәренең "Тулҡын" исемле мәҙәни-ағартыу ойошмаһын төҙөүҙә ҡатнаша.

Башҡорт ғәскәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң, Н. Таһиров ғәскәр сафында Көньяҡ фронтта Деникинға, Петроград янында Юденич дивизияларына ҡаршы һуғыштарҙа була. Аҙаҡ яҙмыш елдәре уны башҡорт хөкүмәте ағзалары менән берлектә Ҡаҙағстан, Урта Азия тарафтарына ташлай. Унан ҡайтҡас, 1921 йылдан башлап, Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариатының коллегия ағзаһы, 1922 йылдан Башҡорттарҙың көнкүрешен, тарихын, телен һәм мәҙәниәтен өйрәнеү буйынса ғилми йәмғиәт рәйесе булып эшләй. Ошо шаулы, шанлы йылдар эсендә, милләтселектә ғәйепләнеп, Силәбе төрмәһендә һөргөндә лә булып ала. 1929 йылда Нуриәғзәм Таһиров НКВД тарафынан йәнә ҡулға алына һәм ғүмеренең аҙағынаса, йәғни 1937 йылға тиклем, ҡаты эҙәрлекләүҙәргә дусар ителә.

Нуриәғзәм Таһиров - башҡорт тел ғилеме тарихында тәрән эҙ ҡалдырған ғалим. Егерменсе йылдарҙа ул милли телебеҙҙе ғәмәлгә индереү өлкәһендә мөһим эштәр башҡара: тел тарихы, грамматика, орфография, һүҙлек буйынса тиҫтәгә яҡын белешмә һәм дәреслек әҙерләп сығара. Уның үҙе һәм коллегалары менән бергәләп яҙған "Башҡортса яҙыу ҡоралы" (1924), "Башҡортса эш йөрөтөү өсөн ҡулланма һәм үрнәктәр" (1924), "Башҡорт теленең сарфы" (1925), "Башҡорт лөғәте" (1926) кеүек хеҙмәттәре бөгөн дә фәнни әһәмиәтен юғалтмаған.

Әҙәби ижад менән иһә Нуриәғзәм Таһиров шәкертлек йылдарында уҡ шөғөлләнә башлай. "Ғәлиә"лә уҡыған осоронда айырата әүҙем яҙыша. Айырым шиғырҙарын, публицистик яҙмаларын Өфөләге "Тормош" гәзитенә лә ебәргеләй, күпселек әҫәрҙәре һәм мәҡәләләре Ырымбурҙағы "Ваҡыт" ғәзите биттәрендә баҫыла. Революция һәм граждандыр һуғышы йылдарында башҡорт милли матбуғаты биттәрендә әүҙем сығыш яһай. Әҫәрҙәрендә һәм мәҡәләләрендә үҙен "Нуриәғзәм Таһиров" тип кенә түгел, "Нуриәғзәм Мансуров", "Нуриәғзәм Басыров" тип тә таныштыра, ҡайһы бер осраҡтарҙа хатта "Нута" тигән псевдонимды ҡуллана.

Ғилми архивта һаҡланған ҡулъяҙма йыйынтығында ла автор үҙен Нуриәғзәм Таһиров (Басыров) тип исемләгән. Ҡомартҡыла һис ниндәй дата күрһәтелмәгән. Әммә йыйынтыҡҡа ингән "Хисапхәл" шиғырының 1910 йыл "Ваҡыт" гәзитенең 632-се һанында баҫылып сығыуын иҫәпкә алғанда, әҫәрҙәр сама менән 1909-1910 йылдарҙа ижад ителгән, тип фаразларға нигеҙ бар.

Ҡулъҙма дәфтәрҙең ғилми архивтағы Ш. Бабич фондына килеп юлығыуы ла осраҡлы түгелдер. Нуриәғзәм уҡыуын тамамлаған 1911 йылда шул уҡ "Ғәлиә" мәҙрәсәһенә Шәйехзада ла уҡырға инә. Аҙаҡ улар икеһе лә башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашалар, Башҡорт Мәркәз Шураһы ағзаһы булалар; Ырымбурҙа башҡорт йәштәренең "Тулҡын" ойошмаһын бергәләп төҙөйҙәр. Яҙмаларын автор фекерҙәше, көрәштәше, ҡәләмдәше булған мәшһүр Бабичҡа үҙе бүләк иткән булыуы бик ихтимал.

Дәфтәргә теркәлгән шиғры әҫәрҙәрҙең күпселеге мәғрифәтселек идеялары менән һуғарылған. Автор йыш ҡына, тирә-йүнгә күҙ һалып, тормош, йәшәйеш, милләт яҙмышы хаҡында уйланыуҙарға бирелә. Халыҡтың ауыр хәле, илдәге бәхетһеҙлектәр иң элек наҙанлыҡтан, һөнәрһеҙлектән, ти ул. Нуриәғзәм Таһировтың шиғри мираҫы үҙенсә ҡыҙыҡлы, үҙенсә әһәмиәтле. Ул, бер яҡтан, XX быуат башы башҡорт шиғриәтенең яңы биттәрен асһа, икенсе яҡтан, авторҙың ижади эшмәкәрлеге хаҡындағы фекеребеҙҙе байыта, ҡарашыбыҙҙы киңәйтә.

**Миңлеғәле НӘҘЕРҒОЛОВ, филологя фәндәре докторы.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

## ӘЛМИСАҠТАН...



➔ 1734 - 1777 йылдар - тарихсы, Ырымбур крайы тикшеренеүсеһе П.И.Рычковтың Уралда йәшәгән йылдары. 1767 йылда Петербургта уның "Ырымбур губернаһы топографияһы һәм тасуирланышы" тигән хеҙмәте баҫылып сыға. 1776 - 1777 йылдарҙа П.И.Рычков "Ырымбур губернаһы лексиконы йәғни һүҙлеге" ике томлығын баҫтырып сығара, тәүге томы - Көньяҡ Урал биләмәһе буйынса географик һүҙлек.

➔ 1735 йыл - 1722 - 1734 йылдарҙа Урал һәм Себер ҡаҙна заводтары идарасыһы булып эшләгән Вильгельм де Геннин "Урал һәм Себер заводтары һүрәтләнеше" тигән китабын тамамлай, ул Мәскәүҙә 1937 йылда ғына донъя күрә. Петр Беренсе бойороғо буйынса рустар күсеп килгән биләмәләрҙә завод һәм йәкшәмбе мәктәптәре асыла башлай. Вильгельм де Геннин улар өсөн устав яҙа.

➔ 1735 йыл - Башҡортостан аша һалынған Себер юлы асыла.

➔ 1735 - 1740 йылдар - башҡорттарҙың Ырымбур экспедицияһы ойоштороуға һәм Яйыҡ йылғаһы буйында ҡала төҙөүгә ҡаршы протест белдергән ихтилалдары башлана. Был күтәрелештәр Ҡараһаҡал ихтилалы менән тамамлана.

➔ 1735 - 1804 йылдар - Е.Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышының баш полковнигы Ҡәнзәфәр Усаевтың ғүмер йылдары. 1773 йылдың ноябрендә Е.Пугачевҡа ҡушыла, аҙаҡ Рогервик крепосында Юлай Аҙналин һәм Салауат Юлаев менән бергә вафат була.

➔ 1736 йылдың 11 феврале - батша хөкүмәте башҡорттарҙың күп хоҡуҡтарын сикләүсе указ сығара. Мәҫәлән, тимерлектәр төҙөү һәм тимер менән эш итеү тыйыла; башҡорттарға теләһә ниндәй ҡалаға 60 километрҙан да яҡынырак күсеп ултырыу рөхсәт ителмәй. Башҡорттар менән татарҙар араһында никахҡа драгун атын ҡаҙнаға тапшырғандан һуң ғына рөхсәт бирелә. Указ теләгән берәүгә башҡорт ерҙәренә хужа булырға рөхсәт бирә.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән. (Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Инеш

*"Тарих ҡаты хәҡиҡәт урынлаштырыу өсөн яҙыла".*
*(Кесе Гай Плиний, Рим яҙыусыһы)*

Башҡорт халҡының боронғо тарихы менән шөғөлләнеүсе ғалимдар үҙҙәренең хеҙмәтендә ҡәбиләләр берлеген һәм айырым ырыуҙарҙы тәрән өйрәнә. Ғалимдар башҡорттарҙы улар йәшәгән Көньяҡ Урал, Рәсәйҙең башҡа төбәктәре, Евразия өлөштәре бәйләнешендә, аҫаба ерлегендә ҡарай. Совет власы тарафынан башҡорттарҙан тартып алынып, республикаға инмәй ҡалған территориялар күп осраҡта ғалимдар иғтибарынан ситтә ҡала, иғтибар булған осраҡта ла был мәсьәләгә һаҡ ҡараш һиҙелә. "Тарихи Башҡортостан"да йәшәүсе башҡорттарға ҡарата бындай мөнәсәбәт йәшәгәндә уларҙың тарихы яйлап онотолоуға дусар ителә, тарих ысынбарлығы боҙола һәм башҡорт халҡының тарихы, данлы ҡаһарманлығы был ерҙәрҙә хәҙер йәшәгән икенсе бер халыҡтыҡы итеп күрһәтелә башлай. Шуға күрә боронғо башҡорт ерҙәрендә йәшәгән башҡорттарҙы боронғо башҡорттарға бәйләү мөмкинлеге юҡҡа сыҡҡас, ҡайһы бер тарихсылар башҡорт ырыуҙарын йә ирандарға, йә венгрҙарға, йә парфяндарға бәйләй башлай. Етмәһә, башҡорт халҡының рухи һәм матди мираҫын (миҫалға Филиппов кургандарын сарматтарҙың мираҫы итеп күрһәтеүҙе генә алайыҡ) башҡа халыҡтыҡы тип атарға әҙер генә торалар.

Башҡорт халҡының тарихы тулыһынса өйрәнелеп бөтмәгән, аҡ таптар унда күп. Һуңғы быуаттарҙа Башҡортостандың тарихын өйрәнеү буйынса баҫылып сыҡҡан бик күп һандағы ғилми хеҙмәттәр, мәҡәләләр һәм китаптар башҡорт халҡының тарихын тулы килеш күҙ алдына баҫтыра алмай әле. Беҙҙең тикшеренеүҙәргә ярашлы, Башҡортостандың тарихы төрлө осорҙа бер нисә илдең составында, айырым ханлыҡтар һәм эре ҡәбиләләр берҙәмлегендә Евразия территорияһында "Бөйөк Башҡорт иле" тип ҡарала ала.

Һәр бер халыҡтың үҙенең тарихи йәшәү майҙаны, үҙенә хас мәҙәниәте, теле, йолалары, үҙен һаҡлау һәм үҫтереү өсөн хеҙмәт итеүсе дәүләт ҡоролошо була.

Башҡорттарҙың ҙур өлөшө уғыр этник донъяһына, аҙаҡ уғыр-төрки донъяһына ҡарай. Урта быуаттарҙа йәшәүсе уғырҙарҙы (уғер, юғор, уғур) XI быуат башында башҡорт тип атай башлағандар, төрөктәр уларҙы был ваҡытта һаман да "уғыр" тип атаған. Башҡорт халҡының тарихын көньяҡта йәшәүсе оғуздар, болғарҙар, көнсығышта йәшәүсе һундар, төрөктәр, ҡыпсаҡтар, монголдар һәм башҡалар менән тығыҙ берлектә ҡарау фарыз. Уларҙың һәр ҡайһыһы башҡорт халҡының этник тарихында үҙ эҙен ҡалдырған, халыҡтың үҫешендә хәҙерге көнгәсә ҙур роль уйнаған. Хәҙерге Башҡорт иленең халҡы араһында беҙҙең эраға тиклем 2000 йылда, асылда, европеоид тибындағы ҡәбиләләр ҙә булған. Ә яңы мең йыллыҡ башында, беҙҙең эраға тиклем VIII быуат самаһында, көнсығыштан монголоид ҡәбиләләр килеп, VII быуат башына тиклем урындағы халыҡҡа ҙур йоғонто яһаған. Ваҡыт үтеү менән был халыҡтар бер-береһе менән ныҡ ҡатнашып киткән, ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙә был халыҡтарҙың уртаҡ һыҙаттары күп табылды. Археологик ҡомартҡыларҙы өйрәнеү һөҙөмтәләре иһә, уларҙың төрлө халыҡтар икәнлеген раҫланы.

**(Дауамы бар).**

✓ Бығаса һөрөлмәй ятҡан ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәр эшкәртелде, сәсеү өсөн сифатлы орлоҡтар һатып алынды. Бөгөн ерҙе ҡуртымға алып та, тиҫтә йылдар буйына уны файҙаланмау күренештәре лә бөтә бара.



# АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ ИҪӘБЕН

## ауылды һаҡлап ҡалыуға

**1 июлдән илдә Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу башланды. БМО һәм уның аҙыҡ-түлек комиссияһы нормативтарына ярашлы, үҫешкән илдәрҙә ҙур күләмле статистика тикшеренеүҙәре 5-10 йылға бер тапҡыр уҙғарылып тора. Әлеге ваҡытта Австралияла, Яңы Зеландияла ауыл хужалығы иҫәбен алыу - йыл һайын, Германияла һәм Голландияла - 4, АҠШ-та һәм Канадала 5 йылға бер тапҡыр үткәрелә. Ә Рәсәйҙә был мөһим кампания һуңғы тапҡыр бынан 10 йыл элек тормошҡа ашырылғайны. Редакция ҡунағы - БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу комитеты рәйесе, иҡтисад фәндәре докторы Рәсүл ҒОСМАНОВ был сараның әһәмиәте менән бер рәттән, ауыл хужалығы тураһындағы фекерҙәре менән бүлешә.**

▸ **Рәсүл Үзбәк улы, ауыл хужалығы иҫәбен алыу кеүек сараның төп әһәмиәте нимәлә?**

- Власть, закондар сығарыу органдары булһынмы, башҡарма органмы - үҙ эшендә теге йәки был ҡанунға таяна. Ә ул ҡанундарҙы әҙерләү өсөн сифатлы статистика мәғлүмәте булыуы мөһим. Сөнки закондар халыҡ мәнфәғәтенә хеҙмәт итергә тейеш. Йәйгеһен башҡарма һәм закон сығарыу органдары алдағы йылға бюджет проектын әҙерләй һәм ул көҙгөһөн ҡабул ителә. Бюджет, мәғлүм булыуынса, программа характерына эйә. Иҫәп алыу һөҙөмтәләре аҡсаны ҡайҙа йүнәлтеү, кемгә ярҙам итеү, ниндәй льгота биреү, ҡайҙа нимәне көйләү кеүек ауыл хужалығында бик мөһим булған эштәрҙе асыҡлай. Ошо күҙлектән ҡарағанда, иҫәп алыу - закон сығарыу, башҡарма власть органдары өсөн генә түгел, халыҡ өсөн дә мөһим әһәмиәткә эйә.

Европаның бик күп илдәре һәм алдынғы илдәр йыл һайын ауыл хужалығы иҫәбен ала. Сөнки был сара, тәү сиратта, ауыл хужалығы продукцияһын етештереүсенең үҙенә һәм ауыл халҡына кәрәк. Улар был сарала ҡатнашып, үҙҙәренең хужалыҡ эшмәкәрлеге буйынса һығымта яһай, хаталарын күрә, күршеһенә ҡарап сәмләнә. Ауыл кешеһен сәмләндереүҙең ниндәй ҡеүәтле көс булыуын әле белмәйбеҙ генә. Элек "атһыҙ башҡорт" тигән һүҙ үлем менән бер булһа, бөгөн "малһыҙ" тигән һүҙ ауыл кешеһенең сәменә бик ныҡ тейә.

Һәм тағы: кампанияның йәй уртаһында уҙыуы ла яҡшы - теләгән кеше ҡош-ҡорт алып үҫтереп тә, бал ҡорто күсен алып та өлгөрөргә мөмкин.

▸ **Мөһим сара булыуға ҡарамаҫтан, халыҡ ауыл хужалығы иҫәбен алыуға шикләнеп ҡарай, хатта, мал башына йәки емеш ағасына һалым һала башларҙар инде, тигәнерәк һүҙҙәр ҙә йөрөй...**

- Ғөмүмән, граждандар ниндәйҙер ҡағыҙ тотоп, уны тултырып йөрөүселәрҙән шикләнә инде ул. Шуға күрә, иҫәпселәр ҡайҙандыр ситтән килеүселәр түгел, ә шул уҡ ауылда йәшәгән, эшләгән, халыҡ араһында абруй ҡаҙанған кешеләр булырға тейеш. Уларҙы униформа - ҡояштан һаҡлаусы козыреклы зәңгәр кепка, иҫәп алыу логотибы төшөрөлгән зәңгәр жилет һәм Росстат символикаһы булған зәңгәр портфель буйынса танырға мөмкин. Үҙҙәре менән мотлаҡ танытмалары ла булырға тейеш. Халыҡҡа иҫәп алыусыларҙан да, һалым һалыусан да ҡурҡырға ярамай. Сөнки яуаптар хужаның һүҙҙәренән сығып ҡына яҙыласаҡ. Әгәр хужа аныҡ мәғлүмәтте үҙе лә белмәһә, улар мал башын йәки ағастарҙы иҫәпсе менән бергәләп һанай ала.

Халыҡтың иҫәп алыу һөҙөмтәләренең ниндәйҙер маҡсатта ҡулланылыуынан хәүефләнеүе коллективлаштырыу, һуғыш һәм һуғыштан һуңғы осорҙан ҡалған ҡурҡып йәшәүҙән киләләр, моғайын. Ул ваҡытта индустриалләштереү, заводтар төҙөү өсөн аҡса талап ителә. Ә берҙән-бер сығанаҡ - ауыл. Шул йылдарҙа Башҡортостан ауылдары хатта күрше өлкәләргә ҡарағанда ла ныҡыраҡ зыян күрә. Совет власы ойошторолған тәүге йылдарҙа, ысынлап та, ауыл халҡы ныҡ рәнйетелә, уларҙың малы тартып алына. Бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда, заманында ҡулаҡ мөһөрө баҫылыусылар ауылдың иң уңған, иң әүҙем кешеләре була. Ике-өс һыйыр тотоусыларҙы Себергә оҙаталар. Һәм был ғәмәлдәрҙең барыһы ла халыҡтың күҙ алдында тормошҡа ашырыла, ә хәтер - ул мәңгелек. Шуға хәҙер ҙә халыҡ ниндәйҙер кире һөҙөмтә көтә. Иҫәпкә алдылар ҙа, малымды йә тартып алырҙар, йә тағы ла ниндәйҙер һалым уйлап сығарырҙар, тип шикләнә. Бөгөн, киреһенсә, ауылды яҡлау, уға ярҙам итеү буйынса илдә лә, республикала ла ҙур эштәр башҡарыла икәне һәр кемгә мәғлүм.

▸ **Рәсәй менән Евросоюз илдәре араһында мөнәсәбәттәрҙең насарайыуы һөҙөмтәһендә улар беҙгә аҙыҡ-түлек санкцияһы иғлан итте һәм эмбарго 2017 йылға тиклем оҙайтылды. Ил Президенты быны Ватан етештереүсеһенә асылған мөмкинлек тип ҡабул итте һәм сит илдән индерелгән продукцияны урындағылар менән алыштырыу бурысын ҡуйҙы. Бөгөн сит ил тауарын үҙебеҙҙекенә алыштырыуҙың ниндәй стадияһында торабыҙ?**

- Әлеге ваҡытта был йүнәлештә ниндәйҙер аҙымдар эшләнде, тиергә мөмкин. Бығаса тиҫтә йылдар һөрөлмәй ятҡан ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәр эшкәртелде, сәсеү өсөн сифатлы орлоҡтар һатып алынды. Ужым матур ғына шытты, көҙгә яҡшы уңышҡа өмөтләнәбеҙ. Бөгөн ерҙе ҡуртымға алып та, тиҫтә йылдар буйына уны файҙаланмау күренештәре лә бөтә бара. Әгәр ҡуртымға алынған ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ер ике йыл эшкәртелмәй икән, дәүләт уны кире тартып алырға хоҡуҡлы. Әммә был пай ерҙәренә ҡағылмай, уларға халыҡ үҙе хужа, үҙе теләгәнсә файҙалана, арендаторға ҡулланыуға биреп, килем ала ала.

Шулай уҡ малсылыҡ, үҫемлекселек буйынса тиҫтәләрсә инвестпроекттар тормошҡа ашырыла. Ауылда эшләргә теләүсе инвесторҙар арта. Сөнки ерҙән алынған килем ныҡ юғары, бер генә тармаҡ та бындай килем бирмәй. Ауыл хужалығын дөрөҫ алып барғанда, бер нисә ай эсендә 100 процент рентабеллеккә өлгәшергә мөмкин. Шундай өлкәнең береһе - ҡошсолоҡ. Бөгөн инвесторҙар ҡошсолоҡ фабрикаларын һатып алып, йыл дауамында уларҙа реконструкция үткәреп, продукциялары менән республика баҙарын ғына түгел, күрше өлкәләр баҙарын да яуланы. Ҡатнаш аҙыҡ, концентрацияланған аҙыҡ, иген ҡулланылған өлкә - тиҙ һөҙөмтә биреүсе өлкә. Шуға күрә был тармаҡта сит ил продукттарын тиҙ алмаштырҙыҡ, тиергә була.

Бөгөн беҙҙә эре мөгөҙлө мал ите етешмәй. Шуға күрә был тармаҡта тотҡарлыҡтар бар. Йәғни беҙгә "500 ферма" программаһын тулыһынса тормошҡа ашырырға кәрәк. Әлбиттә, малсылыҡ фермаһын һәр ерҙә лә асып булмай әлегә, әммә шәхси хужалыҡтарҙа күпләп мал аҫырала. Был да үҙенә күрә сит ил ризығын алмаштырыуға ҙур өлөш. Шәхси хужалығында мал һанын үрсетә башлап, кеше яйлап фермер хужалығы асыуға барып етер, тип уйлайбыҙ. Ни өсөн фермер хужалығы? Сөнки уларға дәүләт яғынан ярҙам бар, льготалар ҡаралған. Иҫәп алыу шәхси хужалыҡтарҙа ла, фермер хужалыҡтарында ла мал һаны артыуға тағы ла бер этәргес булырға тейеш.

Сит ил продукцияһын алыштырыу тураһында һүҙ йөрөткәндә, эшкәртеү тармағы тураһында ла оноторға ярамай. Был өлкә эшмәкәрлеге әлегә беҙҙә аҡһай. Мәҫәлән, бөгөн республикала үҙебеҙҙә тарттырылған он етешмәй. Элек Урал аръяғы районларының сифатлы онон ҡуллана инек. Бөгөн иген етештерәбеҙ, уны етерлек күләмдә он итеп тарттыра алмайбыҙ. Дәүләкән элеваторы ғына республиканың кондитер, икмәк бешереү сәнәғәте ихтыяжын ҡәнәғәтләндермәй. Ә күрше төбәктәрҙең онон алып, беҙ уларҙың етештереүсеһен финанслайбыҙ. Күршеләрҙе ҡыуып сығарырға кәрәк, тимәйем, ә үҙебеҙҙең эшкәртеүсене, фасовкалаусыны, уның продукцияһының магазин кәштәләренә килеп етеүен хупларға, ярҙам итергә тейешбеҙ. Йәғни, урындағы баҙарҙың үҙенең шарттарын да алға һөрөүе мотлаҡ.



▸ **2006 йылда үткән ауыл хужалығын иҫәпкә алыу кампанияһы һөҙөмтәләре нигеҙендә 2008-2012 йылдарға АПК-ны үҫтереү буйынса дәүләт программаһы әҙерләнде һәм тормошҡа ашырылды. Ул артабан дауам ителдеме, әллә 2012 йыл үткәс, туктап ҡалдымы?**

- Был программа оҙайтылды һәм әле 2020 йылға тиклемге эшмәкәрлекте күҙаллай һәм ауылдың социаль үҫешен дә, юлдар төҙөлөшөн дә, тоҡомсолоҡ һәм селекция эше буйынса юғары технологиялар ҡулланыуҙы ла үҙ эсенә алған күләмле программаны тәшкил итә. Өҫтәүенә, РФ Президенты В. Путин да, РФ Хөкүмәте Рәйесе Д. Медведев та бик йыш ҡына ауыл хужалығына етди ярҙам күрһәтелеүе, финанстарҙың программала күрһәтелгән сумманан күберәк бүленеүе хаҡында белдерә. Әммә шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк: Рәсәйҙә 80-дән ашыу субъект бар. Һәм улар бер-береһе менән ауыл хужалығы буйынса конкурентлыҡта тора. Барыһына ла ауыл хужалығын үҫтереү мөһим. Шуға күрә, программа буйынса килгән сумма ҙур булмаһа ла, беҙ даими рәүештә бюджет ассигнованиеларын арттырыу (шул иҫәптән инвестпроекттар

*Иҫәп алыу темаһына һөйләшкәндә, ябай граждандар тураһында һүҙ йөрөтәбеҙ. Миллионлаған граждан үҙ хужалығын үҫтерә икән - был да инвестиция. Бәләкәй генә, әммә барлыҡ граждандарҙың хужалығын бергә ҡушһаң, улар барлыҡ инвесторҙарҙан күберәк өлөштө алып торасаҡ. Һәр кемдең тырышлығы - был да инвестиция. Бөгөн хатта ҡала халҡы ла баҡсаларында күпләп йәшелсә-емеш үҫтерә. Был дөрөҫ тә, сөнки һәр кем аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге өсөн яуаплылыҡты үҙ иңенә алырға тейеш. Икенсенән, шәхси хужалығында үҫтергән йәшелсә-емеште һатып, аҡса ла эшләй ала кеше. Был инде төп аҡса сығанағына өҫтәмә килем килтерә. Хатта ҡайһы берҙә өҫтәмә килем төп килемдән артып та китеүе мөмкин.*

буйынса ла) өстәндә эшләйбеҙ. Йәғни, сит ил һәм Ватан инвесторҙары менән даими эш алып барыла, инвестициялар йәлеп итеүгә йүнәлтелгән һәр аҙым тормошҡа ашырыла.

Иҫәп алыу темаһына һөйләшкәндә, ябай граждандар тураһында һүҙ йөрөтәбеҙ. Миллионлаған граждан үҙ хужалығын үҫтерә икән - был да инвестиция. Бәләкәй генә, әммә барлыҡ граждандарҙың хужалығын бергә ҡушһаң, улар барлыҡ инвесторҙарҙан күберәк өләштә алып торасаҡ. Һәр көндәң тырышлығы - был да инвестиция. Бөгөн хатта ҡала халҡы ла баҡсаларында күпләп йәшелсә-емеш үҫтерә. Был дөрөҫ тә, сөнки һәр кем аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге өсөн яуаплылыҡты үҙ иңенә алырға тейеш. Икенсенән, шәхси хужалығында үҫтергән йәшелсә-емеште һатып, аҡса ла эшләй ала кеше. Был инде төп аҡса сығанағына өстәмә килем килтерә. Хатта дан туған телен дә онота. Бары тик ауыл кешеһе генә тәбиғәт менән йәшәй, бары тик тәбиғәт кешеһе генә милли үҙенсәлеген һаҡлап ҡала ала. Шуға күрә, ауыл хужалығы иҫәбен алыу беҙҙең өсөн ауылды һаҡлап ҡалыу йүнәлешендә бик мөһим сара ул.

**Ауыл хужалығы иҫәбен алыуҙың маҡсаттарының береһе - илдең аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген тәьмин итеү. Ғөмүмән, нимә ул аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге?**

- Был термин эсенә ҙур мәғәнә һалынған: ул - илдең аҙыҡ-түлек запасы, тигән һүҙ. Шәхси хужалыҡтар хәүефһеҙ ризыҡ менән үҙ-үҙен тулыһынса тәьмин итә ала. Тимәк, магазиндарҙа һатылған сит илдән индерелгән аҙыҡ-түлекте һатып алмай. Унан һуң, магазиндарҙағы аҙыҡ-түлеккә хаҡтар ҙа артып тора бит. Әгәр хаҡ арта, ә килем аҙ икән, нисек магазиндан ғына һатып алып ға-

# АЛЫУ...

## бер аҙым ул

ҡайны берҙә өстәмә килем төп килемдән артып та китеүе мөмкин.

Ауылдың иҡтисади сәйәсәтен күҙаллау, ауыл халҡы өсөн иҫәп алыуҙың глобаль характерға эйә икәнлеге шунда ла сағыла инде.

**Башҡортостан үҙен-үҙе аҙыҡ-түлек менән тәьмин итә аламы, уның шундай ҡеүәте бармы?**

- Тулыһынса тәьмин итә ала, тип ныҡлы ышаныс менән әйтеп булмай әлегә. Әммә күрше төбәктәр менән сағыштырғанда, үҙебеҙҙең баҙарҙы яулап, күршетирәне лә туйҙыра алырлыҡ файҙаланылмаған ҡеүәтебеҙ бар, тиер инем. Башҡортостан элек-электән аграр республика булды һәм беҙҙә шарттар ҙа унайлыраҡ. Унан һуң, бөгөн күптәрҙең ҡаланан ауылға күсенеүе күҙәтелә. Һәм был күренеш киләсәктә таҫы ла әүҙемләшәсәк, тип әйтергә мөмкин. Сөнки ҡала халҡының күбеһе ауылдан сыҡҡан, ауыл менән бәйләнешен өҙмәгән. Улар барыбер ауылға тартыла.

**Башҡортостан - дөйөм халҡының 40 проценты самаһы ауылда йәшәгән субъекттарҙың береһе. Әммә һуңғы йылдарҙа ауыл бөлгөнлөккә төшә бара һымаҡ...**

- Быға юл ҡуйылырға тейеш түгел. Башҡортостан, өстәүенә, милли республика ла. Беҙҙең тамырҙарыбыҙ ауылда. Республиканың иң арҙаҡлы, иң абруйлы шәхестәре лә ҡаланан түгел, ауылдан сыҡҡан. Ә ҡалала кеше, киреһенсә, үҙенсәлеген, тамырҙарын юғалта. Шуға күрә ауылды, ауыл хужалығында производствоны һаҡлау - Башҡортостан халыҡтарының ғөрөф-ғәҙәттәрен, милли үҙаңын да һаҡлау ул. Әгәр беҙ ауылды юғалтһаҡ, милли үҙенсәлегебеҙҙе юғалтасаҡбыҙ. Ҡалала кеше тиҙ арала ҡулланыусыға әүерелә, бер нисә быуын- иләнде туйҙырырға мөмкин? Экологик күҙлектән ҡарағанда ла, ситтән килтерелгән продукцияның ҡайҙа, нисек етештерелгәнен белмәйбеҙ. Эйе, уның санитар нормаларға тап килеүе лә мөмкин, әммә барыбер ҙә үҙең үҫтергән мал, йәшелсә-емештең ысынлап та хәләл икәненә бер ниндәй раҫлау ҙа кәрәкмәй.

**Иҫәп алыу һөҙөмтәләрендә нисә проценттка яңылышлыҡ булыуы мөмкин?**

- Ауыл хужалығы иҫәбен алыу бик етди бара. Киң мәғлүмәт саралары ла был эштән ситтә ҡалмай, белгестәр ҙә даими сығыш яһап, халыҡҡа мәғлүмәт еткереп тора. Иҫәп алыусылар махсус уҡыу үткән, барлыҡ нескәлектәрҙе беләә һәм һүҙҙе тейешле, етди йүнәлешкә бороп, кәрәкле мәғлүмәт аласаҡ.

Тағы ла шуны әйтеп китер инем: алда икенсе ҙур сәйәси кампания - һайлауҙар тора. Ул бер нисек тә иҫәп алыу менән бәйле түгел. Шуға күрә, иҫәп алыу ваҡытында кемгәлер бер кандидат өсөн агитация үткәреү тыйыла. Ауыл хужалығы иҫәбен алыу - ул сәйәси ваҡиғаларҙан азат дәүләт эшмәкәрлеге, ғәҙәти халыҡ сараһы һәм уның һөҙөмтәләре ауылдың, ауыл сәнәғәте комплексының артабанғы үҫеше менән бәйле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**15 августка тиклем дауам итәсәк Ауыл хужалығы иҫәбен алыу, күреүегеҙсә, мал һанын йәки емеш-еләк ағастарын ғына иҫәпләп сығыу түгел. Ошо ябай ғына булып күренгән ғәмәлдәр артында һәр ғаиләнең үҙенә етерлек аҙыҡ-түлек запасы етештереүе лә, тотош илдең иҡтисадын ғына түгел, милли-мәҙәни үҙенсәлеген һаҡлап ҡалыу юлдары ла сағылырға тейеш. Шуға күрә лә ул һәр граждандан етди мөнәсәбәт талап итә.**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ
әңгәмәләште.

ЯҢЫ РУБРИКА: "ӘЙ, БАЛА САҠ!"



# АТТА САБА БЕЛМӘҺӘМ ДӘ...

## йәки Бесән мажаралары тураһында

**Бесән осоро етеп килә. Тиҙҙән ауыл урамдары буйлап тығыр-тығыр, туп-туп килеп, аттарын юрттырып, "тимер аттарын" гөүләтеп, халыҡ сабынлыҡтарға ҡуҙғалыр. Баҫыу юлында малайҙарға, сая ҡыҙҙарға руль, дилбегә тотторолор. Тәүге көндә тәғәйен урынға барып етеү менән бала-саға сытыр-сатыр әҙәләп китер, үҫмер малайҙар, аталары таған әҙерләгән ыңғайға, сәйнүк-сүлмәкте утҡа ҡуйып, кире алыу өсөн ырғаҡ юныр, ҡыуыш әтмәләр, олатайҙар салғы сүкер, сиктәрҙе билдәләп сығыр, өләсәйҙәр емеш-еләк менән ҡыҙыҡһыныр, сабыйҙар атайҙары яһап биргән тәтәй тырмаһөнәктәрен күтәреп, "эш"кә тотонор...**

**Әй, бала саҡ! Әле лә бына, ошо сихри миҙгелемдә, ундағы мажараларҙы хәтер һандығынан сығарып, барлап ултырам. Һәр хәтирә шул осорҙоң бер сағылышы булып тора. Беҙҙән һуңғы быуындың бесән менән бәйле хәтирәләре бөтөнләй икенсе төҫтә буласаҡ. Беҙҙең быуын "тимер аттар"һыҙ ғына, ҡул көсө менән генә бесән эшләне. Беҙҙең олатайҙар иһә, бесәнгә бөтөнләй йәйәү йөрөгән, ашаған ризығы - ҡурмас та, һыу ғына булған, тиҙәр. Ошоларҙы иҫәпкә алып, XX быуат аҙаҡтарына тура килгән беҙҙең бала саҡтағы бер нисә хәтирәне гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итмәксемен. "Әй, бала саҡ" исемле яңы рубрикаға тәғәйенләп, һеҙ ҙә үҙегеҙҙең иҫтәлектәрегеҙҙе яҙып ебәрә алаһығыҙ.**

### Тәүге көндә - үлсәнәбеҙ

Тәүҙән үк шуны әйтергә кәрәк - беҙҙән яҡтарҙа ололарҙың артынан эйәреп йөрөй алырлыҡ балаларҙы бесәндән ҡалдырмайҙар. Иң бала йәнле кешебеҙ, Әхәт апабыҙ (атайҙың ағаһы), һәр беребеҙҙе көҙөн ағас башына элеп ҡалдырылған саталы ҡайын таяғы эргәһенә баҫтырып, үлсәп, билдә яһай, эргәһенә исемдәребеҙҙе яҙып ҡуя. Бесән шулай күңелле башланып китә. Ошондай ҡыҙыҡлы саралар ҙа, атай-әсәйҙең бесән осоронда тырышып эшләүе лә, беҙҙе бер тапҡыр ҙа өйҙә ҡалдырмауы ла, балаларға бәләкәй тырмалар эшләп биреүе лә, һәм башҡаһы барыһы ла балаларҙа хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләргә ярҙам иткәндер, күрәһең.

### Күбә тарттырғанда

Минә ат менән күбә тарттырыу ҙа ныҡ оҡшай торғайны. Күбә тарттырыр көн етһә, Рәхимйән олатайым йыл һайын үҙенең ағаһы Фәйзрахмандың көр, көслө ерән атын алып тора ине. Үҙенең бейәне "шыйығыраҡ" булғандыр, моғайын. Күбә тарттырыу был юлы олатайҙың 6-7 йәштәрҙәге ейәненең - минең - өлөшкә төштө. Атҡа тәүгә атланыуым. Олатай уны етәкләп кенә алып йөрөтә. Мин йүгәнде тулыһынса үҙ ҡулыма алырға хыялланам: олатай етәгенә генә мөрхәтһенмәйем. Уны ыҙалатып йөрөтке лә килмәй. Айғырҙың арҡаһына ябылған түшәген, олатайҙың фуфайкаһы, мал атлаған ыңғайға йә бер яҡҡа, йә икенсе яҡҡа шыуа ла төшә. Быны сираттағы күбәне уратып, ҡуҙғалдыҡ. Бер тәпәш кенә һыртҡа артыла башлағайныҡ, арыған атыбыҙ шып туктаны ла ҡуйҙы. Бер заман тегенең һыртын үксәм менән төйгәйнем, ерән айғыр ҡапыл алға ыҡталды. Мин "һыҡ" итеп ергә ҡолап төшкәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Ҡурҡтым, ояллдым, әммә атта һыбай йөрөргә өйрәнеү теләгемдән тәңөлмәнем.

### Хәлеңдән килмәгәс...

Икенсе йылындамы, өсөнсөһөндәме, олатайым күбә һөйрәтергә тегеге мәл "шыйығыраҡ" тип ҡалдырылған йәш бейәһен алып килде. Бейә, ололарға буй бирһә лә, балаларҙы һанға һукмай, һыртлаңҡырай. Әлеге лә баяғы, шәп кеше булып, мин менеп киттем. Бер заман бейәм ыҺ та итмәй, йәшел үләнгә ҡыҙығып, мине ҡайынлыҡ араһына алып инде лә китте. Бит-ҡулым, муйын һыҙырылыуҙан бигерәк, һеңле-ҡустылар алдында оятҡа ҡалыуым йәнә күңелдә ҡырҙы. Был ваҡиға ла ат менән ҡыҙыҡһыныуымды һүрелдермәне.

### Атым алып ҡасты...

Өсөнсө ваҡиға олатайымдың бөтөнләй икенсе атын егеп, яландағы бесәнде ат тырмаһы менән йыйған саҡта булды. Минә ун ике йәштәр самаһы ине шикелле. Тәгәрмәсле тимер ат тырмаһын шалтыр-шолтор килтереп, юртаҡ бейәбеҙ күгәүендән өркөп, йән фарман сапты ла китте. Бесән йыйыу онотолдо: "Ана ҡолайым, бына ағасҡа һуғылам, бейәне олаҡтырам, үләм...", - тип, дилбегәне шаҡара тартырға тырышып, ике ҡулым менән ултырған урыныма сат йәбешеп киләм. "Әллә артҡа һикереп ҡалырғамы? Бейә ҡайын шырлығына инеп китеп, тырманы әрәм итәсәк бит", - тим йәнә, һәм артҡа әйләнеп, ҡарап-ҡарап алам. Сығынлаған бейәнең өркөп, кешене алып ҡасыуы бер бөгөн булмаһа ла, үҙем албырғап ҡалдым. Быға тиклем: "Нинә шуның муйынын шаҡара тартып ҡына туктатмайҙар икән", - тип уйлаған була торғайным... "Үлән башаҡтарын һәрмәп, ашап йөрөһөн, - тип, ауыҙлығын сискәйнек, сисмәҫкә кәрәк булған икән. Хәҙер тыңлатырһың, тыңлатмай!" - тип, үҙемде әрләй-әрләй киләм. Бына бер заман өс саталы уҫаҡ һәнәгән ситкәрәк ташлап, аттың ҡаршыһына атайым сыҡты. Әммә "Хәҙер атай мине ҡотҡарсаҡ", тигән йылы өмөт барыбер аҡланманы. Мал ситкә янтайҙы, атай уны туктата алмай ҡалды. Бейә ялан буйлап тәртипһеҙ әйләнәләр яһап, сабып йөрөнө-йөрөнө лә, бер заман шып туктаны. Тырма бесән менән тулған да, бейәгә сабыуы ауырлашҡан икән. Былтырғы ҡыу үләнде лә арыу ғына йыйған был тырма. Ағыулыҡһыҙ ҙа йөрөй ала торған "сихри" техникамдан нисек һикереп төшкәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. "Оят, егет башым менән атты туктата алманым", тип, үҙемде үҙем тағы әрләйем. Шул үк ваҡытта был ваҡиғаның былай уҡ яҡшы бөтөрөнә ышаныс та ҡалмағайны бит. "Бәлә аяҡ аҫтында" тигәндәрен шунда беренсе тапҡыр тойҙом. Оло йәштәге олатайым ошо дыуамал бейәне "кеше" итмә тип тырышып йөрөп, аяғын ауырттырҙы. Хәйер, барыбер унан баш тартманы бит әле, мәрхүм, тип, хайран ҡалам хәҙер. Ныҡ ҡыҙыу булды, тай сағында тауҙарға ла сабып менә ине шул башҡорт тоҡомло, сыҫҡан һыртлы "Машка".

### Хыялым бар әле...

Ғәҙәттәгесә, аттан һыуынманым. Егет ҡорона ингәс, студент саҡта булһа кәрәк, бер көндө әлеге бейәне атлатып, Һаҡмарға һыу эсерергә алып төштөм. Эсеп бөткәс, бала саҡтан ҡалған хыялымды тормошҡа ашырырға булдым. Эш шунда: юрттырғаным булһа ла, бер тапҡыр ҙа саптырғаным юҡ, атта саба белмәгән ауыл малайы мин. Туғайҙа берҙе булһа ла атта сабып ҡарарға булдым. Үҙемә ышаныс баштан ашҡан бит инде: егет саҡ. Эйәрһеҙ бейәгә бер ниндәй ауырлыҡһыҙ менеп ултырҙым да, тағы үксәм менән бәйөрөнә тибеп алдым. Бейә тағы берҙе генә алға ырғыны ла, шып туктаны. "Һыбайлы"һының бәрхәттәй йәшел үләнгә "дыңҡ" итеп ҡолап төшөүенә аптырағандыр. Мин йәһәт кенә торҙом да, көлә-көлә ян-яғыма ҡаранып алғас, атыма кире атланып, бик һауалы ҡиәфәт менән юрттырып ҡына ҡайтып киттем. Берәй мәл сабырға өйрәнәмермен әле, тигән хыял менән йәшәйем һаман...

Илгиз ИШБУЛАТОВ.

✓ ***Милли интеллигенция асфальтта үҫкән үҫемлек кеүек булып ҡалған. Тәбиғилек, дарман, асыл юғалған. Тел һүтлылығы, ауыл ябайлығы, халыҡсанлыҡ һалма телгә, һалған хистәргә, уйлап сығарылған характерҙарға алмашынған.***



ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ



**Был тормошта һәр кемдең үҙ юлы. Берәүҙәкен икенсе ҡабатлай йәки үтә алмай. Һәм уларҙың үҙ-үҙен табыу, асылын аңлау һәм күңеле тартҡанға яҡынлау һуҡмаҡтары ла тик үҙенсә генә. Шуның кеүек, шағир Тимер Ниәтшин да әҙәбиәт донъяһына, ябай тел менән әйткәндә, һуңлап, йәшәйештең башҡа өлкәләрен өйрәнеп-белеп, тәжрибә туплап, ҡарашлы һәм маҡсатлы булып килгән әҙип. Шуғалырмы, уның һөйләшеү һәм фекерләшеү манералары ла, донъяны ҡабул итеүе һәм аңлатыуы ла, күп нәмәләргә ҡараштары ла үҙенсәлекле. Был юлы ла шағир менән аралашыуҙан ошондай бер фәлсәфәүи һөйләшеү барлыҡҡа килде.**

# ҺӨЙӨҮҘЕ ЯҘЫУ ҒЫНА АҘ,

## уны кисереп йәшәргә кәрәк

➔ **Тимер Әбдрәхим улы, йәшәлгән тормошҡа әйләнеп күҙ һалғанда, эшләнгән-эшләнмәгән хаҡында фекер йөрөткәндә, нindәйҙер йомғаҡ йәки һығымта һарға тура килгәндә, һеҙҙе нимәләр борсой һәм нимәләр шатландыра ала?**

- Һәр кеше был ҡырыҫ ергә ниндәйҙер бер маҡсат менән килә. Әммә ул уны үҙе белеп етмәй. Кешенең маҡсаты ябай: ул бәхетле булырға теләй. Тик ул бәхет еңел генә бирелмәй, ул бәхет өсөн көрәшергә кәрәк. Әгәр кеше ниндәй генә тормош шарттарында булыуына ҡарамаҫтан, үҙ асылына тоғро ҡалып, үҙе ҡуйған маҡсаттарға ярашлы, үҙе ҡуйған талаптарҙы үтәп йәшәй алһа, уны борсоған әйберҙәр артыҡ күп булмай. Ләкин минең үлемһеҙ йәнем менән бергә, минең үлемгә, тарҡалыуға дусар булған тәнем йәшәй. Йәнем талаптары - ул матурлыҡ, изгелек, мәрхәмәтлек, Аллаһыға ышаныу һәм табыныу. Ә тәнемдең талаптары, бөтә хайуандарға хас булғанса, ашау, йоҡлау, үрсеү, үҙ-үҙеңде һаҡлау. Әгәр ҙә мәгәр мин йәнем ҡуйған талаптарҙы үтәп, йәнем теләгән йүнәлештә генә хәрәкәт итеп йәшәһәм, игелекле, маҡсатҡа ярашлы булһам, Аллаға таянһам, борсолоуҙарым да аҙыраҡ буласаҡ. Ә инде мин, нәфсемдә тыя алмайынса, теләктәремә буйһоноп, көнләшеп, ялҡауланып йәшәһәм, минең борсолоуҙарым күберәк буласаҡ. Бына, 70 йәшлек кеше буларaҡ, шәхси яҡтан минең борсолоуҙарым артыҡ юҡ та кеүек. Сөнки һөнәр алдым, намыҫлы эшләргә тырыштым, балаларымды, ғаиләмде ҡараным, тәрбиәләнем. Әҙәбиәт өлкәһендә, һуңлап булһа ла, үҙ урынымды таптым, бөгөн дә унан айырылғаным юҡ. Ә бына мине борсоған нәмәләр күберәк минең халҡыма, илемә, заманға ҡағылышлы. Беренсенән, бөгөнгө көндә кешенең үҙ асылын ҡайтарырға теләмәүе, быға ваҡыт тапмауы аптырата мине. Ул умыртҡа һөйәген бөгөп, ергә әйелеп, "кәрәк, кәрәк, кәрәк" тип, шул хәтле тырышып эшләй. Күккә ҡарамай, "мин теләйем" тигән һүҙҙе әйтә алмай. Бөгөн кеше ана шул "кәрәк"тең ҡолона әйләнгән һәм шул ҡоллоҡта асылын да юғалтҡан. Был, әлбиттә, мине борсой.

Тағы ла тел мөхитенең тарҡалыуы, юғала барыуы әсендергән хәл. Минең 100 йортлоҡ ҡына ауылымда балалар баҡсаһындағы тәнәйҙәр ҙә русса һөйләшә. Ейәндәремде, башҡортса һөйләштереп өйрәтәйем, тип, ауылға алып килһәм, улар урамда тик русса ғына аралаша.Балалар урыҫ тел мөхитенә ынтыла, улар уны ниндәйҙер көс, киләсәктәге бер мөмкинлек, тип ҡабул итәмелер инде. Әллә беҙ үҙебеҙ балаларыбыҙға әүрәрлек итеп башҡортса әкиәттәр һөйләй, башҡортса тәрбиә бирмәйбеҙ, уларҙы ярата белмәйбеҙме? Ә бит балаларҙың ғәйебе юҡ бында.

Мине беҙҙең милли интеллигенцияның, минең миҫалда яҙыусыларҙың, милләттән айырылыуы, уларҙың милләтте ҡурсаламауы һәм милләтте яҡшылап белмәүе лә борсой. Милли интеллигенция асфальтта үҫкән үҫемлек кеүек булып ҡалған. Тәбиғилек, дарман, асыл юғалған. Тел һүтлылығы, ауыл ябайлығы, халыҡсанлыҡ һалма телгә, һалған хистәргә, уйлап сығарылған характерҙарға алмашынған.

Киләһе борсолоуым үҙебеҙҙең әҙәбиәт хаҡында. Башҡорт яҙыусылары, бигерәк тә бөгөнгөләр, башҡорт килеләктәрендә генә күренә, ә урыҫ мөхитендә улар юғалып ҡалды. Беҙгә белем етмәй. Беҙ башҡорт әҙәбиәтен Рәсәй, донъя кимәленә сығара алмайбыҙ.

Киләһе миҫалым бер мине генә лә борсомайҙыр. Донъяла мәғлүмәт һуғышы бара. Был һуғыш ҡоралы һуғыштан нимәһе менән айырыла? Ҡорал менән атҡанда һин дошманға терәп атаһың. Ә бында һинең һүҙең дошманына ла, дуҫына ла тейә. Үҙәк каналдарҙан бер туҡтауһыҙ кешелеккә ҡарата агрессия сәйәсәте һөрөлә. Мин, ярай, оло кеше, ҡабул итмәҫкә лә, ишетмәҫкә лә мөмкинмен. Ә ете йәшлек бала һуң? Уның зиһене ағыулана, аңы томалана һәм ул сараһыҙҙан һуғыш ҡорбаны булып ҡала.

Әлбиттә, йәшәйешебеҙҙә мине ҡәнәғәтләндергән хәл-күренештәр ҙә байтаҡ ҡына. Мәҫәлән, һуңғы егерме йылдарҙа йәштәребеҙ үҙ аллы булып өйрәндә, ниндәйҙер етәксе, коллектив хужалыҡ ярҙамына мохтаж түгелдәр. Үҙ-үҙҙәренә ышаныусан, күп нәмәгә яуаплы ҡарай белгән быуынды күтәреп килә улар.

Элек башҡортто Себергә һөргәнгә ебәргәндәр. Бөгөн ул унда үҙе теләп китә. Бынан бер нисә йыл элек мин был хәлгә кире ҡараштa инем. Хәҙер ҡарашымды үҙгәрттем. Ауылдарҙағы көслө, дәртле, әммә үтә ябай, бер ҡатлы егеттәр шымарып, бешекләнеп өйрәнә. Улар ситтә "обкатка" үтәләр. Милләт ситкә сығып, аралашып, эстән һәм тыштан яңыра. Был үҙенә күрә тереклек итеү төрө. Ҡаты, әммә дөрөҫ. Ошо ла һөйөндөрә мине.

Башҡорттар Рәсәйҙәге уникаль халыҡ ул. Беҙ ҡоллоҡто тойманыҡ, ерһеҙлекте тойманыҡ, хатта революцияға тиклем аслыҡты ла белмәгәнбеҙ. Еребеҙҙән, байлығыбыҙҙан файҙа алып йәшәй белгәнбеҙ. Бер арауыҡ беҙ, ошондай нигеҙебеҙ булып та, юғалып, тоноҡланып ҡалғайныҡ. Һуңғы йылдарҙа һындарҙы турайтабыҙ, буғай, республикабыҙҙың да абруйы артты. Төрлө иҡтисади, спорт, мәҙәни саралар аша ил һәм донъя кимәлендә милләтебеҙ күтәрелә, күренә башланы. Мине һөйөндөргән һәм көйөндөргәндәр, ҡыҫҡаса алғанда, ошо теҙмәлә.

➔ **Һеҙ, элеккене иҫләп, ауылдарҙа даими рәүештә шиғри кисәләр үтә ине, хатта йәйләүҙәрҙә лә онотолоп шиғыр тыңланылар, тип һөйләнегеҙ. Бөгөн майҙанға йыйылған шағирҙарҙы ла тыңлаусы табылмай. Ошо тәңгәлдә һорау тыуа: элек кеше рухи яҡҡа күберәк иғтибар бирҙеме икән, әллә бөгөн беҙҙә ниндәйҙер тойғолар, ниндәйҙер хистәр юғалғанмы?**

- Кешелә бер нәмә лә юғалманы. Бары уның йәшәйешенә, аңына өҫтәлеп килеп ингәндәре генә артыҡ күбәйҙе. Бына, мәҫәлән, беҙрәгә һуҡ ҡойоп торһаң, ул тула һәм тулғандан һуң һыуы түгелә башлай. Шулай күпме ҡойһаң да, ул ашып түгелеп тик торасаҡ. Кеше зиһене лә шулай. Беҙҙең башты сүпләндергән иң ҙур дошман - телевизор. Ундағы арзан, зарарлы, ялтырауыҡлы, әхлаҡһыҙ һәм еңел ҡабул ителә торған әйберҙәр кешенең өҫкө зиһенендә тиҙ генә урын таба. Ул йөрәк тирәһенә, эске донъяға үтеп инмәй, әммә ағыулай. Китап уҡыу, ҡара-ҡаршы ултырып аралашыу урынына, көндәр буйы интернет, кеҫә телефондары аша һөйләшә кеше. Элек мәғлүмәт каналдары - ул кеше, матбуғат, китап йәки кино ғына ине. Һәм ул мәғлүмәттең сифаты ла яҡшы булды. Бер ҡараған киноны, уҡыған китапты уйлап йөрөйһең, ҡат-ҡат кисерәһең, башҡаларға һөйләйһең. Хәҙер йөҙ канал, эстәлекһеҙ тапшырыуҙар, ҡайһында туҡтарға белмәй йүгереп йөрөйһөң дә... ҡарайһың иң агрессивтарын. Беҙгә ҡан, стресс кәрәк, адреналин сығарыу кәрәк.

Шекспирҙың бер һүҙе бар: "Когда человеком командует необходимость, он сравняется с животным". Һин бит асылыңды асырға тейешһең. Һәр кемдең бөйөк һорауы була һәм ул һорауға дөрөҫ яуап бирергә кәрәк. Ә был мәғлүмәткә батырған донъяла дөрөҫ яуап табып ҡара! Мәктәп программаһын ғына алып ҡарайыҡ. Ейәнем беренсе класта уҡый. Өләсәһе - уҡытыусы, олатаһы - инженер, Дәүләкәндәгеләре - математиктар. Шул баланың өйгә эшен эшләй алмайынса, Дәүләкәнгә шылтыратып, ярҙам һорайбыҙ һәм бергәләп саҡ-саҡ башҡарып ҡуябыҙ. Шундай мәғлүмәти баҫым баланың ныҡынып етмәгән зиһенен быуғанда, нисек итеп һин йәнең талап иткәндең ни икәнен белә алаһың?

Шәхес тәрбиәләүҙәге шундай хаталарыбыҙ ҙур. Элек физик күнекмә, эш тәрбиәһе көслө ине. Хәҙер беҙҙә шундай һалма мөхит. Хатта әсәнең эсен ярып, баланы һалма тыуҙырыуҙы өҫтөн күрәләр хәҙер дауаханаларҙа ла. Шунан башлана һалма тел, һалма белем, һалма ризыҡ, һалма кинәнестәр, уйындар. Был кешенең тәбиғәтенән айырылыуы була инде. Хатта хайуандар ҙа үҙҙәрен һаҡлай ала, улар үҙ аҡылын улай бысратырға ирек бирмәй. Улар ҡырылып бөтһә бөтә, тик ҡулайлашмай.

Кешене Аллаһы Тәғәлә ялтҡан, йән өргән. Уға ирек, аң, фекерләү ҡеүәһе биргән. Асылда, ошо аң һәм ирек арҡаһында әҙәм боҙола ла инде. Сөнки бирелгәндәрҙе дөрөҫ ҡуллана белмәй. Ысынында, бөтә был аң һәм ирек кешегә тәүбәһенә килеп, кире ожмахҡа ҡайтһын өсөн бирелгән. Ә әҙәм быны һаман төшөнә алмай: һуғыша, ергә талаша, ҡоралдар уйлап таба һ.б. Ер шары беҙҙең насар энергетиканан тонсоға. Ул беҙҙән ҡотолорға күптән теләй. Һәләкәткә юлыҡмайыҡ, тиһәк, асылға ҡайтыу, тәбиғәткә яҡынайыу кәрәк.

➔ **Ошо йәштә лә мөхәббәт тураһында уйларға, һөйләргә, яҙырға теләйһегеҙме? Әллә ул хәтирә, матур иҫтәлектәр генәме?**

- Һәр кемебеҙҙең мөхәббәт тулҡындарында йөҙөп, мөхәббәт ҡояшында йылынып йәшәгеһе килә. Мөхәббәт - ул ерҙәге бөтә нәмә һымаҡ, даими бер төҫтәге, бер формалағы төшөнсә түгел. Ул ваҡыт үтеү менән үҙгәрә торған төшөнсә. Әгәр уны үҙгәрмәй торған һәм кешенең бөтә ғүмеренә бер тапҡыр бирелә торған хис тиһәк, беҙ мөхәббәтте татый ҙа, уны тойоп та йәшәй алмайбыҙ. Мөхәббәттең үҙгәрмәй торған бер төрө бар - ул Аллаһы Тәғәләгә булған мөхәббәт.

Әгәр һиңә дөрөҫ тәрбиә бирелгән һәм һинең күңеленә ул тойғо һалынған икән, был даими тойғо була. Ике кеше бер-береһенең энергетикаһын, күҙ ҡарашын, эске донъяһын, аң һәм интеллектуаль кимәлен тоя һәм ҡабул итә икән - был да мөхәббәт. Был иһә оҙайлы, һәйбәт мөхәббәт. Былар бер-береһе өсөн яратылған, тип тап шундайҙарға ҡарата әйтәләр. Ундайҙар, гәҙәттә, аңлашып, оҙайлы, бәхетле ғүмер кисерә.

Бына Алла Пугачеваның мөхәббәте. Уның тормош юлдаштарын һанарға бармаҡтарым етмәй, мин уны миҫал өсөн генә алдым, үҙебеҙҙең аралағыларҙы төртөп күрһәтмәҫ өсөн. Ундағы мөхәббәттәр, моғайын, аҡсаға, нәфсегә, иғтибар үҙгәндә булырға атлығыуға, сәхнәгә бәйлеләр. Йырсы үҙенсә бәхетле, тимәк. Бындай типтағы кешеләр тормошобоҙҙа күберәктер ҙә әле. Ә ысынында бит бындай мөхәббәттәр үтә торған, ваҡытлыса хистәр. Мөхәббәт бит аң кимәленә лә бәйле. Аңың ниндәй кимәлдә, тойғоларың да шул сама буласаҡ.

Миңә "мөхәббәт" тигәнгә ҡарағанда "һөйөү" тигән һүҙ ныҡраҡ оҡшай. Былай яҡыныраҡ, йылыраҡ кеүек.

Кешенең күңеле, нисә йәштә булыуына ҡарамаҫтан, хистәрҙе берҙәй үк кисерә. Бары тик һинең аң кимәлендең үҫеше генә ҡайһы бер нәмәләрҙе хәл итә. Мәҫәлән, бала саҡта кемделер яраттың, һин уны матур уйынсыҡ кеүек итеп ҡабул итәһең. Уға ҡарап торғоң, эргәһенә барғың, тотоп ҡарағың килә. Ә инде йәшлек осоронда һөйгәненде үҙеңдеке итеү теләге уяна, сөнки һинең осорон да шундай: дәртле, сая, теләктәр урғый. Урта йәштә ғашиҡ булғанда һин "ярай" һәм "ярамай" ҡалыптарына буйһонаһың, хатта булған хистәрҙе лә тышҡа сығармаҫҡа тырышаһың. Оло йәштә инде һин тышҡы матурлыҡтан бигерәк, эске гүзәллекте, йылылыҡты, изгелекте эҙләйһең. Бына шулай. Һөйөү тигәнде, ниндәй йәштә лә, һөйләргә-яҙырға ғына түгел, уны татып, кисереп йәшәргә кәрәк.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

*АФАРИН!*

# МИЛЛИ БЕЙЕҮ СӘНҒӘТЕНӘ...

## балаларҙы ла ылыҡтыра "Байыҡ!"

**(Башы 1-се биттә).**

Өс йәштән алып ун биш йәшкәсә балаларҙы бейеү сәнғәтенә ныҡлап ылыҡтырған был сара 2008 йылдан үткәрелеп килә һәм маҡсатына өлгәшә: йәш быуында милли бейеүгә һөйөү тәрбиәләй, был сәнғәт төрөнөң серҙәренә төшөндөрә, рухи мәҙәниәт аша балаларҙа илһөйәрлек тойғоларын үҫтерә. Быға саҡлы балаларҙа, йәштәрҙә башҡорт бейеүенә ҡарата шундай ылығыу, һөйөү, ҡыҙыҡһыныу уятыусы башҡа сара булмағандыр республикала, тип, "Байыҡ" телевизион конкурсының әһәмиәтен билдәләп, нығытып та ҡуйғы килә.


Кинйә Ҡотлоғолов фотолары.

Программаның етәксеһе Рита Өмөтбаева әйтеүенсә, быйыл бәйгелә ҡатнашыуға 2300-ҙән ашыу ғариза килгән, шуларҙан 550 бала һайлап алыу турында сығыш яһаған. Йомғаҡлау концерты сәхнәһендә иһә иң көслөләр генә үҙ һәләтен күрһәтеп, төрлө номинациялар, призлар яуланы. "Һәләтле балалар шул тиклем күп, шуға ла быйыл айырым бейеүселәргә һәм 3 ансамблгә 9 Гран-при бирелде", - ти программа етәксеһе.

Бейеүҙәрҙең төрлөлөгө менән дә айырылып торҙо быйылғы бәйге. Балалар "Яҙғы сәхрә", "Еләкле йәй", "Күгәрсендәр", "Сая ҡыҙҙар", "Әхирәттәр", "Яйыҡ буйында", "Урманда" тигән заман бейеүҙәре менән бер рәттән, милләтебеҙҙе донъя сәхнәләрендә таныҡан "Оҙон сәс", "Зарифа", "Тыпырҙаҡ", "Еҙ үксә", "Рекрут", "Ҡоҙай Байығы", "Бишбармаҡ" бейеүҙәрен башҡарҙы. "Балалар бәйгеһе" тип аталыу сараға бер ниндәй ҙә ташлама яһамаған, профессиональ хореографтар етәкселегендә етди әҙерлек үтеп килгән йәш бейеүселәр сараға ҙур яуаплылыҡ менән ҡараған. Уларҙың юғары башҡарыу оҫталығы, уйнау, импровизацияға һәләте хайран итә. Шунсама башҡорт балаһының дәртле көйгә ҡапыл тоҡанып бейеп китер дарманға, хәрәкәттәрендә төрлө күренештәрҙе һүрәтләй белеү маһирлығына аптырамау мөмкин түгел.

- Быйылғы "Байыҡ" ҡатнашыусы балаларҙың йылдағынан күберәк булыуы һәм географик яҡтан тағы ла киңәйә төшөүе менән айырыла, - тине үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашып баһалама комиссияһы ағзаһы Гөлназ Ғайсарова: - Йәғни, быға са башҡорт бейеүенә битараф кеүек булған Бишбүләк, Краснокама, Шишмә райондарынан бына тигән балалар ансамблдәре килеп сығыуы көтөлмәгән ҡыуаныс булды. Беҙ уларҙы күтәреп алдыҡ! Шулай уҡ әҙерлек, сәм яғынан да йылдан-йыл үҫеш кисерелә. Хәйбулла, Баймаҡ районларында һәм Өфөлә үткән һайлап алыу турҙарында балаларҙың тырышлығын, ҡомарланып, сәмләнеп бейеүен ҡарап ултырыуҙы һүҙ менән генә әйтеп аңлатып булырлыҡ түгел.

Шулай ҙа ҡайһы бер күңелде ҡырған күренештәр ҙә бар: ансамблдәр күберәк интернеттан алынған көйгә бейей, сөнки урындарҙа музыканттар юҡ тиерлек. Махсус музыкант бит бейеү һалғанда ла музыкаға яңылыҡтар, үҙенсәлектәр индерә. Ә хореограф быға са тотонолған музыка йәки фонограмма менән файҙаланырға мәжбүр. Киләсәктә ошо юҫыҡты ла ҡараһындар ине ҡатнашыусылар...





Бәйгенең йомғаҡлау концерты йыл да ниндәйҙер сюжетҡа ҡоролоп, күркәм тамаша хасил итә. Бына сәхнә урталына Ағинәй сыға һәм ете малайға уларҙың тоҡом ебе уралған йомғаҡты тотторop, ете тарафҡа оҙата. Һәр тарафта "Байыҡ"ҡа саҡырып оран яңғырай. Һәм уландар һәр төрлө мажаралы сәфәр үтеп, аҡыл-тәжрибә туплап, һөнәрҙәргә өйрәнеп әйләнеп ҡайта. Шулай итеп, сценарий авторы Асия Ғәйнуллина, режиссеры Фәнил Әсәҙуллин, хореограф Рөстәм Хәйруллин, музыкаль яҡтан биҙәүсе композитор Илшат Яхин берҙәмлегендәге ижади төркөм сәхнәләштергән күренеш бәйгенең финалын сағыу, онотолмаҫ матур тамашаға әйләндерҙе.

Гала-концертҡа ҡунаҡтар саҡырыу ҙа матур йолаға әйләнгән. Төньяҡ Осетиянан килгән "Барс" халыҡ ансамбле, Татарстандың "Очарование" хореографик коллективы, Силәбе өлкәһенең Миәс ҡалаһынан "Уралым" милли-мәҙәни төркөмөнөң сығыштары байрамға бер биҙәк булды.

Әлбиттә, бәйге булғас, уның еңеүселәре лә билдәләнә. Быйылғы "Байыҡ" балалар телевизион бейеү бәйгеһендә "соло" номинацияһында Гран-при Әбйәлил районынан Карина Ғәйфуллина менән Әлиә Мөхөтдинова, Баймаҡ районынан Байрас Харисовҡа эләкте. Олораҡ балалар араһында беренселекте Стәрлетамаҡтан Әлиә Хөснөтдинова алды. "Дуэт" номинацияһында Ғафури ҡыҙҙары Гөлназ Дәүләтбаева һәм Элвина Күлманова, Ейәнсуранан Айһылыу Йәнсурина менән Вәсилә Мәүлетоваларҙың сығышы иң яҡшыһы тип табылды. Тулы булмаған ансамблдәр араһында Гран-при Салауат ҡалаһының 54-се балалар баҡсаһы менән Күгәрсендең "Грация" өлгөлө бейеү ансамбле, "Ансамбль" номинацияһында Әбйәлил районының "Шатлыҡ" өлгөлө бейеү ансамбле өлөшөнә төштө.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был бәйгенең маҡсатын үрҙә әйтеп үткәйнек инде. Һәм уның күрһәткестәре лә иғтибарға лайыҡ. Бөгөнгө көнгә тиклем ошо бәйгелә еңеүсе булған йөҙҙән ашыу йәш кеше үҙен һәләтле бейеүсе итеп таныҡан, өс йөҙҙән ашыуы төрлө ансамблдәрҙә бейеп йөрөй. Конкурс барышында яңынан-яңы хореографтар үҫеп сыға, һәләттәр асыла, юғалған, онотолған бейеүҙәр тергеҙелә, боронғо бейеү технологияһы өйрәнелә. Шул уҡ ваҡытта Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Абхазия, Греция, Чечня, Бүрәт, Ҡалмыҡстан һ.б. төбәктәрҙең балалар бейеү ансамблдәре менән тәжрибә уртаҡлашыу, танышыу-күрешеү бәхете тейгән.**

*РУХИӘТЕБЕҘ*

# ХАҠ ТАМЫРҘАРҘЫ ЮЛЛАП...

**Дүртөйлө районында республика "Шәжәрә байрамы" гөрләп үтте. Ҡала хакимиәтенән алынған мәғлүмәттәр буйынса, байрам алдынан районның һәр ауыл биләмәһендә халыҡ йолаларын тергеҙеү, өйрәнеү, белмәгәндәргә өйрәтеү буйынса саралар, фестивалдәр ойошторолған, күптәр архивтарҙағы материалдарҙы өйрәнеп, үҙенең шәжәрәләрен төҙөгән.**







Байрамда Дүртөйлө районынан тыш, Борай, Илеш, Мишкә, Туймазы, Бүздәк райондары вәкилдәре лә ҡатнашты һәм үҙҙәренең тарихи шәжәрә күргәҙмәләрен ойошторҙо. Мишкә районының Шәйехзада Бабич нәҫеле шәжәрәһе, Илеш районының ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев нәҫеле шәжәрәһе ҡуйылған стендтар күптәрҙең иғтибарын йәлеп итте. Ике шәхестең дә башҡорт тоҡомло вариҫтары үҙҙәренең стенды эргәһенә баҫып, оло ғорурлыҡ менән тарихи мәғлүмәттәр бирҙе, шиғыр һөйләне, йырлап та ебәрҙе.

Ә дүртөйлөләр иһә һәр ауыл биләмәһенең үҙ тирмәһен ҡороп, уны боронғоса биҙәп, теге йәки был йола күрһәтеп ҡаршыланы ҡунаҡтарҙы. Милли риүыҡтарҙан һығылған өҫтәл янына саҡырып, аш-һыуынан да ауыҙ иттерҙе. Бында беҙ танылған шағирыбыҙ Назар Нәжмиҙең дә, сәнғәт йондоҙҙарыбыҙ Фидан Ғафаровтың, Илһөйәр Ғизетдинованың да, республикала билдәле башҡа күренекле шәхестәрҙең дә, йәғни йылан ырыуы башҡорттары вәкилдәренең шәжәрәләрен күрҙек.

Йылан ырыуы, тигәндәй, байрамдың иң әһәмиәтле өлөшө булған фәнни-ғәмәли конференцияла тап был төбәктә йәшәүселәрҙең башлыса ошо ырыуға ҡарауы турaһында һүҙ барҙы ла инде. Тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан юлдаш телевидениеһындағы "Башҡорттар" тапшырыуы етәксеһе Салауат Хәмиҙуллин, филология фәндәре кандидаты Искәндәр Сәитбатталов, философия фәндәре кандидаты Рәфил Аҫылғужин һәм башҡа эксперттар төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының генофонды, уларҙың тел үҙенсәлектәре, генетик сығанаҡтары, боронғо шәжәрәләр теле, диалекттар турaһында һөйләне, халыҡтың һорауҙарына төплө, дәлилле яуаптар бирҙе.

Әлбиттә, байрам булғас, уның йырбейеүе лә, уйын-көлкөһө лә, көс һынашыуҙар, спорт ярыштары ла булды. Милли аш-һыу, халыҡ шөғөлө һәм башҡа ҡул эштәре күргәҙмәләре тирәһенән дә халыҡ өҙөлмәне. Байрам һуңында ҡатнашыусылар "Иң яҡшы төҙөлгән шәжәрә" һәм "Иң шәп тирмә", шулай уҡ "Иң шәп сәк-сәк бешереүсе" номинацияларында бүләкләнде.

✓ *Шулай уҡ ҡомалаҡтың да шифалы үсемлек икәнен раҫлап, йоҡоһоҙлоҡтан интеккәндә унан яҫтыҡ яһап яҫтанырға булыуын әйтте. Зөһрә Вәхитова ҡомалаҡ әсеткеһен үҙ ысулы буйынса эшләү серҙәрен асты.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙЫРЛАП ЙӘШӘГЕҘ

■ Йырлау - яҡшы кәйеф һәм шатлыҡ билдәһе булараҡ ҡабул ителә. Әммә бар кеше лә ҡысҡырып йырларға ҡыймай. Ғалимдар әйтеүенсә, йырлауҙың файҙаһы бик ҙур. Был ваҡытта эндорфин - "бәхет гормоны" бүленеп сыға. Шулай уҡ ҡысҡырып бер йырлаһаң, стресс булдырмай торған гормон - окситоцин бүленә. Ул кешене тынысландыра, депрессияны еңергә ярҙам итә. Йырлаған саҡта йөрәк ритмы яҡшыра, хатта ҡорһаҡ һәм диафрагма мускулдарын нығыта. Кем көҙгө алдына тороп, үҙен сәхнәләмен, тип хис итеп йырлай, улар икеләтә ота, ти белгестәр. Был ояласанлыҡты еңергә ярҙам итә. Үпкәләрҙе нығытам тиһәгеҙ, шулай уҡ йырлағыҙ. Йырлағанда дөрөҫ итеп тын ала башлаясаҡһығыҙ, тимәк, яҡшыраҡ йоҡласаҡһығыҙ ҙа. Иммунитетты нисек нығытырға белмәһәгеҙ, йырлағыҙ, тип кәңәш итәбеҙ. Йырлаған мәлдә А-иммуноглобулины кимәле күтәрелә, тип раҫлай инглиз ғалимдары. Шуға ла витаминдарға бай емеш-еләкте йырлай-йырлай ашағыҙ. Йырлау баш мейеһен үҫтерә, хәтерҙе нығыта.

■ Киото университеты белгестәре ҡыҙыҡлы асыш яһаған. 20 секундтан оҙағыраҡ бер аяғында ғына баҫып тора алмаған өлкән йәштәге кешеләрҙә инсульт йышыраҡ осрай. Тикшеренеүҙәрҙә 841 ҡатын-ҡыҙ һәм 546 ир-егет ҡатнашҡан. Уларҙың уртаса йәше - 67 йәш. Эксперимент башланыр алдынан уларҙың баш мейеһен томография ярҙамында тикшергәндәр. Һөҙөмтәлә, баш мейеһендә ҡан һауыу майҙандары булғандар бер аяғында баҫып тора алмаған.

■ Артыҡ ауырлыҡ йыймайым, тиһәң, ризыкты яйлап аша, ти Япония ғалимдары. Тикшеренеүҙәр дүрт мең кешелә үткәрелгән, уларҙың ҡайһылары тиҙ, мәсәлән, төшкө ашты 5 минут эсендә ашауҙы ғәҙәт иткән. Белгестәр уларҙың тән ауырлығын 20 йыл булғаны менән дә сағыштырған. Кем тиҙ ашай, уларҙың ауырлығы күпкә артығыраҡ булған. Яй ашаусыларҙың тән ауырлығы артыҡ үҙгәрмәй. Әлбиттә, был һөҙөмтәләргә башҡа ғәҙәттәр - физик күнегеүҙәр эшләү, тәмәке тартыу, спиртлы эсемлектәр ҡулланыу ҙа тәьҫир итә.

■ Кире эмоциялар сәләмәтлек өсөн зыянлы. Улар иммун системаһының һаҡланыу көсөн кәметә, төрлө сирҙәргә алып килә. Был турала Австралия ғалимдарының тикшеренеүҙәре күрһәтә. Иң хәүефле тойғолар булып һаранлыҡ, көнләшеү, үҙендә йәлләү тора. Һаранлыҡ ашҡаҙан-эсәк тракты ауырыуҙарына килтерә, көнләшеү ҡайһы бер гормондарҙың, мәсәлән, тестостерондың бүлеп сығыуын тотҡарлай. Башҡаларҙың уңышына шатлана белмәү инфаркт хәүефен үҫтерә. Үҙендә йәлләү һөҙөмтәһендә ацетилхолин гормоны куберәк бүленә, ул бауыр сирҙәренә килтереүе бар. Бындай кешеләрҙең ҡанында шәкәр кимәле түбән була, аш һеңдереү боҙола. Шулай уҡ үҙендә гел ғәйепле тойоу ҙа насар. Шулай итеп иммунитетығыҙҙы ҡаҡшатһағыҙ, хатта онкологик сирҙәр барлыҡҡа килеүе ихтимал.

■ Аҡса гөлө - бөгөн бик киң таралған бүлмә гөлдәренең береһе. Ул йортҡа аҡса килтерә, тиҙәр. Аҡса гөлө - халыҡ медицинаһында ла әүҙем ҡулланыла. Шифалы сифаттары буйынса алоэ, каланхоэ үсемлектәренән ҡалышмай. Әммә уны ашарға ярамай, составында аҙ ғына күләмдә мышьяк бар. Ә бына яраларҙы дауаларға ярай, иренгә сыҡҡан һыуыҡ та тиҙ генә бөтә. Бының өсөн ярты сәғәт һайын аҡса гөлө япрағының һутын һөртөп торорға кәрәк.

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

# ШИФА - АЯҠ АҪТЫНДА

**Йәйҙең иң йәмле, хозур көндәренең береһендә Хәйбулла районының Юлбарыҫ ауылы ағинәйҙәре сәхрәлә "Шифа - аяҡ аҫтында" исемле байрам үткәрҙе. Беҙҙең халыҡта бындай күркәм байрамдар ҡунаҡтарһыҙ үтмәй. Юлбарыҫтар был сараға күршеләрен, Йылайыр районы Байғужа ауылы ағинәйҙәрен саҡырҙы. Ағинәйҙәрҙең бына шулай бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөшөп, фәһемле эштәре менән таныштырыуы, тәжрибә уртаҡлашыуы матур бер йолаға әйләнде хәҙер. Улар шулай үҙ эшмәкәрлектәрен киңәйтә, байыта.**

Байрам хужалары тәбиғәттең матур бер мөйөшөндә ҡунаҡтарҙы бауырһаҡ, күнелле йыр менән ҡаршылағас, шифалы үсемлектәрҙән торған бай күргәҙмәләре менән таныштырҙы. Тәбиғәтебеҙ, еребеҙ бүләге булған йыуа, балтырған, миләш емеше, юл япрағы, кесерткән, андыҙ һәм башҡа төрлө дарыу үләндәре, шулай уҡ шифалы үләндәрҙе таныырға, нисек ҡулланырға өйрәткән китаптар, үләндәрҙән әҙерләнгән ашамлыҡтар, ҡайнатма, һуттар күргәҙмәһе өҫтәл түренән урын алды.

Байрамды асып ебәреп, Юлбарыҫ ауылы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Гөлсинә Мәғәфүрова һүҙ алды. Ул сараны ойоштороуҙың маҡсаты, башҡорт халыҡ медицинаһында дарыу үсемлектәрен файҙаланыуҙың әһәмиәте тураһында бәйән итте. Артабан һүҙ башҡа ағинәйҙәргә бирелде. Лилиә Таймасова яҙҙың тәүге сәскәһе - умырзаяның шифаһы тураһында һөйләгәс, ошо сәскәгә арналған йыр башҡарҙы. Лена Хөсәйенова дегәнәк тамырының һәм япраҡтарының файҙалы үҙенсәлектәрен билдәләне. Шулай уҡ ҡомалаҡтың да шифалы үсемлек икәнен раҫлап, йоҡоһоҙлоҡтан интеккәндә унан яҫтыҡ яһап яҫтанырға булыуын әйтте. Зөһрә Вәхитова ҡомалаҡ әсеткеһен үҙ ысулы буйынса эшләү серҙәрен асты, күстәнәскә ошо әсеткене таратып бирҙе.

Халыҡ мәҡәлендә "Андыҙ барҙа - ат үлмәҫ, ирәүән барҙа - ир үлмәҫ" тип әйтелә. Фәйрүзә Таймасова андыҙҙың күп ауырыуҙарға дауа булыуын билдәләп, уны йыйыу, киптереү, һаҡлау ысулдарын өйрәтте. Сания Ырыҫҡолова "Быуындар ауырыуын дауалау өсөн файҙалы үсемлектәрҙең береһе - бәпембә. Ул ябай сүп үләне генә түгел, унан әҙерләнгән сәй һыҙланыуығыҙҙы кәметеп кенә ҡалмаясаҡ, ә организмды тотошлайы менән нығытырға ярҙам итәсәк", - тип, йәшел дауахана буйлап сәйәхәтте дауам итте. Табынға ултырғас, бәпембә балы менән һыйланы.

Сара Вәлитова барыбыҙға ла билдәле булған мәтрүшкәләрҙең ике төрө тураһында һөйләгәс, йоҡо алдынан бер ус мәтрүшкә, бер ус гөлйемеш сәскәһен бер литр һыуҙа сәй кеүек әҙерләп эсеү рецептын тәкдим итте. Билдәләнеүенсә, был ҡайнатма йоҡоһоҙлоҡтан арындыра, йоҡоно файҙалы һәм тәрән итә икән. Артабан һандуғастай моңло тауышы менән "Мәтрүшкәләр" йырын йырлап ебәрҙе. Үләндәр доньяһы менән таныштырыуҙы Рәйлә һәм Альбина Байғужиналар дауам итеп, йыуа, кесерткән, юл япрағы үләндәренең төрҙәре һәм шифаһы тураһында һөйләне. Ауыл фельдшеры Рәсимә Байғужина иһә һәр үләндең исеме, йыйыу ваҡыты, төнәтмә, ҡайнатмалар әҙерләү тәртибе менән таныштырҙы һәм иҫкәрмәләр ҙә яһаны.

Юлбарыҫ ағинәйҙәренең үҙ эштәренә балаларҙы ла йәлеп итеүе үҙенә күрә оло быуындың тәрбиә мәктәбе ул. Балалар өлкәндәр менән берлектә файҙалы үсемлектәр тураһында йомаҡтар систе, әйтемдәр әйтеште. Үләндәр исеме менән аталған йырҙар йырлап, бүләктәр алып ҡыуанды.

Ағинәйҙәр әйтеүенсә, был сараны үткәреүҙә ауылдың аҡһаҡалдары Хәмзә Ырыҫҡолов, Камил Аҙнабаев, Урал Таймасов ҙур ярҙам иткән. Хәмзә Ырыҫҡолов оҫҡон йыуаһын үҙ баҡсаһында үҫтереү тәжрибәһе менән дә уртаҡлашты.

Шифалы үләндәр ҡушып бешерелгән аш табынында һөйләшеү һаман да шул шифалы үләндәр тураһында барҙы. Бына шулай ошо үләндәрҙән әҙерләгән салаттары менән һыйланы. Зәйтүнә Вәхитованың ирәүәндән әҙерләгән ҡайнатмаһы, Ғилминур Тәүелбаеваның ҡуҙғалаҡ, балтырғандан бешергән бәлештәре бик тәмле булды. Бына шулай, шифалы үсемлектәр тураһында бик күп яңы мәғлүмәттәр алып, бербереберәбеҙ менән яҡындан танышып, фекер алышып, иҫтәлеккә фотоға төшөп, тәбиғәт ҡосағында күңелле ял итеп ҡайттыҡ.

**Зөлфирә СЫҢҒЫҘОВА,**
**Йылайыр районы**
**Байғужа ауылының**
**"Ағинәйҙәр ҡоро"**
**етәксеһе.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ҺӘР ЭШТЕҢ БАШЫНДАЛАР

**Миәкә районы ағинәйҙәре лә йәйҙең йәмле бер көнөндә тәбиғәт ҡосағында, Дим буйында үткәрҙе үҙенең сираттағы осрашыуын. Унда Миәкә районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Светлана Атанғолова, Төбәк-ара "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева, район Мәҙәниәт идараһы етәксеһе, район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты етәксеһе Хәлил Махиянов ҡатнашты.**

Ҡунаҡтар килеп төшөүгә барыһы ла әҙер ине. Дим яры аҡланында тирмәләр, тирмә кеүек ҡулайлаштырылған япмалар теҙелгән, уртала ҡул эштәренән күргәҙмәләр, милли ризыҡтар ҡуйылған өҫтәлдәр урынлаштырылған. Ҡаҙандарҙа аш бешә, самауырҙар боҫ бөркөп ултыра. Милли кейемдәге ағинәйҙәр үҙҙәренең биләмәһе эргәһендә йола күрһәтергә әҙерләнә. Райондың үҙ йырсыһы Мөхәммәт Садиҡов башҡарыуында башҡорт халыҡ йыры "Урал" яңғырауы сараның башланыуына ишара булды. Ҡунаҡтар һәм райондың "Хыял" балалар лагерында "Йәйләү" программаһы буйынса ял иткән бер төркөм балалар биләмә буйлап сәйәхәт башланы. Һәр ауыл ағинәйҙәре үҙҙәренең башҡарған эштәренә ҡыҫҡаса ғына байҡау яһағандан һуң, мотлаҡ бер йоланы атҡарып күрһәтте, ҡымыҙҙан, икмәктән, сәк-сәк, бауырһаҡтан ауыҙ иттерҙе, күргәҙмәгә ҡуйылған сигелгән, бәйләнгән, тегелгән әйберҙәр менән таныштырҙы, ошо төбәк өсөн хас шөғөл - аҫалы балаҫ һуғыу, уларҙың биҙәктәре тураһында мәғлүмәттәр яңғыратты. Балалар өсөн, әлбиттә, ағинәйҙәрҙең халыҡ йырҙарын, таҡмаҡтарын, М. Акмулла шиғырҙарын башҡарыуы ла оло һабаҡ, тәрбиәүи бер дәрес булды.

- Мәғариф ветераны Фәүзиә Баршыуатова етәкселегендәге ағинәйҙәребеҙ бына шулай йолаларыбыҙҙы тергеҙеүҙә, балаларҙа һәм йәш быуында илһөйәрлек, телһөйәрлек тәрбиәләүҙә, халыҡты айыҡ, сәләмәт йәшәү рәүешенә, шулай уҡ урамдарҙы, юлдарҙы тәҙәкләндереү, экологик өмәләр кеүек күмәк эштәргә ылыҡтырыуҙа ғәйәт күп көс түгә, район етәкселәренең сығышында Светлана Малик ҡыҙы һәм был ойошма ҡатын-ҡыҙҙарына сикһеҙ рәхмәтен белдерҙе.



*✓ Ҡытайҙарҙың көрсөк иероглифы ике өлөштән тора: береһе проблеманы белдерһә, икенсеһе - мөмкинлекте. Беҙ теләһә ниндәй көрсөктө ентекле анализлап, уның артына йәшеренгән мөмкинлекте табырға тейешбеҙ.*

МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ

**Бөтә донъяла, төрлө ил ҡәүемдәрендә ижтимағи тормошҡа, көнитмешкә, шәхси сифаттарға, әхлаҡ-әҙәпкә бәйле меңәр йылдар буйына ҡулланылған, йола-ҡағиҙәгә әйләнгән эш-ҡылыҡ тәртиптәре, ғөрөф-ғәҙәттәр, аманаттар бар. Улар оҙайлы ваҡыт ҡат-ҡат һыналып, күп ҡабатланып, ырыу, йәмғиәт ағзаларының ғәҙәтенә кергән. Йәшәйешкә ҡағылған, кешеләрҙең холҡон, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен көйләүгә ҡоролған йола-ҡағиҙәләр араһында тыйыу, әйтәйек, берәй эш-ҡылыҡҡа рөхсәт бирмәү, уны туҡтатыу, ғәмәлгә ашырмау, бәғзе теләккә, хис-тойғоға, кисереш-ярһыуға, тотанаҡһыҙлыҡҡа, тәртипһеҙлеккә ирек ҡуймау кеүек ғәҙәттәр ҙә бар.**

# ТЫЙЫЛҒАНДАН - ТЫЙЫЛ, ТИГӘН...



### Исемгә тыйыу

Борон аллаларҙың ысын исемдәре йәшерелеп, икенсе төрлө аталған. Библияға ярашлы, теләһә ҡайҙа, кәрәккән-кәрәкмәгәндә изге исемдәрҙе телгә алыу ярамаған. Илаһтар культы, уларҙы ҙурлау, уларға табыныу йолалары - бар ҡәүемдәргә хас күренеш. Ғәрәп мифологияһы буйынса, тыуҙырыусы, бар ҡылыусы, йыһанда аһәң, тәртип урынлаштырыусы бөтә донъя хакимы Душара Илаһтың тыйылған исеменең бер төрө, алмашы иҫәпләнә. Тереклек һәм уңдырышлылыҡ аллаһы Аарра яҡтылыҡ һәм ҡояш һыҙаттарын үҙендә һынландырып, Душара менән берҙәй танылған. Аллат иһә - күк һәм ямғыр алиһәһе. Был исем Илаһтың тыйылған төрө булыуы ихтимал, тигән фекер бар. Аллаһ та, Хоҙай ҙа тыйылған исемдең алмашы, уртаҡ исем илаһтан яһалған, тип фаразлана.

Йемен мифологияһында Саба дәүләтендә ил хакимы Алмаках (Илмаках) Илаһтың тыйылған исеменең варианты итеп тоҫмаллана. Илмаках - Илу алла исеменең бер төрө. Ай һәм һуғарыу аллаһы Вадд та Илуҙың ҡушаматылыр, тип уйланыла. Ай аллалары Сами, Син да Илуҙың алмаш исемдәре булһа кәрәк. Зат Бадан, Зат Зәһрән, Зат Сәнтим, Зат Химйәм ҡояш алиһәһенең тыйылған исеменең төрлө рәүештәре итеп ҡабул ҡылына.

Иран риүәйәттәрендә аҡыллы хаким Ахурамазда (Ахура Мазда) Зәрдөшт һәм Ахеменид пантеондарында бөйөк Илаһтың тыйылған исеменең алмашы һанала. Табу һалынған исемдәр грек, рим мифологияһында ла осрай. Ғөмүмән, Аллаһы Тәғәлә туҡһан туғыҙ исем менән йөрөтөлгән. Ысын исемшәрифте йәшереү, алмаштары менән аталыу - яуыз көстәр йоғонтоһонан һаҡланыу, хилафлыҡтан ҡурсаланыу, туранан-тура танытмау, белдермәү сараһы.

Борон башҡорт халҡында исем ҡушыуға бәйле "Тәүге исем", "Ғүмерле исем", "Эт исеме" кеүек йолалар булған. Тәүге исемде, йәғни йүргәк исемен кендек инәһе ҡушҡан. Бәпесте хатта аҙ ғына ваҡытҡа ла яңғыҙ ҡалдырыу ярамаған. Был уны ен-шайтандан һаҡлау, алмаштыртмау әмәле булған.

Абдулҡадир Инан "Шаманизм: тарихта һәм бөгөн" хеҙмәтендә яҙыуынса, ғәҙәт буйынса яҡуттарҙа ла баланың бәләкәй саҡтағы исеме ысын исеме тип иҫәпләнмәгән. Бындай йола боронғо уғыҙҙарҙа ла күҙәтелгән. Егет-еләнгә ҡаһарманлыҡ күрһәткәндән һуң ғына Деде Ҡорҡут исем ҡушҡан.

Монголдар иһә яңы тыуған баланы өс көн буйы ҡаҙан аҫтында һаҡлаған. Был ваҡытта инәһе ҡурсаҡ менән мәшғүл булған. Һуңыраҡ ата-инә: "Балабыҙ үлде!" - тип ҡысҡырған да ҡурсаҡты бер соҡорға күмгән. Баланы тыныс ҡалдырһын өсөн яман рухтарҙы шулай күҙ яҙҙырғандар. Үлем рухын алдар өсөн яҡуттарҙа яңы тыуған баланы күршеләргә "һатыу" йолаһы булған.

Балаһы булмаған йәки үлеп торған башҡорттар ҙа үлем рухынан арынырға ынтылған. Бәпес тыуғас та, кендек әбейе уны тышҡа алып сыҡҡан. Өй тирәләй бер аҙ йөрөгәс, тәҙрәнән өндәшкән: "Сит тарафтан бер бәпес килтерҙем, һатып алыусы булырмы?" Шунан һатыулашыу башланған, һатыусыға хаҡ итеп, мәҫәлән, тимер киҫәге бирелгән. Яңы тыуған балаға иһә Тимер, Һатыбалды, тәненә көс-ҡөҙрәт өҫтәр өсөн Теребай, Үлмәҫбай кеүек исемдәр ҡушылған.

Шулай итеп, бала сәләмәт, сыҙамлы, оло ғүмерле булһын өсөн Йәнтимер, Тимерйән, Таштимер, Йәноҙаҡ, Тимербикә, Йәнбикә исемдәрен биргәндәр. Исемдең магик тылсымы, ҡөҙрәте бар, исемдәр кешенең холоҡ-фиғелен, ҡылығын, үҙен тотошон, яҙмышын билдәләй, тип уйланылған. Ысын исемде йәшереү, яуыздарҙан һаҡланыу өсөн кешеләр ҡушамат исемдәр ҙә йөрөткән, һәм был ғәҙәт беҙҙең көнкүрештә лә күҙаллана.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы. Башы 24-28-се һандарҙа).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП

**Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

### ТӘРӘН АҢ

**Рух камиллығы тәрән аңға алып килә. Тәрән аң рухтан да юғарыраҡ. Тәрән аң - фәрештә интеллекты, ул рух менән генә ҡабул ителә. Тәрән аң өсөн асылған донъя рухтан һәм йөрәктән йәшеренгән, сөнки ул донъя Аллаһы Тәғәлә биләмәһе.**

Ғашиҡ булған кеше менән Хоҙай араһында тәрән һәм йәшерен сер бар, тиҙәр. Шуға күрә тәрән аң тураһында ғашиҡ булған кеше һәм Аллаһы Тәғәлә генә белә, тиҙәр. Ә серле аң хаҡында тик Аллаһы Тәғәлә генә белә. Тәрән аңдағы мәғлүмәтте һүҙ менән аңлатып булмай. Тәрән аңды өс төргә бүләләр:

1. Башҡаларҙан йәшерелгән тәрән аң. Уның өс шарты була:

- хеҙмәт итеү ҡағиҙәләрен белеү;
- башҡаларҙың хоҡуғын таныу;
- башҡаларға зыян килтермәү.

Был шарттарҙы үтәмәгән кеше аңын йәшерә алмай.

2. Фәрештәләрҙән йәшерелгән тәрән аң. Уның өс сифаты була:

- ҡабул итеүсенең йөрәге киңәйеүе;
- Аллаһы Тәғәлә алдында яуаплылыҡтан ҡасыусыларҙың аҡланыуҙарын ҡабул итмәү;
- Аллаһы Тәғәлә йомартлығы алдында баш эйеү.

3. Үҙ-үҙеңдән йәшерелгән тәрән аң.

Йөрәк түрендәге аң кимәленә еткән суфыйҙар камиллыҡтың иң юғары нөктәһендә. "Мин хәҡиҡәттең үҙе!" тигән Халладж, ә Баязит "Миңә дан. Иң юғары кимәлгә ирештем!" тип ҡысҡырған.

**(Аҙағы).**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Теләк аша сағылған ижади көс

Леонардо да Винчиҙың: "Ҡасан да булһа кешегә ҡанат үҫәсәк", - тигән күрәҙәлеге беренсе осоу аппаратының эскизын тулыландыра. Аппарат ысынлап та бер-нисә фут оса, әммә сиркәү лидерҙары, был асышҡа "шайтан ҡоралы" тигән мөһөр һуғып, да Винчиҙы уны юҡ итергә мәжбүр итә. Ваҡыт иһә ғалимдың хаҡлы булыуын раҫлай. Кешеләрҙең, ысынлап та, ҡанаттары үҫә!

Хыялланыуҙың иң динамикалы аспекты булып әлегә физик донъяла булмаған уйҙағы образдарҙың формалашыу процесы тора. Икенсе аспект булып нигеҙендә тәжрибә ятҡан һәм ошо тәжрибә нигеҙендә яңы идеяларҙы һәм идеялар берлеген бергә туплау тора. Ижади хыял хыялдағы образдарҙы ябай ғына формалаштырыуҙан юғарыраҡ күтәрелергә ярҙам итә. Уның ярҙамында уйҙар һәм хыялдар тормошҡа аша. Ижади күҙаллау процесында беҙ нимә тураһында хыяллана-быҙ йәки башыбыҙҙа яңы ғына яралған нәмәләрҙең тормошҡа ашыуына ярҙам итәбеҙ. Беҙ һүрәтләгән образдар төҙөү көсөнә эйә һәм Ижади интеллект ярҙамында үҙгәрергә һәләтле.

Тышҡы донъяла идеяларҙың тормошҡа ашырылыу ысулдары әлегә сер булып ҡала. Әммә беҙ әгәр кукуруз орлоғо ултыртһаҡ, унан бер нисә һабаҡ үҫеп сығырын беләбеҙ. Беҙгә ниндәй сер ярҙамында ер яңы үҫентегә йәшәү биргәне билдәһеҙ. Образ йәки картина, кукуруз һабағы бер орлоҡҡа һалынған.Идея ла шул уҡ орлоҡ. Уны мул уңыш өмөт итеп сәсәһегеҙ. Ул нимә ултыртаһығыҙ, шундай шытым бирәсәк: кукурузмы, бойҙаймы, сүп үләнеме, шайтан таяғымы йәки ағыулы үҫемлекме. Барыһы ла нимә сәсеүегеҙҙән тора. Хыялығыҙҙа ниндәй генә идея йәшәмәһен, ыңғаймы ул йәки киреме, төҙөүме йәки емереүме, ул шундай уҡ материя тыуҙырасаҡ. Оҡшаш оҡшашты тарта, йәғни философтар әйтмешләй: "Өҫтә ни булһа, аҫта ла шул".

Ижади хыял - ҡеүәтле көс. Бер кешенең ижади хыялы Американың көньяҡ штаттарындағы сәнәғәтте тамырынан үҙгәртә. Бер ваҡыт кисен ул ситлектән кәнәри ҡошон тартып сығарырға тырышҡан бесәйҙе күҙәтә. Ситлек сымдары ҡошто ныҡ һаҡлағанлыҡтан, уның тәпәйендә бары тик йөн генә тороп ҡала. Был кешене мамыҡ үҫемлегенән мамыҡ тартып сығарыусы тимер тырнаҡтарҙы күҙ алдына килтерергә мәжбүр итә. Шулай Эли Уитни беренсе мамыҡ таҙартыу аппаратын уйлап таба. Ижади хыялға донъяуи проблемаларҙы хәл итеү ҙә бер ни түгел. Бер генә хәл-торошто ло өмөтһөҙ йәки сығыу юлы юҡ тип ҡарарға ярамай. Үҙ-үҙебеҙҙе юҡ итеү юлындабыҙ тип раҫлау йәшәүгә хоҡуҡлы түгел. Тарих яҙыла башлағанда иң элек бәйғәмбәрҙәр барлыҡҡа килә һәм уларҙың һәр ҡайһыһы донъя бөтөүен бәйән итә. Ләкин уларҙың һәр күҙаллауы ялған булып сыға. Өмөтһөҙлөк баҫҡан осорҙарҙа ижади күҙаллауға эйә кешеләр килеп сыға һәм улар кешелекте бөйөк ҡаҙаныштарға алып бара.

Ниндәй генә проблеманы алып ҡараһаҡ та, уның артына мөмкинлек йәшеренгән. Быны ҡытайҙар бик яҡшы аңлаған. Ҡытайҙарҙың көрсөк иероглифы ике өлөштән тора: уларҙың береһе проблеманы белдерһә, икенсеһе - мөмкинлекте. Быны бер ваҡытта ла онотмайынса, беҙ теләһә ниндәй көрсөктө ентекле анализлап, уның артына йәшеренгән мөмкинлекте табырға тейешбеҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 18 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Это Я" (16+).
13.55, 18.45 "Давай поженимся!" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 03.55 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Хорошие руки". 9-я и 10-я серии. Драматический сериал (12+).
23.35 "Винил". Драматический сериал (18+).
01.40, 03.05 "Коллективный иск". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Простая жизнь". 1-4-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Обреченные. Наша Гражданская война. Каппель-Чапаев". Док. фильм (12+).
02.40 Фестиваль "Славянский базар-2016". Совместный проект Белоруссии, России и Украины. Финал конкурса.
04.25 "Комната смеха".

### БСТ

**Профилактика на канале**
**14.00 Новости недели.**
**14.45, 17.45, 19.00, 01.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Книга сказок" (0+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 20.15 "Полезные новости" (12+).**
**16.00 "У дачи" (12+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Следопыт" (12+).**
**17.15 "Родительский контроль" (12+).**
**18.00 "Бай бакса" (12+).**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.15 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Путешествие на край Земли". Сериал (16+).**
**22.00 "Дознание" (16+).**
**23.00 "Рыцарь-тамплиер". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Бронзовый сезон Лучшие матчи КХ "Салават Юлаев" в чемпионате КХЛ 2015-2016". "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань) (6+).**

## 19 ИЮЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.05 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.05 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Это Я" (16+).
13.55, 18.45 "Давай поженимся!" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Хорошие руки". 11-я и 12-я, заключительная, серии (16+).
23.35 "Винил". Сериал (18+).
00.35 "Выживут только любовники". Худ. фильм (18+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Простая жизнь". 5-8 серии (12+).
00.50 Торжественная церемония закрытия XXV Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
02.10 "Семейный детектив". Сериал (12+).
03.50 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Зеркальце" (0+).**
**10.30 "Физра" (6+).**
**10.45 "Джинкс" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Фанташ" (0+).**
**15.15 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Красная кнопка" (16+).**
**16.45 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Орнамент" (0+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.15 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.30 "Путешествие на край Земли". Сериал (16+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Листья травы". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Бронзовый сезон. Лучшие матчи ХК "Салават Юлаев" (6+).**

## 20 ИЮЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.05 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Это Я" (16+).
13.55, 18.45 "Давай поженимся!" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Влюбленные женщины". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.40 "Гоморра". Сериал (18+).
01.55, 03.05 "Идеальная пара". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.15 "Утро России".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Простая жизнь". 9-12 серии (12+).
00.50 "Белая гвардия". 7-я и 8-я серии. Военно-драматический сериал (16+).
02.45 "Семейный детектив". Детективный сериал (12+).
03.35 "Битва за Луну. Луноход против астронавтов" (12+).
04.325 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30 "Бауырһаҡ" (0+).**
**10.45 "Джинкс" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15, 01.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 20.15 "Полезные новости" (12+).**
**16.00 "Наука 102" (12+).**
**16.45 "Моя планета - Башкортостан"**
**17.15 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.15 "Сируси" (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Морские динозавры"**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Бруклинские полицейские". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Бронзовый сезон. Лучшие матчи ХК "Салават Юлаев" (6+).**

## 21 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.05 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Это Я" (16+).
13.55, 18.45 "Давай поженимся!" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Влюбленные женщины". 3-я и 4-я серии (16+).
23.35 ""Гоморра". Сериал (18+).
01.40, 03.05 "Джулия". Худ. фильм (12+)
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Простая жизнь". 13-16-я, заключительная, серии (12+).
00.50 "Белая гвардия". 9-я и 10-я серии. Военно-драматический сериал (16+).
02.40 "Семейный детектив". Детективный сериал (12+).
03.35 "Храм для Онегина. После славы" (12+).
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 17.15 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**10.30 "Преград.net" (6+).**
**10.45 "Джинкс" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Яйляу" (0+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 18.00, 20.15 "Полезные новости" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Будьте как дома" (16+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.15 "Сируси" (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Морские динозавры".**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Он хуже меня". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Бронзовый сезон. Лучшие матчи ХК "Салават Юлаев" в чемпионате КХЛ 2015-2016 гг. (6+).**

## 22 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 05.00 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал" (12+).
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.20 "Это Я" (16+).
13.55, 18.45 "Давай поженимся!" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Три аккорда" (16+).
23.20 "Мисс Переполох". Комедия
01.05 "Морпехи". Военная драма (18+).
03.15 "Приятели из Беверли Хиллз". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Юморина" (12+).
23.00 "Букет". Мелодрама (12+).
01.00 "Услышь мое сердце". Мелодрама (12+).
03.00 "Розы с шипами для Мирей. Самая русская француженка" (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Борсаҡ" (0+).**
**10.30 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**10.45 "Большое путешествие в глубь океанов".**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Четыре времени любви" (12+).**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**14.00 "Хазина" (0+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.15 "Перекличка" (6+).**
**15.30 "Космические каникулы" (0+).**
**15.45 "Моцарт-суперзвезда".**
**16.45 "Время башкирское" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.15 "Сируси" (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Опасная гастроль". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Бронзовый сезон. Лучшие матчи ХК "Салават Юлаев" (6+).**

## 23 ИЮЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.35, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.35 "Синдром дракона". Сериал (16+).
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Смак" (12+).
10.50 "Александр Кайдановский. Сжимая лезвие в ладони" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Теория заговора" (16+).
14.15 "На 10 лет моложе" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Будьте моим мужем". Худ. фильм (12+).
16.55 "Мирей Матье. В ожидании любви" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
19.05 "Муслим Магомаев. "Ты моя мелодия".
20.40 "Время".
21.00 Футбол. Суперкубок России. ЦСКА - "Зенит". Прямой эфир.
23.00 "КВН". Премьер-лига (16+).
00.35 "Терминатор". Фантастический боевик (16+).
02.35 "Белые люди не умеют прыгать". Худ. фильм (16+).
04.45 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

04.55 "Красавец-мужчина". Худ. фильм.
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Сто к одному".
10.05 "Личное. Наталия Селезнева" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Мелодия любви". Худ. фильм (12+).
13.10 "Даша". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Даша". Продолжение фильма (12+).
17.25 Юбилейный концерт Валерия Леонтьева.
20.00 "Вести".
20.35 "Сила Веры". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
00.35 "Любви все возрасты..." Худ. фильм (12+).
02.40 "Услышь мое сердце". Худ. фильм (12+).
04.35 "Комната смеха".

### БСТ

**07.30, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Все псы попадают в рай" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "У дачи" (12+).**
**12.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**12.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 Творческий вечер Рагиды Янбулатовой (12+).**
**19.00 "Бай" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Фазиль Искандер".**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30, 02.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+).**
**23.45 "Киберспорт" (16+).**
**01.45 "Личность" (12+).**

## 24 ИЮЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Синдром дракона". Сериал (16+).
06.00 Новости.
08.10 "Служу Отчизне!"
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье".
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Маршрут построен".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Дачные феи".
12.45 "Фазенда".
13.20 "Люди, сделавшие Землю круглой" (16+).
15.20 "Что? Где? Когда?" Интеллектуальное казино.
16.40 "Михаил Танич. Последнее море". Док. фильм (12+).
17.45 "Достояние республики".
19.30 Музыкальный фестиваль "Голосящий КиВин" (16+).
21.00 "Время".
21.20 Музыкальный фестиваль "Голосящий КиВин". Продолжение (16+).
23.00 "Французский транзит". Криминальная драма (18+).
01.30 "Сухое прохладное место". Худ. фильм (12+).
03.25 "Модный приговор".
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.10 "Мой нежно любимый детектив". Худ. фильм.
07.00 "Мульт утро".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
14.00 "Вести".
14.20 "Обет молчания". Худ. фильм (12+).
16.15 "Ключи от прошлого". 8 серий. Мелодраматический сериал (16+).
20.00 "Вести".
21.00 "Ключи от прошлого". Продолжение сериала (12+).
01.05 "Срочно ищу мужа". Мелодрама (12+).
03.10 "Зеркала. Прорыв в будущее".
04.00 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
04.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Лев Макс" (0+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай" (12+).**
**09.30 "Будьте как дома" (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ".**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Автограф" (12+).**
**15.30 "Семь чудес Башкортостана" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 Н.Асанбаев. "Вишневая гора" (12+).**
**19.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**19.30 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**19.45 "Белорусский вокзал". Худ. фильм (0+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Красная кнопка" (16+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.30 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.30 "Феникс в ярости". Худ. фильм.**

✓ *Әгәр ҙә бер туҡтауһыҙ киләсәк тураһында уйлайһың икән, ғүмер уҙғанын һиҙмәй ҙә ҡалырһың.*

*(Т. Карлейль).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# АТАЙҘАР ҺҮҘЕ - АҠЫЛДЫҢ ҮҘЕ

**(16 июль - Бөтә Рәсәй Атайҙар көнө)**




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**27-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Мамыҡ. Ҡосағым. Нигеҙ. Ашыҡ. Болан. Һунарсы. Ҡуллама. Уртаҡ. Уҙаман. Абрар. Аят. Солох. Иртә. Майд. Мираж. Млава. Ауыл. Гарри. Ергән. Аҡҡурай. Шафиҡов.

**Вертикаль буйынса:** Ҡаралама. Аллаярова.Андромаг. Ҡырҡ. Арғаяш. Һауа. Мусин. Алдар. Ингури. Грамматика. Ураҙа. Ҡымыҙ. И(Й)ов. Быу. Сәмле. Алло.Ныҡ. Хажин.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА



# ЙОРТ ЙОНДОҘҠАЙЫ

**Һәр кемебеҙ баҡсала бөтөн ерҙе ҡаплап үҫкән йомшаҡ ҡына ҡый үләнен (мокрица) беләләр. Ғәҙәттә, уны себештәргә ашаталар. Был үҫемлектең рәсми исеме - йорт йондоҙҡайы (рәсми атамаһы - звездчатка средняя), сөнки сәскәләре йондоҙға оҡшап тора. Бөтөн майҙанды мүк кеүек ҡаплап алғанға күрә, уны баҡсасылар бигүк өнәп бармай һәм уның ниндәй дауалау сифаттарына эйә икәнен уйлап та ҡарамай.**

Йорт йондоҙҡайы файҙалы һәм витаминдарға байлығы буйынса бик күп культуралы үҫемлектәрҙән алда тора. Уның ғүмере ни бары бер ай. Әммә орлоҡтары ергә ҡойолоп, яңынан-яңы шытымдар биреп тора. Селекторҙар һәм ғалимдар раҫлауынса, орлоҡтары 30 йылға тиклем шытым бирә. Хатта тамыры менән йолҡоп алынған саҡта ла, ул барыбер үҫеүен дауам итә.

Үҫемлекте һыйырҙарға биргәндә, уларҙың һөтө арта. Яңы сыҡҡан үләнде кулинарияла ҡулланырға, унан витаминлы салат эшләргә мөмкин, халыҡ медицинаһында ла ул киң ҡулланылыш тапҡан. Уны нисек йыйып, нисек һаҡларға һуң? Үҫемлек тулыһынса дауалау сеймалы булып һанала, уны сәскә атыу мәлендә әҙерләй башлайҙар. Шулай ҙа, май башында йыйыу файҙалыраҡ - үлән йомшаҡ та, һутлы ла. Уны ерҙән тамыры менән йолҡоп алып, тупраҡтан таҙартып, киптерергә кәрәк. Киптерелгән үләнде туҡыма тоҡта бер йыл һаҡларға мөмкин. Кипкән сеймалдан төнәмтмәләр, компрестар эшләйҙәр. Ул ауыртыныуҙан арындыра, шешенеүҙе бөтөрә. Ата-бабаларыбыҙ уны эс китеүҙән, ҡалҡан биҙе һәм ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан файҙаланған. Был үлән авитаминоздан арынырға һәм организмды кәрәкле витаминдар менән тулыландырырға ярҙам итә. Күрмәлекһеҙ генә булыуға ҡарамаҫтан, уның биохимик составы бик бай, бигерәк тә аскорбин кислотаһы (С витамины) лимонға ҡарағанда дүрт тапҡырға күберәк. Һабаҡтарында сиал кислотаһы, эфир майҙары һәм органик матдәләр бар. Ике балғалаҡ үлән организмды бер тәүлеккә етерлек каротин менән байыта. Шулай уҡ унда йәшлекте оҙайтыусы һәм капиллярҙарҙы таҙартыусы Е витамины, сапониндар, ретинол, липидтар, организмды нормаль торошта тотоусы микроэлементтар (тимер, кальций, магний, бром, калий) бар. Үҫемлеккә дауалау сифаттары биргән матдәләр микробҡа, елһенеүгә ҡаршы тороу, ҡаҡырыҡты сығарыу, тынысландырыу, ҡанды туҡтатыу, үт ҡыуыу сифаттарына эйә. Төнәтмәләрен ауыртыуҙы баҫыу, тонусты күтәреү, антисептик һәм бәүел ҡыуыусы булараҡ ҡулланалар.

Бәпкә үләне халыҡ дауасыларында юғары баһалана. Уның төнәтмәләрен улар кешене эс ҡатыуҙан, эсәк тракты эшмәкәрлеген тергеҙеүҙә, моториканы нормаға килтереүҙә, ҡурылдайҙы, үпкә шешен дауалауҙа ҡуллана. Ул - ҡаҡырыҡлы йүтәлдән иң яҡшы дауа. Быуҙа быҡтырылған үҫемлек быуындар ҡаймыҡҡанда файҙаланыла, радикулит һәм быуынға тоҙ ултырғанда (подагра) бик яҡшы дауа. Үләндең һуты авитаминоздан арынырға, иммун системаһын нығытырға ярҙам итә. Уны ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлеге боҙолғанда, анемия ваҡытында, күкрәк ауыртҡанда һәм зәңге ауырыуында ҡабул итәләр. Составында булған химик матдәләрҙең шештәрҙе бөтөргәндә ярҙамы ҙур. Сеймалды ҡан тамырҙарын холестериндан таҙартыу һәм матдәләр алмашыныуын көйләү өсөн файҙаланалар. Ҡан баҫымы юғары булғанда һәм нервы ҡуҙғығанда төнәтмәһе ярҙам итә.

**Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Июль (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (14) дүшәмбе | 3:36 | 5:06 | 13:30 | 20:08 | 21:38 | 23:08 |
| 19 (15) шишәмбе | 3:37 | 5:07 | 13:30 | 20:06 | 21:36 | 23:06 |
| 20 (16) шаршамбы | 3:38 | 5:08 | 13:30 | 20:05 | 21:35 | 23:05 |
| 21 (17) кесе йома | 3:40 | 5:10 | 13:30 | 20:03 | 21:33 | 23:03 |
| 22 (18) йома | 3:42 | 5:12 | 13:30 | 20:02 | 21:32 | 23:02 |
| 23 (19) шәмбе | 3:43 | 5:13 | 13:30 | 20:00 | 21:30 | 23:00 |
| 24 (20) йәкшәмбе | 3:45 | 5:15 | 13:30 | 19:59 | 21:29 | 22:59 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ШУНДАЙ КӘҢӘШ*

# ҮКСӘГЕҘ ЯРЫЛҺА...

**Кемдеңдер үксәһе ярылып йонсотһа, йә иһә ҡулы сепейләп яфалаһа, хәтәр шәп май тәҡдим итмәксемен.**

Йәй көнө ауылға ҡайтҡан һайын эшләп китәм дә ул майҙы, йыл буйына әсәйем рәхәтләнә. Хатта күрше-тирәгә тарата. Әҙерләүе лә ауыр түгел: 1 стакан көнбағыш майын табала ныҡ итеп ҡыҙҙырырға, аҙаҡ ҡайнар майға дүрткә ярылған ҙур ғына һуғанды һалып ебәрергә. Уны алтынһыу төҫкә инеү менән һөҙөп алаһың. Шунан бер бит ҡағыҙ битендәй йоҡа ғына балауыҙҙы (ҡортсоларҙан алырға була) майға һалып ирекәс, табаны ситкә алып ҡуяһың. Бер нисә сәғәттән май әҙер. Уны бушаған крем һауытына тултырып туңдырырға, оҙаҡ ваҡыт файҙаланырға була.

**Гөлназ ИШЕМҒОЛОВА.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылған уҡыусыларыбыҙҙың тәҡдимдәрен һәр һанда күрһәтә киләбеҙ. Бөтәһе лә уҡырға тейешле китаптар исемлеге яйлап үҫә бара. Әлегә ул бына нindәй:**

**1. "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы**
**2. М. Аҡмулланың шиғырҙар йыйынтығы**
**3. Ҡол Ғәли "Йософ ҡиссаһы"**
**4. Ризаитдин Фәхретдин "Нәсихәттәр"**
**5. Ғайса Хөсәйенов "Тормош" һәм "Донъя" парсалар китаптары**
**6. Шәйехзада Бабич, "Ғазазил" поэмаһы, шиғырҙар.**

**Ниһайәт, йәштәр ҙә акцияһыбыҙға ҡушылды. Өфө дәүләт нефть техник университетын тамамлаусы йәш белгес Надир Исҡәндәров Зәйнәб Биишеваның "Кәмһетелгәндәр" трилогияһын уҡырға тәҡдим итә.**

- Техник һөнәр үҙләштерһәм дә, буш ваҡытымда үҙемде ҡыҙыҡһындырған художестволы әҫәрҙәрҙе уҡырға яратам. Трилогия ижад иткән тәүге ҡатын-ҡыҙ яҙыусы булараҡ та, бала сағы күрше ауылда үткән яҡташым - Зәйнәб Биишеваның ижады мине күптән ҡыҙыҡһындыра ине. Уның "Кәмһетелгәндәр", "Оло Эйек буйында", "Емеш" романдарын уҡып сыҡтым. Был әҫәрҙәрҙә һүрәтләнгән хәл-ваҡиғалар, халыҡтың көнкүреше ғәжәпләнерлек итеп тасуирланған. Аслыҡ-яланғаслыҡта, ауыр тормош көткән кешеләрҙең яҙмыш һынауҙарын үтеп, кешелек сифаттарын юғалтмауы һоҡландырҙы. Төп геройҙарҙың яҙмышы тәрләсә, ләкин береһе лә ҡыйынлыҡтарға бирешеп, зарланып ултырмай. Бөгөн беҙ ниндәй етеш тормошта йәшәп тә, тамағыбыҙ туҡ, өҫтөбөҙ бөтөн булһа ла донъя менән ҡәнәғәт түгелбеҙ. Шуға күрә, "Айфон"ым юҡ", "диңгеҙ буйында ял итергә быйыл барманыҡ" тип, йәки башҡа төрлө сәбәп табып зарланған йәштәр "Кәмһетелгәндәр" трилогияһын мотлаҡ уҡырға һәм фәһем алырға тейеш. Бынан тыш, Зәйнәб Биишеваның әҫәрҙәрендә башҡорт теленең байлығы сағыла. Ошонон менән дә был романдар тыуған телдә онотоп барған, урыҫса һәм башҡортса һүҙҙәрҙе ҡушып һөйләшкән замандаштар өсөн әһәмиәтле. Башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондына ингән "Кәмһетелгәндәр" трилогияһы мотлаҡ "Башҡорт китабы топ-100+" исемлегендә булырға тейеш.

Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына һеҙ ҙә ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакцияһыбыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

ВИКТОРИНА

## ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР



**Флүр Ғәлимовтың "Аҙғын тәүбәһе" трилогияһы буйынса һорауҙар**

**1. Афғанстан республикаһында барған һуғышта алған яраларынан дауаланған Салауат Байғазиндың нимәгә тартылыуы уның хәл-торошона ыңғай тәьҫир итә?**
а) ҡатын-ҡыҙға;
б) диңгә;
в) ижадҡа;
г) мистикаға.

**2. Автор кешелекте ниндәй аҙғынлыҡ тураһында айырыуса иҫкәртә?**
а) яҡшылыҡҡа тәрләнгән яуыҙлыҡ тураһында;
б) хәмер һәм башҡа аҙҙырғыс, емерткес тәьҫирле нәмәләр тураһында;
в) идеалдарҙың, инаныстарҙың емерелеүе хәүефе тураһында;
г) маҡсатһыҙлыҡ, рухи ҡыйралыштар тураһында.

**3. Салауат Байғазин йәшәү мәғәнәһен нимәлә аса?**
а) мөхәббәттә, икенсе ярты́ңйәрендә табыуҙа;
б) Әҙәм менән Һауа ҡыуылған ожмахҡа ҡабаттан әйләнеп ҡайтыуға яраҡлы булыуҙа;
в) кешеләргә изгелектәр ҡылып йәшәүҙә;
г) ошо донъяла үҙ-үҙеңде табыуҙа.

**4. Автор фекере буйынса, донъяны нимә ҡотҡарыр?**
а) мөхәббәт;
б) матурлыҡ;
в) иман;
г) гуманлылыҡ.

**Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем ошо һорауҙарға беренсе булып яуап биреп, беҙгә хәбәр итеп өлгөрә, шуға Флүр Ғәлимов үҙенең автографлы "Аҙғын тәүбәһе" китабын бүләк итә. Алдағы уйындарҙа килгәндә, бына улар, викториналар еңеүселәре: Ноғман Мусиндың "Шунда ята батыр һөйәге" романы буйынса - Иглин ҡасабаһынан Мәҙинә Мөьминова, Гөлнур Яҡупованың "Ҡатындар" трилогияһы буйынса - Сибай ҡалаһынан Фәүис Исламғолов еңеүсе тип табылды.**

**Иҙел РӘХИМОВ.**

ҺҮҘЛЕК

## БЫЛ ҮЛӘНДЕҢ АТАМАҺЫ НИСЕК?



**Һары сейә** - черешня, вишня птичья
**Һарымһаҡ** - чеснок
**Һары ромашка** - пупавка красильная
**Һарына** - лилия кудреватая
**Һары томбойоҡ** - кубышка желтая
**Һары турғай ҡамышы** - канареечник
**Һары туманаҡ** - володушка золотистая
**Һары әрем** - полынь крупноцветковая
**Һары умырзая** - адонис весенний, горицвет весенний
**Һарыҡ борсағы** - нут бараний
**Һарыҡ күҙе** - девясил британский
**Һеперткебаш** - метлица обыкновенная, подденка
**Һимеҙут** - солерос европейский
**Һоло** - овес
**Һолобаш** - овсец пустынный
**Һолоүлән** - овсянница луговая
**Һорғолт кәҙә сәскәһе** - икотник серо-зеленый
**Һөтлә билсән** - осот розовый
**Һөтүлән** - молочай лозовый
**Һуған** - лук
**Һыйырғойроҡ** - коровяк черный
**Һыйыр теле** - серпуха
**Һыйыр шалҡаны, аңра шалҡан** - брюква, рапс
**Һырғанаҡ** - облепиха
**Һырлан** - липучка
**Һырлауыҡ** - плющ
**Һырмауыҡ** - ясменник
**Һыу боросо** - водяной перец, горец перечный

**С. ЙӘНТҮРИН, Ғ. ХИСАМОВ.**
**"Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге".**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АЙЫРЫЛМАҪ ДУҪЫҢА...

### ҡайырылмаҫ һүҙ әйтмә

Ҡәмәрҙең һиммәте - ҡашында, ирҙең ҡиммәте - башында.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Нимә отошло: ситтәрҙең етешһеҙлектәренә күҙ йомоумы, әллә һинең етешһеҙлектәреңә ситтәрҙең күҙен йомоуымы?

**(А. Бабель).**

Шайтан үҙенә ҡорбан эҙләп донъя ҡыҙырмай, уның ҡабул итеү бүлмәһендә ҡорбандар сират тора.

**(Лао-цзы).**

Марста тормош бар, тигәнде Айҙан ҡолап төшкән кеше генә раҫлай алыр...

**(И. Шевелев).**

Әгәр ҙә бер туҡтауһыҙ киләсәк тураһында уйлайһың икән, ғүмер уҙғанын һиҙмәй ҙә ҡалырһың.

**(Т. Карлейль).**

Һәр кем үҙ тормошонда осратырға тейешле кешеһен осрата.

**(Натан Эйдельман).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ батшаға ҡарсыға ҡошсоғон тотоп килтерәләр. Батшаның хеҙмәтсеһе ҡошсоҡто тәрбиәләп үҫтерә, ләкин осорға өйрәтә алмай. Ҡарсыға ҡошсоҡ сағында уҡ ҡундырылған ағас ботағынан айырылырға теләмәй, тик кенә ултырыуын белә. Батша йыш ҡына хеҙмәтсеһенең башҡа ҡоштарҙы осорға өйрәтеүен, ә был ҡарсығаны урынынан ҡуҙғата алмай яфаланыуын тәҙрәнән күҙәтеп ултыра. Хеҙмәтсеһен йәлләп китә бер саҡ батша һәм илгә хәбәр ебәрә: кем дә кем ҡарсығаны осорға өйрәтә... Иртәгәһенә иртән тәҙрә аша ҡарсығаның осоп йөрөгәнен күргән батша был мөғжизәне тормошҡа ашырған кешене эргәһенә килтерергә бойора. Бер крәҫтиән икән ул. "Һөйлә, һин нисек ҡарсығаны осорға мәжбүр иттең?" ти уға батша. "Уның бер ауырлығы ла булманы, батшам, - ти крәҫтиән. - Мин ҡарсыға ултырған ботаҡты бысып ташланым. Шунда ҡарсыға үҙенең ҡанаттары барлығын аңлап, осоп китте..."**

**Ә бит кешеләр ҙә шулай. Берәүҙәр үҙҙәрендә ҡанат барлығын белмәй, ултырған ерендә ултыра бирә. Тормош ошо ғәҙәт ботағын һындырып ташлаһа ғына улар ҡанаттары барлығын исҡә төшөрә һәм "осоп" китә. Икенселәрենең бөтөн нәмәһе бар, улар бына шул булғанды юғалтырға теләмәй, бер урында ултыра ла ултыра. Бәлки, улар ултырған ботаҡты ла бысырға кәрәктер, улар ҙа осоуҙың ни икәнен татып ҡарарға тейештер бит? Ҡайһы саҡта тәүҙә бик насар булып тойолған көтөлмәгән ваҡиғаларҙың да осоу мөмкинлеге биреүе ихтимал бит. Осаиыҡ!"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 15 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4417
Заказ - 1247/07